✓ ***Төрлө баш күтәреүҙәр, революциялар өсөн яуаплылыҡ халыҡ иңендә түгел, ә хакимдар иңендә икәненә һәр саҡ инандым. Хакимдар ғәҙел, уяу булһа, халыҡ ризаһыҙлығын ваҡытында атҡарылған реформалар менән иҫкәрткән осраҡта баш күтәреүҙәр булмаясаҡ.***

***И. ГЕТЕ.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30 АПРЕЛЬ
6 МАЙ
(АЛАҒАРАЙ - ҺАБАНАЙ)
2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№18 (436)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Алдан ҡысҡырған кәкүктең...**

йәғни Спортта ла көс түгел, аҡыл кәрәк



6

**Тоҙло шишмәләр тирәһендә**

башҡорт эҙҙәре



7

**Ахырызаман түгел, ә мөхәббәт заманы килә -**

Хоҙайға яҡынла, ауранды таҙарт, әҙерлән...



8-9

**Сәнғәт диңгеҙе капитаны...**

Стәрлетамаҡ театрында ла бар



11

14 **ТВ-программа**


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Эш урындары булдырмай тороп, ауылды эскелектән һәм көрсөктән арындырыу мөмкин түгелме?

***Әмир НАРБУТИН, Хәйбулла районы Йәнтеш ауыл хакимиәте башлығы:*** Ирмен тигән ир эште кемдәндер көтөп ултырмай, ә үҙе таба. Ауыл хакимиәте башлығы булараҡ, мин ауылдаштарға эш менән ярҙам итергә тырышам. Район хакимиәте лә бәләкәй эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә теләүселәр өсөн шарттар булдыра. Субсидиялар ҙа ҡаралған. Үҙ көсөң менән аҡса эшләргә була икән, тигән хәҡиҡәтте аңлаһа, кеше бер ваҡытта ла эш юҡлыҡҡа һылтанмай. Ауылда быны аңлаған егеттәр ҙә бар - улар ағастан көнкүреш тауарҙары яһап һата, ғаилә бюджетына аҡмаһа ла, тама барыбер. Боронғо кәсептәрҙе тергеҙеп кенә лә ауылда аҡса табырға була ул. Тик ятҡан әйберҙе лә алтын итергә мөмкин. Таш сығарырға, ағас эшкәртергә, мал-тыуар, ҡош-ҡорт үрсетергә, балыҡсылыҡ менән шөғөлләнергә кәрәк беҙгә. Башлап ебәрер өсөн тәүәккәллек кенә кәрәк. Банктан кредит ал да, бер сезон эсендә аҡсаға әйләндер ҙә бир. Бына, мәҫәлән, ял итергә килгән кешеләр өсөн ауыл эргәһенән генә аҡҡан Һаҡмар йылғаһы буйында дүрт-биш кеше бер булып мунса бурап ултыртырға, уларға ауыл ризығы, төрлө һуттар, сәй, миндектәр, төрлө шифалы үләндәр төнәтмәләре тәҡдим итергә була. Миненсә, был да бик шәп кәсеп. Халҡыбыҙҙа сәйер бер холоҡ бар: килеп сыҡмаған эшкә ҡул һелтәү. Бик күптәр үҙҙәренә маҡсат ҡуя ла, иртәгәһенә уңышһыҙлыҡҡа осраһа, бирешә, еңелә, "минән килеп сыҡмай" тип әллә кемгә үпкәләй. "Ҡайғыһын" баҫыр өсөн хәмергә йәбешә. Башланған эшен теләгәнсә тамамлай алмағанға күрә, ул был эшен араҡы менән йөпләп, тамамлап ҡуя, йәнәһе. Икенсе төрлө әйткәндә, хыялын ергә күмә. "Тырышҡан - ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан" тигән мәҡәл бар бит. Ҡабат-ҡабат әйләнеп ҡайтырға кәрәк кисектергән маҡсатыңа.

***Фәриҙә ГӘРӘЙШИНА, Балтас районы Штанды ауыл хакимиәте башлығы:*** Ауылда эш урындары аҙ, әлбиттә. Әммә һәр кемдең үҙ шәхси хужалығы менән шөғөлләнеү, шуның ярҙамында аҡса эшләү мөмкинлеге бар бит. Малсылыҡ менән шөғөлләнергә теләгән кешеләргә субсидиялар ҙа бирелә хәҙер. Беҙҙең ауылда, мәҫәлән, күпләп мал үрсетеүселәр һөт тапшыра, умарта тотоусылар бал һатып аҡса таба. Уларҙың йыл һайын тиерлек автомобилдәрен яңыртыу, балаларын юғары уҡыу йорттарында уҡытыу мөмкинлеге бар. Эшләйем тигәнгә шөғөл табып була, тик бер яуыз ҡамасаулай: эскелек. Хатта кемдәрҙер ауылдаштарын эсереүҙе кәсеп итеп тә алды. Бының менән кемдеңдер яҙмышын емереүен дә аңламай улар. Аңлаһалар ҙа, үҙҙәрен үҙҙәре еңә алмай, сөнки, берҙән, үҙенең организмы ошо көмөшкәгә ихтыяж кисерә, икенсенән, аҡса эшләүҙең иң еңел юлы ошо. Аҡса эшләүҙең башҡа юлдары күберәк тырышлыҡ, күберәк фиҙәкәрлек, күберәк оҫталыҡ талап итә шул. Көмөшкә менән һатыу итеүселәргә хоҡуҡ һәм тәртип һағында тороусылар нығыраҡ тотонһа, улар ауылды эскеселәрҙән дә ҡотҡарыр, шул уҡ ваҡытта ирҙәребеҙ аҡса эшләүҙең башҡа юлдарын да үҙләштерә башлар ине.

***Миҙхәт ХАЛФИН, Баймаҡ муниципаль районының йәштәр комитеты рәйесе:*** Эскелектең төп сәбәбе эшһеҙлек кенә түгел. Уның сәбәптәре киләсәгенә, балаларың яҙмышына битарафлыҡ, закондарҙың йомшаҡлығы һәм рухи көсһөҙлөккә бәйләнгән. Көмөшкәне бомба менән сағыштырып, йәмғиәтте ҙур карап тип күҙ алдына килтерһәк, етештереүсе был "бомбаны" кемгә генә бирмәһен, яҡын күршеһенәме, алыҫыраҡ йәшәгән ауылдашынамы, уның "шартлау" афәте уның үҙенә лә туранан-тура ҡағыласаҡ. Был хәҡиҡәтте аңлау өсөн мотлаҡ фажиғә, тетрәнеү кисерергә кәрәкме ни инде? Беҙҙең илдә көмөшкәне үҙең өсөн генә етештереү әлегә закон тарафынан тыйылмаған. Закон һаҡсыларының был кәсепте тулыһынса юҡ итергә вәкәләттәре етмәүенең ваҡытлыса күренеш булыуына ышанғы килә. Көмөшкә менән һатыу итеү генә түгел, уны үҙең өсөн ҡыуыу ҙа күптән ҡәтғи рәүештә тыйылырға тейеш. Айыҡлыҡ хәрәкәте лидерҙары дөрөҫ әйтә: бар бәләнең башы - һыра, араҡы, тәмәке рекламаларында. Балаларҙы ла, йәштәрҙе лә арбай был рекламалар. Ошо мауығыуҙарға бирешмәүселәр, әлбиттә, эшле лә, ашлы ла була ала. Бигерәк тә ауыл ерендә эшһеҙ булыу мөмкин түгел. Шуға ла, тәүҙә "йәшел йылан"дан ҡотолайыҡ, унан һуң халыҡты үҙенә эш табырға өйрәтәйек, тип әйтке килә.

***Сәкинә МУСИНА, уҡытыусы:*** Элек, колхоздар гөрләп торғанда, эшһеҙлек булмағанда ла эстеләр инде. Хеҙмәтте данлап эсәләр ине. Сәсеү бөттөмө - колхоз рәйесе баҫыу башына бер йәшник араҡы килтереп ҡуя, уңыш йыйып алдылармы - тағы шул араҡы менән "йыуыуҙар" башлана. Халыҡты эсереүҙең сәбәптәре табылып ҡына торҙо. Тап шул йылдарҙа ныҡлап өйрәнде лә инде ауыл халҡы эсергә. Хәҙер тағы бер сәбәп табылды - эшһеҙлектән эсәләр, имеш. Ялҡаулыҡты аҡлар һүҙ генә был. Эсмәгәндәр ялҡаулыҡты ла еңер, үҙ йүнен үҙе күреп, булмаған эште лә булдырыр. Айығырға кәрәк, йәмәғәт!

**Иҙел РӘХИМОВ яҙып алды.**

### ТУҠТА, МӘЛ!



## Уяныу

***Тәүге бөрө тиртте... Ғәжәп сыңдан***
***Уянғандай булды Ер, Ғаләм.***
***Гүзәллектең йәшел нуры булып***
***Ҡайынҡайҙы йәмләр мең әләм.***

***Умырзая ҡайнар тыны менән***
***Йыртты мәрттең сихыр юрғанын.***
***Ҡар батшаһы мәшәҡәтен бөтөп,***
***Егеп тора оскор юрғаһын.***

***Донъя ғәмһеҙлеге ҡыш икән ти,***
***Уның әүҙемлеге - яҙ ғына.***
***Йәмһеҙ шәүләләргә йәмдәр бирер***
***Яҙ ул - балҡып янып таң ғына.***

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# ДАЕШЬ КРИМИНАЛ -
## гәзитегеҙгә яҙылам

**Икенсе ярты йыллыҡҡа гәзит-журналдарға яҙылыу бара. Был мәлдә һәр матбуғат сараһы һағайыу менән ҡаршы алалыр, сөнки бөгөн тираж йыйыу бик ауыр. Тираж, билдәле булыуынса, баҫма абруйының төп күрһәткесе. Шуға күрә кампания ваҡытында иң һыҙғанып эшләргә тура килә: гәзиткә материалдар йыйырға ла, ойошма, предприятиелар, ауылдар буйлап йөрөп өлгөрөргә лә кәрәк.**

Әле бына тәүге ярты йыллыҡҡа гәзиткә яҙҙырып, ауылдарҙа йөрөгәндә ишеткән теләк-тәкдимдәрҙе, үтенестәрҙе барлап ултырыуым. Уҡыусыларыбыҙ һораған әҙәби әҫәрҙәр ҙә, шиғри кұстәнәстәр ҙә мул ғына булды, буғай, беҙҙең Мәләүез районы гәзите "Көнгәк"тә. Табип кәңәштәре, райондың яңылыҡтарына, алдынғы хеҙмәтсәндәр тураһында һүрәтләмәләргә лә ҙур ғына урын бирелде. Енәйәттәргә арналған хәбәр уҡырға яратыусыларҙың ихтыяжын да ҡәнәғәтләндергәнбеҙҙер тип уйлайым. Ни тиклем прокуратура материалдары баҫтыҡ, әҙналыҡ хроникала иң ҡурҡыныс енәйәттәрҙән миҫалдар килтерҙек. Юғиһә, бер ауылда оло йәштәрҙәге ағай: "Даешь криминал! Яҙылам!" - тип ҡалғайны. Беҙгә һәр уҡыусы ҡәҙерле, уларҙың үтенесе - ҡанун.

Криминал тигәндән, һуңғы осорҙа мин дә ошо юҫыҡтағы материалдар уҡырға, тапшырыуҙар ҡарарға әүәҫләнеп китеүемде аңланым. Үҙәк матбуғат баҫмаларынан иң тәүҙә енәйәттәргә арналған сюжетлыларын һайлап уҡыйым. Ә телевизорҙан НТВ, РенТВ каналдарындағы "ЧП", "Экстренный вызов" кеүек тапшырыуҙар бергә тура килһә, пульт төймәһен алмаш-тилмәш баҫып, иң ҡурҡыныҫлыраҡ эпизодты ҡарайым. Рәсәй төбәктәренең береһендә бер ир ишараты 12 йәшлек үгәй улын бысаҡ менән сәнскеләп үлтерә... Өфөлә 5 йәшлек ҡыҙыҡай урамда ҡалдыҡтар менән туҡланған... "Иң яҡшы уҡытыусы" исемен йөрөтөүсе педагог үҫмергә атҡан... Ғөмүмән, телетапшырыуҙар программаһы ғәҙәттән тыш хәлдәр яратыусыларҙың ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә. "Дорожный патруль", "Дорожные войны", "Особо опасен", "Следствие вели...", "Криминаль хроника" - минең яратҡан тапшырыуҙарыма әйләнде бер мәл. Өйҙәгеләр ҙә быға иғтибар итмәй ҡалманы.

Был тапшырыуҙарҙы ҡарау нимә бирҙе һуң? Миндә оҙаҡламай табиптарға ла, уҡытыусыларға ла, ғөмүмән, бөтә кешеләргә, эргә-тирәмдәгеләргә шикселлек, ышанмаусанлыҡ барлыҡҡа килде. Ҡыҙыма көнөнә бер нисә тапҡыр "Ипле йөрө, таныш түгел кешеләр менән аралашма, тегеләйтмә-былайтма", тип шылтыратып алам. Хатта нисәмә йыл йәшәгән хәләл ефетем дә шикле булып күренә башланы. Кем белә, бәлки... Башҡалар ҙа бит ана береһе лә маньяк булып тыумаған, ә ниндәй енәйәттәр эшләгән, хатта кеше үлтереүгә барып еткән. Бер һүҙ менән әйткәндә, бөтә нәмә ҡара-һоро төҫтә күренә башланы.

Был хәлдән енәйәт тураһында тапшырыуҙарҙы ҡарамай башлағас ҡына ҡотолдом. Тормошом яңынан элекке халәтенә ҡайтты. Хәҙер гәзиттән яҡшы хәбәрҙәр генә эҙләйем. Ә телевизорҙы бөтөнләй ҡарамаҫҡа тырышам. Енәйәттәргә арналған мәҡәләләр баҫыуҙы һорағая теге ағайға "Күңелегеҙ тыныс, иртәгәһе көнөгөҙгә ышаныс булһын тиһәгеҙ, гәзиттәрҙән тик яҡшы хәбәрҙәр генә уҡығыҙ", тип әйтке килә.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

**Мәләүез районы "Көнгәк" гәзите хәбәрсеһе.**

ИШАРА

**Гәзитебеҙҙең 16-сы һанында "Президент блогы" рубрикаһында баҫылып сыҡҡан телдәр өйрәнеү тураһындағы фекерҙәрҙе уҡығас, шағирыбыҙ Рәми Ғариповтың "Туған тел" шиғыры күңелемдә ҡалҡып сығып, бөтә булмышымды биләне. Күптәр яттан беләлер был шиғырҙы:**

***Мин халҡымдың сәскә күңеленән***
***Бал ҡортондай ынйы йыямын,***
***Йыямын да йәнле ынйыларҙан***
***Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.***

# ИКЕ ТЕЛДЕ БЕЛЕҮҘӘН...
## бесәй ҙә ота

Эйе, башҡорт телебеҙ ынйылай гүзәл. Шағир яҙғанса, "Көслө лә ул, бай ҙа, ягымлы ла..." Әлбиттә, халыҡ ижадын, сәсәндәр һүҙен бар гүзәллеге, нескәлеге менән тойоу, аңлау бар кешегә лә тәтемәй. Төрлө милләттәрҙең теле ҡыҫырыҡланған дәүерҙә үҙ телеңдә аралашҡан ғаиләлә үҫеү, башҡорт телен, әҙәбиәтен уҡытҡан уҡытыусынан уңыу мөһим. Телдәр тураһында бер көләмәс тә бар бит. Бер бесәй өйөнөң мөйөшөндә яңы өң күреп ҡалып, "Унда сыҫҡан барҙыр, ул сыҫҡан йүгереп сығыр ине лә, тик был тирәлә бесәй барҙыр тип уйлап, ҡурҡып ултыралыр, шуға ла йүгереп сыҡмайҙыр", тип ҡайғыра. Ысынлап та, ул өңдәге сыҫҡан "Яҡты бүлмәгә сығып уйнап килер инем дә, ундa бесәй барҙыр", тип боҫоп ултыра икән. Ә бесәй "Әллә эт булып өрөп ҡарарғамы, эт булған тирәлә бесәй йөрөмәй бит, тип уйлар ул сыҫҡан", тип уйлап ала ла, тырышып-тырышып өрөүгә оҡшаш өндәр сығара. Ә сыҫҡан "Эт өрә, тимәк, унда бесәй юҡ", тип шатланып, яҡты бүлмәгә йүгереп сыҡһа, уны бесәй эләктереп алып, ҡабып та йота һәм үҙе: "Ҡайһылай һәйбәт икән үҙ теленән башҡа тағы бер телде белеүең", тип ялана...

Беҙгә лә һәйбәт, башҡортса ла, русса ла иркен аралашабыҙ. Беҙҙең урамда "Йомарт" тигән магазин асылғас, ул магазин хеҙмәткәрҙәренә тәүҙә башҡортса өндәштем, аңламаһалар ғына рус телендә һорау бирҙем. Шулай итеп, биш ҡыҙыҡайҙың башҡорт балаһы икәнен белдем. Улар хәҙер йылмайып, минең менән башҡорт телендә һөйләшә. Минә лә, уларға ла күңелле. Үҙебеҙҙең башҡорт мөхитен барлыҡҡа килтерҙек бит. Йәнә, кеше ике телде яҡшы белһә, бүтән телдәрҙе өйрәнеү һәләттәренең артып китеүен ғалимдар бик күптән иҫбат иткән.

Һеҙгә хат яҙып нөктә ҡуйҙым да, бесәй тураһындағы көләмәс урыныҙ һымаҡ, был хаҡта юҡҡа ғына яҙҙым, тип үкендем. Бер милләт тә икенсеһен "йотмаһын" ине һәм телдәрҙе белеү хакимлыҡ итеү өсөн генә ҡулланылһын ине, тигән уйға килдем.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

КЕМ АЛЫҠ!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу дауам итә. Вәғәҙә итеүебеҙсә, апрелдә лә гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә "Бүләгебеҙҙе кем алыҡ!" тип әйтмәксебеҙ. Сираттағы бағыусыбыҙ был юлы кеҫә телефоны тәҡдим итә.**

**Әйткәндәй,** кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө** менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп,** 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына яҙылыу өсөн яңы хаҡтарҙы хәбәр итәбеҙ: 50665 индекслыһына **340 һум 92 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшнигә юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киосҡынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **210 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**



Ейәнсура районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов РФ Хөкүмәте рәйесе Владимир Путин етәкселегендәге РФ-ның рәсми делегацияһы составында Дания Короллегендә булды. Рәсми саралар сиктәрендә ике илдең Премьер-министрҙары алдында Башҡортостан Республикаһы менән Dantoss компанияһы араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Килешеү энергияны һаҡлау, торлаҡ фонды, иҡтисадтың төрлө тармаҡтары өлкәһендә Башҡортостан менән Dantoss араһында хеҙмәттәшлек булдырыуҙы маҡсат итеп ҡуя.

✓ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте бойороғо менән Рөстәм Хәмитов ауыл хужалығы йүнәлешендәге профессиональ-техник училищеларға яҙғы баҫыу эштәрен үткәреү өсөн яғыулыҡ-майлау материалдары һатып алыуға 500 мең һум аҡса бүлде. Республикала БР Мәғариф министрлығы ҡарамағындағы 93 башланғыс профессиональ белем биреү учреждениеһының 48-е уҡыу хужалыҡтарына эйә. Уларға 18018 га ауыл хужалығы ере, шул иҫәптән 14197 га һөрөнтө ер беркетелгән. 19 уҡыу хужалығы малсылыҡ менән шөғөлләнә. 24 уҡыу хужалығында 584 күс умарта бар.

✓ БР Хөкүмәте бойороғо менән Башҡортостанда 25 апрелдән "Ҡотҡарырға һәм һаҡлап ҡалырға" тигән акция башланды. Халыҡтың экологик мәҙәниәтен күтәреүгә арналасаҡ акция 14 октябргә тиклем дауам итәсәк. Акция сиктәрендә быйыл йәй БР-ҙың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты етәкселегендә "Донъя әһәмиәтендәге тәбиғәт комплексы булараҡ Йөрәктау, Куштау, Торатау шихандарын ҡотҡарайыҡ һәм һаҡлап ҡалайыҡ" тигән семинар үтәсәк.Шулай уҡ ЮНЕСКО менән хеҙмәттәшлек йүнәлешендә"Башҡортостан Уралы" комплексы биосфера резервы проектын эшләү күҙаллана.

✓ БР Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтай депутаттары "БР-ҙа аҙыҡ-түлек продукттары сифатын һәм хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса саралар тураһында" БР Законы проектын эшләне. Ул ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлауҙы көсәйтеүгә, тауарҙар тураһында тулы һәм дөрөҫ мәғлүмәт алыуға, уларҙы дөрөҫ һайлауға йүнәлтелә.

✓ Көйөргәҙе районы Яҡшымбәт ауылында Урыҫ дәүләтенә үҙ ирке менән беренселәрҙән булып ҡушылыусы кыпсаҡ ырыуы башҡорттары бейе Ҡараҡужаҡ Мишәүлегә вариҫтары тарафынан стела ҡуйыла. Тантана 7 майҙа 12 сәғәттә башлана.

*✓ Китеүселәрҙең күптәре шатланып кире ҡайтыр ине, моғайын. Улар яҡшы тормоштан ҡасып түгел, ә икмәк артынан ҡалаға киткән бит. Ә икмәк, баҡтиһәң, ҡалала түгел, ауылда үҫә икән.*



*ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН*




**"Халыҡ иҫәбен алыуҙың тәүге һөҙөмтәләре Башҡортостан халҡының күпкә түгел, әммә 30 мең кешегә кәмеүен күрһәтте. Был бик насар. Хәҙер беҙ 4 миллион 072 мең кеше ҡалдыҡ. Һан буйынса Рәсәйҙә етенсе урынды биләйбеҙ. Федерацияның 20-ләгән субъектында халыҡ һаны артҡан. Беҙҙең кешеләребеҙ ҡайҙа булған? Бәлки, икенсе ҡалаларға күсенгәндәрҙер?**
**Өфө саҡ ҡына ҙурайған. Халыҡ 22 мең кешегә артҡан. Бөгөн баш ҡалала 1 миллинон 72 мең кеше йәшәй. Миллионлы ҡалалар араһында 11-се урын. Стәрлетамаҡта 273 мең кеше - ул да 9 мең кешегә артҡан. Тағы өс ҡалала 100 меңдән ашыу кеше йәшәй: Салауатта - 156,1 мең, Нефтекамала - 133,6 мең, Октябрьскийҙа 109,4 мең. Ауыл халҡы күбәйгән! 2002 йылда ауылда 1 миллион 478 мең кеше йәшәһә, хәҙер инде 1 миллион 610 мең кеше. Был дөйөм үҫешкә ҡаршы килә кеүек, әммә сиселеш ябай: ҡала тибындағы 39 ҡасаба атамаһын ауыл биләмәһенә үҙгәрткән. Элек ҡала кешеһе булһалар, хәҙер ауыл кешеһенә әйләнгәндәр. Бер кем бер ҡайҙа күсенмәгән. Мин башта ҡыуанғайным. Ауыл халҡы күп бала тапҡан, тип уйлағайным. Юҡ, бары тик административ эшмәкәрлек кенә икән. Йәл. Күп район үҙәктәре үҫкән, ҡайһылары 20-25 процентҡа (Аҡъяр, Иглин, Ҡариҙел). Халыҡ ауылдарҙан барыбер район үҙәктәренә тартыла. Әммә халҡы кәмегән район үҙәктәре лә бар: Йәрмәкәй, Йылайыр, Үрге Ҡыйғы, Кушнаренко, Ҡырғыҙ-Миәкә. Иң бәләкәй район үҙәге - Йәрмәкәй. Унда 3,9 мең генә кеше йәшәй. Иң ҙуры - Раевка - 19,6 мең кеше! Ҡала кеүек!Республикала ҡатын-ҡыҙҙар күберәк: 2 миллион 166 мең. Ирҙәр 1 миллион 906 мең. Йәғни 1136 ҡатын-ҡыҙға 1000 ир тура килә. Ир-ат эсә, тәмәке тарта, һуғыша, көрәшә". Һәр ваҡыт йылдарға һуҙылған бәхәстәр тыуҙырған һәм мәңге актуаль булып ҡалған темаға мөрәжәғәт итте был юлы дәүләт башлығы. Махсус тикшеренеүҙәр, төрлө конференциялар уҙғарылһа ла, халыҡтың ни өсөн кәмеүенең сәбәптәрен әлегәсә аныҡ ҡына бирәү ҙә әйтә алмай. Әйткән хәлдә лә, уны хәл итеү юлдары төрлө ҡаршылыҡтарға осрай. Ә был хаҡта Президент блогына ниндәй фекерҙәр яҙалар икән?**

# ҺАНДАР ИДАРА ИТМӘЙ,

## нисек идара итергә икәнде күрһәтә

**Buranbay**

Теләһә ниндәй биләмәнең үҫешен нормаль анализлау өсөн барыбер халыҡтың үлем кимәле һәм уның сәбәптәрен асыҡлау кәрәк: ҡартлыҡ буйынса тәбиғи үлем; инфаркттар һәм инсульттар; онкологик һәм башҡа сирҙәр; автоһәләкәттәр; янғындар; үлтереүҙәр; суицид; наркотик һ.б. шундай матдәләрҙе ҡулланыуҙан үлеүҙәр.

Халыҡ һаны, нигеҙҙә, мигранттар иҫәбенә арта. Күптәр вахта ысулы менән республиканан ситтә эшләй.

Анализ халыҡтың нисә йәштә яҡты донъя менән хушлашыуын күрһәтер һәм беҙ, ашығыс саралар күрмәһәк, 5-10 йылдан һуң нимә булыр? Был графикты башҡа теләһә ҡайһы графиктар (айҙар, йылдар буйынса хаҡтар артыу) менән йәнәш ҡуйып сағыштырып ҡараһаҡ, аныҡ бәйлелекте һәм сәбәптәрҙе күрербеҙ.

**Mixerstr**

Минең барлыҡ туған-тыумасам тигәндәй Мәскәүгә, Питерға, Себергә китте. Ҡалала бөтөнләй эш юҡ. Ә халыҡ ҡайҙа түләйҙәр, шунда китә. Питерҙа танышым 30 эш көнө өсөн 70 мең һумдан ашыу ала, апайым Себерҙә ҡарауылсы булып 30 мең һум ала. Беҙҙә ҡарауылсының эш хаҡы 5-7 меңдер. Апайҙарым, ағайым Мәскәүгә киттеләр, һәр ҡайһыһы 40 мең һум алып эшләй, ҡайтырға теләмәйҙәр. Юғары эш хаҡы түләнһә, кешеләр ҙә булыр. Ә хәҙер бер кем дә хәйерселекте арттырырға теләмәй.

**ilnur80**

Проблема кемдеңдер ҡайҙалыр китеүендә түгел. Дөйөм РФ буйынса халыҡ һаны кәмегән. Хәҙер СССР замамында тәрбиәләнгән һуңғы быуын бала таба. Артабан иҫләһәк, ил емерелде, tарҡалды. Был ваҡытта балалар әҙ тыуҙы. Хатта хәҙер вуздарҙа абитуриенттарҙы йыйып булмай. Яҡын киләсәктә тыуым артырын күрмәйем. Халыҡ тиҙ темптар менән ҡартая.

**jas_7**

Шулай ҙа 30 мең кешегә кәмеүебеҙҙе улар ҡайҙалыр киткән, ә яҡты донъянан түгел, тип ышанырға кәрәк. Ауылдарҙан район үҙәктәренә тартылалар икән - ауылда эш юҡ, ғаиләне нисектер аҫырарға кәрәк. Ә ҡала тибындағы ҡасабаларҙың ауыл биләмәһе статусын алыуы дотациялар менән аңлатыла. Ә бына Өфө кешеләргә байыған - был бик ҡыуандырмай. Минең күңелемә Шотландиялағы баланс яҡын. Эдинбург- мәҙәни-интеллектуаль рәсми баш ҡала, Глазго - сәнәғәт һәм рәсми булмаған баш ҡала. Улар бер-береһенән алыҫ урынлашмаған. Беҙҙә, әлбиттә, Черниковкалағы нефть химияһы монстры менән былай булыуы икеле. Дөйөм алғанда, статистика - ҡыҙыҡлы нәмә. Әгәр уны анализлаһаң, алып ташларға, зарарһыҙландырырға йәки шатланырға мөмкин булған һыу аҫты таштарын осратырға мөмкин.

**esther_inessa**

Әсәлек капиталы менән генә тыуымды арттырып булмай шул. Ҡатын-ҡыҙ алдағыһын уйлай - бала табыу йорттарында мөнәсәбәт "конвейер"ҙағы кеүек; балалар баҡсалары етешмәй; балалар поликлиникаларында тар профилле белгескә ике аҙна алдан яҙылырға кәрәк; участка педиатрында йөҙҙәрсә бала; дауаханаға ятыр өсөн сиратҡа торорға кәрәк. Был - баш ҡалалағы хәлдәр. Ә балаға өс йәш тулғас түләнгән пособие -йөҙ һумдан саҡ ҡына ашыу.

**defo7**

Статистика - ҡурҡыныс та, төҙөүсе лә көс. Һығымта яһаһаҡ - проблемаларҙы хәл итергә ярҙамлашырбыҙ, логиканы икенсе яҡҡа борһаҡ - кәйефте төшөрөрбөҙ. Минеңсә, ҡала халҡының кәмеүе - минус түгел, башын ҡайҙа тығырға белмәй, терәкһеҙ, өмөтһөҙ ауыл халҡының ҡалаға ҡасыуы - насар. Ә инде ҡатын-ҡыҙҙың күберәк булыуы яҡшыраҡтыр ҙа, бәлки, улар изгерәк тә, тормошҡа ысынбарлыҡ күҙлегенән дә ҡарайҙар.

**r_gataullin**

Иоганн Вольфганг Гёте: "Донъя менән һандар идара итә тиҙәр. Юҡ, улар бары тик донъя менән нисек идара иткәнде генә күрһәтә", - тигән. Ниндәй генә власть, дәүләттең ниндәй генә сәйәси ҡоролошо булмаһын, статистар үҙ эшен намыҫлы башҡарған, башҡара һәм башҡарасаҡ - йәмғиәтте уның үҫеш күрһәткестәре менән тәьмин итәсәк.

**vadimva**

Ауылға ҡарата мөнәсәбәт сәйәсәтен ҡырҡа үҙгәртергә кәрәк. Ни тиһәң дә, ер беҙҙе туйындыра һәм унан башҡа кеше йәшәй алмаҫ. Йә ҡабат коллектив хужалыҡтарға ҡайтырға, йә ерҙе кем унда эшләргә теләй, шуларға бушлай таратып бирергә кәрәк. Быға са йәшәгән ерҙәрен ташлап китеүселәрҙең күптәре шатланып кире ҡайтыр ине, моғайын. Улар яҡшы тормоштан ҡасып түгел, ә икмәк артынан ҡалаға киткән бит. Ә икмәк, баҡтиһәң, ҡалала түгел, ауылда үҫә икән.

**Macklamborghini**

Халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса иң ҙур артым Кавказда. Һуғыш, ҡыйралыш, эшһеҙлек булыуына ҡарамаҫтан, был күренештең сере нимәлә? Логика буйынса, насар һөҙөмтә көтөлөргә тейеш ине. Бәлки, уларҙа халыҡтың артыуы сәбәптәрен, республика күтәрелеше өсөн, беҙҙә ҡулланырға кәрәктер? Уны тормошҡа ашырыуға нормаль шарттар тыуҙырып. Ҡайһы яҡтан ғына ҡарамайыҡ, йәмғиәттең рухи тәрбиәһе тап ошо аспектҡа барып төртөлөр. Хайуандар донъяһындағыса ябай ишәйеү кеше йәмғиәтендә мөмкин түгел, сөнки кеше аҡыллы һәм ишәйеүгә этәргес булған ләззәт эҙемтәләрен үҙ белеме менән туҡтата (аборт, пзс һ.б.) Кеше мөхәббәтте ябай сексҡа әүерелдерҙе. Унан балалар тыумай, бары тик нәфсе генә ҡәнәғәтләнә. Йәмғиәт үҫешһен өсөн унда бер-беребеҙгә һөйөү мәҙәниәтен һеңдерергә кәрәк. Әсәйгә ҡарата һөйөү, атайҙы ихтирам итеү, ҡатын-ҡыҙға, беҙҙең балаларыбыҙҙың әсәһе булараҡ, һөйөү тәрбиәләү. Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, хатта Тыуған илгә һөйөү ҙә рухиәттең бер өлөшө булып тора.

**nurmus**

Һандар ҡыуаныслы түгел, әлбиттә, һәм бының менән бер нәмә лә эшләп булмай. Сәбәптәре йөҙҙәрсә. Халыҡтың кәмеүе артабан да дауам итәсәк. Әлеге ваҡытта тыуымдың артыуы Хөкүмәттең ҡаҙанышы түгел, ә Советтар Союзының 80-се йылдарҙағы, өс бала тапһаң - сиратһыҙ фатир, тигән сәйәсәте һөҙөмтәһе. Ирҙәрҙең аҙ йәшәүе - Хөкүмәттең 90-сы йылдарҙағы сәйәсәте һөҙөмтәһе - күпселек тиҫтерҙәрем ауырлыҡҡа сыҙаманы, ғаиләһен аҫырау өсөн бер сиктән икенсеһенә бәргеләнде. Улар хәҙер юҡ инде. Эсәләр, һуғышалар - был инде мәҙәни сәйәсәт һәм тәрбиә һөҙөмтәһе. Мин үҙем шәхсән ғүмер буйы ике эштә һәм бер нисә ставкаға эшләйем, бик күп ижади эш менән шөғөлләнәм. Быңдай темп менән оҙаҡҡа барырмынмы икән? Ә дөйөм эш хаҡым республика буйынса уртаса эш хаҡынан түбән. Минең кеүектәр аҙ һәм беҙҙе нисек тә һаҡлап ҡалырға кәрәк. Шулай итеп, яҡын киләсәктәге демография буйынса мин - пессимист.

**(Дауамы 15-се биттә).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Төркиәнең баш ҡалаһы Анкарала "Кескәй ханымдар һәм әфәнделәр - Донъя балалары" VII халыҡ-ара балалар театрҙары фестивале үтә. Етенсе тапҡыр үткәрелгән абруйлы сарала М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының башҡорт труппаһы ҡатнаша, улар тамашасыларға һәм жюри баһаһына Сәрүәр Суринаның режиссер Илнур Муллабаев сәхнәләштергән "Алтын балта" әкиәтен тәҡдим итә.

✓ Бәләбәй ҡалаһында "Илһам шишмәләре" шиғриәт фестивале булып үтте. Денис Бүләков исемендәге премияға шағир Мөнир Вафин менән тәржемәсе Кристина Андрианова лайыҡ булды.Ф. Кәрим исемендәге премия өлкән әҙибә Мөкәрәмә Садиҡоваға, тәржемәсе Светлана Чураеваға, әҙәби тәнҡитсе Әнғәм Хәбировҡа бирелде. Фестивалдең төп бүләге Гран-приҙы йәш шағир Мөнир Ихсанов яуланы.

✓ 1 сентябрҙән Башҡортостанда уҡытыусыларға эш хаҡы 30 процентҡа арттырыласаҡ. Быйыл Башҡортостандың мәғариф системаһын финанслауға федераль бюджеттан 750 млн, ошоға өҫтәп республика бюджетынан 300 млн һум аҡса йүнәлтеү планлаштырыла. 1 сентябрҙән һәр уҡытыусының эш хаҡына 6 мең һумлап өҫтәләсәк.

✓ 1 майҙан "Мотлаҡ медицина страховкаһы тураһында"ғы яңы федераль законға ярашлы берҙәм өлгөләге медицина страховкаһы полистары тапшырыла башлаясаҡ. Полис алыу хәҙер эш биреүсегә бәйле түгел. Медицина ярҙамы алған һәр пациент өсөн хәҙер кешенең эшләгән ойошмаһы түгел, ә дәүләт түләй.Әлеге полистар 2014 йылға тиклем ғәмәлдә ҡала.

✓ Ш. Бабич исемендәге Дәүләт йәштәр премиялары буйынса комиссия ултырышы булды. Ултырыш барышында премияға дәғүә итеүселәрҙең эштәре ҡаралып, икенсе турҙа ҡатнашасаҡ 6 кандидат билдәләнде. Улар: музыкант Исҡәндәр Ғафаров, артист Вячеслав Виноградов, режиссер Альберт Имаметдинов, йырсы Әлим Ҡәйүмов, артист Артур Ҡунаҡбаев, яҙыусы Зөлфиә Ҡускилдина һәм архитекторҙар коллективы ағзалары. Тәҡдимдәрҙе һәм хуплауҙарҙы 27 майға тиклем БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығына ебәрергә. Белешмәләр өсөн телефон: (3472) факс 276-45-87, 251-14-75.

## ЕТЕ РАЙОН

**Май - байрамдарға бай ай. Уларҙы һәр район үҙенсәлекле итеп үткәрергә тырыша. 1 майҙа сәғәт 11-ҙә В.И. Ленин майҙанында митинг ойошторолаcаҡ. Әлеге ваҡытта баш ҡалала барлығы 23 фонтан иҫәпләнһә, ошо көндә сәғәт 12-лә уларҙың барыһы ла асыласаҡ. 9 Майҙа иһә төп байрам саралары сәғәт 11-ҙә башланасаҡ. Тап ошо ваҡытта Еңеү паркында һәйкәлдәргә сәскәләр һалынасаҡ, В.И. Ленин майҙанында тантаналар башланасаҡ. Сараларҙы йомғаҡлап, 22.30 сәғәттә төнгө күкте фейерверк телдәре балҡытасаҡ.**

**Дим.** Байрам алды аҙнаһы сараларға бик бай. Шул иҫәптән 29-30 апрелдә 29-сы "Батыр" Балалар-үсмерҙәр спорт мәктәбендә көрәш буйынса асыҡ беренселек, 30 апрелдә "Барыһы ла сәләмәт милләт өсөн!" еңел атлетика кросы үтәсәк. 1 майҙа мәҙәниәт һәм ял паркында Хеҙмәт һәм Яҙ байрамына арналған байрам саралары уҙасаҡ.

**Калинин.** Яҡынлашып килгән май байрамдарына әҙерлек 21 апрелдә үк башланған. Планлаштырылған саралар араһында "Беренсе Май" мәҙәниәт һәм ял паркында "Мөхәббәт аркаһы"н асыу, ҡаһарманлыҡ дәрестәре, "Хәтер вахтаһы", байрам концерттары һәм ветерандарға торлаҡтарында тәртип булдырыуҙа анығ ярҙам күрһәтеү һ.б. ҡаралған.

**Киров.** Студенттар араһында Бөйөк Еңеүҙең 66 йыллығына һәм Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылына арналған иждад фестивалененң һайлап алыу туры үтте. Смотрҙа ос - юғары, һигеҙ махсус урта белем биреү учреждениеһы студенттары ҡатнашты. Иң яҡшы номерҙар 9 Майҙа В.И. Ленин исемендәге паркта, 12 сәғәттә "Беҙҙең ҡәҙерле ветерандарыбыҙ" тип аталған сарала күрһәтеләсәк.

**Октябрь.** Районда 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышындағы Еңеүгә бағышланған саралар планы раҫланған. 3-6 майҙа Советтар Союзы һәм Рәсәй Геройҙарына ҡуйылған таҡтаташтар эргәһендә митинглар ойоштороласаҡ. 3-7 майҙа дөйөм, урта махсус белем биреү учреждениеларында, үҫмерҙәр клубтарында тематик конкурстар, "түңәрәк өҫтәл"дәр, ҡаһарманлыҡ дәрестәре, ветерандар менән осрашыуҙар уҙасаҡ. 4 майҙа һуғыш ветерандары һәм тыл хеҙмәтсәндәре араһында шашка буйынса ярыш үткәреләсәк. 6 Майҙа Советтар Союзы Геройы маршал Г. К. Жуков бюсына, Нуғай ауылындағы стелаға сәскәләр һалынасаҡ.

**Орджоникидзе.** Апрелдә районың белем биреү усаҡтарында "Ер - беҙҙең уртаҡ йортобоҙ" тип аталған экологик акциялар, "Илебеҙ тарихында Беренсе Май" тип аталған йомғиятте өйрәнеү дәрестәре, төрлө конкурстар, мәҙәни саралар һ.б. уҙарыла. 1 Майҙа 12 сәғәттә Октябрь проспектында фонтан асыласаҡ.

**Совет.** 1 майҙа И. Якутов исемендәге парк йәйге миҙгелен аса. Өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтары өсөн бында ҙур байрам программаһы тәҡдим ителәсәк. Шулай уҡ Милләт-ара татыулыҡты нығытыу, Ю. А. Гагариндың йыһанға осоуына 50 йыл тулыуға арналған төрлө викториналар ойоштороласаҡ. 6 майҙа Еңеүҙең 50 йыллығы скверында тантаналы митинг үтәсәк. Белем биреү учреждениеларында Еңеү темаһына арналған синыф сәғәттәре һәм әңгәмәләр ойоштороласаҡ. 9 Майҙа И. Якутов паркында "Еңеү яҙы" тип аталған байрам программаһы ҡаралған. Парк территорияһында ялан кухняһы эшләйәсәк.

**Ленин.** Районың ойошторолоуына 75 йыл тулыуға арналған Спорт фестивале сиктәрендә ойошмалар һәм предприятиелар араһында шашка буйынса ярыштар уҙҙы. Унда 11 команда ҡатнашты. Өс сәғәт көс һынашҡандан һуң Андрей Беляев менән Альбина Пушкареванан торған команда еңеү яуланы. 28 апрелдә иһә шахмат буйынса ярыштар үтте.

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КҮҘМӘ-КҮҘ ОСРАШҠАНДА...

## хәҡиҡәт нығыраҡ асыла

**Үткән аҙнала "Единая Россия" партияһының төбәк бүлексәһендә Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Зәки улы Хәмитов халыҡты ҡабул итте.**

Президент менән барлығы 8 кеше күҙмә-күҙ ҡарашып аралашыу мөмкинлеге алды. Килеүселәрҙең күпселеген шәхси һорау түгел, ә йәмәғәт мәсьәләләре борсоуы күҙгә ташланды. Беренсе тапҡыр ойошторолған бындай сараға килеүселәр Өфө лимонарийының, М.Нестеров исемендәге музейҙың Нефтекама ҡалаһы филиалының артабанғы яҙмышын хәл итеүҙе, Благовещен ҡалаһының балалар йортонда спорт залы, Белорет районы Йөйәк ауылында социаль-мәҙәни үҙәк төҙөүҙе, Дәүләкән ҡалаһында ҡаты сүп-сарҙы айырым сорттарға айырыу һәм эшкәртеү цехы төҙөү өсөн ер бүлеүҙе, Өфө тимер юлы вокзалы янындағы иҫке йортто һүтеүҙе, Өфөлә шәхси һәм бәләкәй авиацияны үҫтереүгә ярҙам итеүҙе һәм Илеш районында аудитор тикшереүе үткәреүҙе һорап мөрәжәғәт итте һәм барыһы ла республика етәксеһенән үҙ һорауына ыңғай, теүәл һәм анығ яуап алды. Кемдәндер һорауы һөйләшеү барышында хәл ителде, был хаҡта Рөстәм Зәки улы тейешле күрһәтмәләрҙе урында уҡ бирҙе.

Һөйләшеү барышында Рөстәм Хәмитов артабан да ошондай уҡ осрашыуҙар үткәрәсәге хаҡында белдереп: "Бындай осрашыуҙар Өфөгә генә ҡағылмай, ә башҡа ҡала һәм ауылдарҙы ла үҙ эсенә алырға тейеш, сөнки борсоған һорауҙар һәм хәл ителәһе проблемалар күп", - тине.

# ЗАКОНДЫ ҒӘМӘЛГӘ АШЫРЫУҒА...

## битарафлыҡ та кәртә

**Башҡортостан халыҡтары телдәрен үҫтереүгә булышлыҡ итеү яңы кимәлгә сыға. БР Хөкүмәте Аппараты етәксеһе - БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Илшат Тажетдинов "БР халыҡтары телдәре тураһында"ғы республика законын ғәмәлгә ашырыу буйынса яңыртылған хөкүмәт комиссияһының тәүге ултырышында ошо хаҡта хәбәр итте.**

Әлеге закондың ғәмәлгә ашырыла килеүенә 12 йыл инде. Ошо ваҡыт эсендә милли әҙәбиәтте, мәҙәниәтте һәм китап нәшерләүҙе үҫтереү буйынса байтаҡ нәмәләр эшләнде. Туған телдәр үҫешенең норматив-хоҡуҡи һәм ойоштороу нигеҙҙәре булдырылды. Республиканың меңдән ашыу балалар баҡсаларында тәрбиә эше башҡорт, татар, сыуаш, мари һәм удмурт телдәрендә алып барыла. БР халыҡтары телдәрендә гәзит һәм журналдар сығарыла, рус һәм башҡорт телдәрендә телевидение тапшырыуҙары ойошторола.

Шул уҡ ваҡытта һуңғы йылдарҙа Законды тормошҡа ашырыу менән бәйле проблемалар ҙа күбәйҙе. Мәҫәлән, республика халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү өлкәһендә ҡайһы бер норматив-хоҡуҡи акттарҙы модернизациялау кәрәклеге көн кеүек асыҡ. Законды бойомға ашырыуҙың фәнни-методик тәьмин ителеүен байтаҡҡа көсәйтеү талап ителә. Мәҫәлән, БР Фәндәр академияһында топонимика һәм терминология бүлектәре булдырыу тураһындағы мәсьәлә оҙаҡ йылдар инде хәл ителмәй, башҡорт теле терминологияһын өйрәнеү бөтөнләй тип әйтерлек алып барылмай. Ә башҡортса географик атамаларҙың рус теленә тәржемәһе тураһындағы инструкция 1983 йылда ҡабул ителгән. Ул күптән иҫкергән һәм хәҙерге башҡорт орфографияһына тап килмәй.

Комиссия алдында яҡын араларҙа 2012-2016 йылдарға БР халыҡтары телдәрен һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү буйынса республика маҡсатлы программаһын эшләү бурысы тора. Эш барышында ғәмәлдәге программаның йомшаҡ һәм көслө яҡтары, шулай уҡ был өлкәлә сит ил һәм ватан тәжрибәһенең ыңғай факторҙары мөмкин тиклем иҫәпкә алынасаҡ.

Илшат Тажетдинов билдәләүенсә, яңыртылған Комиссия ултырышы ярты йылға бер тапҡыр үткәреләсәк һәм шул уҡ ваҡытта заманса телекоммуникация саралары файҙаланыласаҡ. Мәҫәлән, киләһе ултырышты видеоконференция режимында үткәреү ҡарала. Комиссия эше киң йәмәғәтселек өсөн асыҡ булһын өсөн унда студенттар, мәктәп уҡыусылары, шулай уҡ әүҙем тормош менән ҡайнаған фекерле кешеләр йәлеп ителәсәк.

# БАЛЫҠТАР ҠЫРЫЛЫУЫ...

## күлдәрҙең "үлеүенә" килтереүе мөмкин

**Республикала бер аҙна эсендә ике күлдә балыҡтарҙың үлеп бөтөү осрағы теркәлде. Беренсе осраҡ Благовещен районындағы күлдә, ә икенсеһе Октябрьский ҡалаһы янындағы Банное күлендә теркәлде.**

Әсекүлдә бер-нисә тонна табан балығы, ә Банное күлендә һаҙан, ҡарабалыҡ һәм суртан балыҡтарының барыһы ла һәләк булған. Белгестәр әлегә кәрәкле анализдар үткәрелмәү сәбәпле, балыҡтарҙың ни сәбәпле ҡырылыуын анығ ҡына әйтә алмаһа ла, был һәләкәттә кеше факторы роле булыу мөмкинлеген күҙ уңынан ысҡындырмай. "Банное күлендә балыҡтарҙың күпләп ҡырылыуы күлгә химик матдәләрҙең әлегеүе йәки күлдең бысраныуы арҡаһында булырға мөмкин", - тип белдерҙе Башҡоростан Республикаһы Экологтар союзы рәйесе Александр Веселов. Ысынлап та, был күлдән алыҫ түгел ике сәнәғәт предприятиеһы урынлашҡан һәм автомобиль юлы үтә, нәҡ уларҙың ошондай хәл сығыуында төп роль уйнауы бар, ти белгестәр.

Әсекүлгә килгәндә, күлдең өҫтөндәге ауыр еҫ аңҡытыусы шыйыҡсаның күҙгә ташланып ятыуы нәҡ ошо матдә балыҡтарҙың үлеүенә килтергәндәр, тип фаразларға мөмкинлек бирә. "Һыу өҫтөндә аҡһыл көрән төҫтәге эмульсия асыҡ күренә. Күл ярҙарын тикшергәндә күлдән 70 метр алыҫлыҡта яртылаш емерелгән бина табылды һәм уның торбаһынан күлдәге кеүек үк шыйыҡса аға, ләкин был шыйыҡсаның күлгә төшөү-төшмәүен анығ ҡына әйтеп булмай. Барыһы ла һыуға анализдар әҙер булғандан һуң асыҡланасаҡ", - ти Балыҡсылыҡ буйынса федераль агентлыҡтың Урта Волга территориаль идараһы дәүләт инспекторы Кирилл Прокопьев.

Был мөһим проблема һәм уға бармаҡ аша ҡарау киләсәктә ауыр эҙемтәләргә килтерергә мөмкин. Балыҡтарҙың күпләп ҡырылыуы һәр күлдең экосистемаһына ҙур зыян килтерә һәм балығы булмаған күл яйлап "үле" күлгә әйләнеүе мөмкин, ти белгестәр, ә бындай күл эргәһендә, уның ярҙарында яйлап тереклектең бөтөүе лә ихтимал.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Үткән ял көндәрендә Өфө сәнғәт училищеһының спорт залында Башҡортостан Республикаһы дәүләт хеҙмәткәрҙәре спартакиадаһының йомғаҡлау этабы булып үткәйне. БР Хөкүмәте, БР Президенты Хакимиәте, БР Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтай һәм Өфө ҡала округы хакимиәте йыйылма командалары бәйге программаһына индерелгән саңғы, шашка, шахмат, йөҙөү, өҫтәл теннисы, мини-футбол, пневматик винтовканан атыу һәм волейбол буйынса көс һынашты. Өфө ҡала округы хакимиәтенең йыйылма командаһы беренсе урын яуланы.

✓ Өфөлә Чернобыль фажиғәһе эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнашыусыларға һәйкәл асыласаҡ, әле уның беренсе ташын һалыу тантанаһы уҙҙы. Һәйкәл Беренсе Май урамында урынлаштырыласаҡ.

✓ Өфөлә ирҙәр араһында бокс буйынса Бөтә Рәсәй чемпионаты бара. Бындай чемпионат тәүге тапҡыр Башҡортостандың баш ҡалаһында 1992 йылда уҙғарылғайны. Ул саҡта башҡортостанлылар өс алтын, бер көмөш һәм бер бронза миҙал яулағайны. 22 апрелдән 30 апрелгәсә барасаҡ ярышта Башҡортостан данын 4 спортсы: Нияз Фәйзуллин, Данис Латипов, Леонид Костылев һәм Тимур Худоян яҡлай. Улар араһынан ярым финалға 91 килограмдан ашыу ауырлыҡ категорияһы спортсыһы Нияз Фәйзуллин ғына барып етә алды.

✓ Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты ҡарамағындағы "Хәләл" стандарты буйынса комитеты БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы менән берлектә мосолмандар өсөн продукция әҙерләүгә сертификат алған предприятиеларға 96 кешене эшкә урынлаштырған. Әле комитет аҙыҡ-түлек етештереүсе, медицина һәм йыназа хеҙмәттәре күрһәтеүсе, кейемһалым һәм аяҡ кейемдәре менән һатыу итеүсе 42 предприятиеға сертификат биргән.

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Юрий Пустовгаров әйтеүенсә, Өфөлә "ИКЕА" сауҙа-күңел асыу комплексының быйыл июндә асылыуы ихтимал. Төҙөлөштөң оҙаҡҡа һуҙылыуының төп сәбәбе - Ростехнадзорҙың, подряд ойошмалары һәм "ИКЕА" етәкселегенең берлектәге эшендә килеп тыуған ҡатмарлыҡтар. Яҡын арала Ростехнадзор комплексты ҡабул итәсәк. "Ашан" гипермаркетына килгәндә, уны сафҡа индереү срогы арендаторҙарға бәйле.

АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты булышлығында Башҡорт дәүләт медицина университетында "Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһының Өфө йәштәре моделе" фәнни-роль уйыны уҙғарылды. Бындай сара Рәсәйҙә беренсе тапҡыр үткәрелә. Ул БДМУ студенты Тимур Салахов тәҡдиме һәм тырышлығы менән мәктәп уҡыусыларын, студенттарҙы бер-береһе менән аралаштырыу, уларҙы глобаль проблемалар буйынса фекер алышыуҙа ҡатнаштырыу, ошоноң менән йәштәрҙе Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы эшенә ылыҡтырыу, дипломатлыҡ, лидерлыҡ, ораторлыҡ сифаттары тәрбиәләү һәм компромисс таба белергә өйрәтеү маҡсатында ойошторолған. Ойоштороусылар "Алкоголле эсемлекте зыянлы ҡулланыуҙы сикләү буйынса глобаль стратегия" темаһын сараның төп темаһы итеп һайлаған. Фәнни-роль уйынын асыу тантанаһына Башҡортостандағы Рәсәй сәйәсәт мәктәбе башҡарма директоры Р. Әхмәдинуров, министр урынбаҫары Д. Еникеева һәм БДМУ проректоры В. Юлдашев килде. Улар йәштәрҙең матур башланғысын хуплап сығыш яһаны, алкоголизмға ҡаршы көрәштең ни өсөн кәрәк булыуын билдәләп үтте.**

# ЙӘШТӘР, БАЛАЛАР ҘА...

## айыҡлыҡҡа өндәй

Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы сиктәрендә 1948 йылдың 7 апрелендә булдырылған. Уның составына 193 дәүләт инә һәм улар йылына бер тапҡыр Женева ҡалаһында уҙғарылған сессияға үҙ вәкилдәрен ебәрә. БДМУ бинаһына йыйылған йәштәр тап шул вәкилдәр ролен уйнаны ла инде. Уларҙың һәр береһе үҙенә бер ил һайлаған, шул дәүләттәрҙә алкоголь ҡулланыу күрһәткестәрен һәм уның менән бәйле ауырыуҙарҙы, быға ҡаршы булдырылған закондарҙы ҡыҫҡаса ғына докладтарында сағылдырған. Делегаттарҙың сығыштарын тыңлап бөткәндән һуң бизнес-тренерҙар, консультанттар, стилист, модельер-дизайнерҙар, педагогтар мастер-класс уҙғарҙы. Был мастер-кластарҙың бик тә файҙалы булыуы резолюция ҡабул итеү барышында күренде. Йәштәр үҙҙәрен күпкә ышаныслыраҡ тотто һәм үҙ ҡараштарын белдереү генә түгел, уны яҡлай белеүе менән дә алдырҙы. Аҙаҡтан делегаттар "Алкоголле эсемлекте зыянлы ҡулланыуҙы сикләү буйынса глобаль стратегия" темаһына ярашлы резолюция ҡабул итте. Был документ Мәскәүҙәге Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы вәкиллегенә ебәреләсәк һәм унда тикшерелеп, кәрәкле төҙәтмәләр индерелгәндән һуң, айырым пункттары Женевала уҙасаҡ Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы сессияһында яҡтыртыласаҡ.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Рөстәм ЗИЯЗЕТДИНОВ, "Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы Өфө йәштәре моделе" ассамблеяһы сессияһы рәйесе:** Беҙ "Иң яҡшы доклад", "Иң яҡшы спикер", "Иң яҡшы делегат" тигән өс номинация булдырғайныҡ. Түгеге номинация буйынса беренсе урынды Константин Вәлиәхмәтов, икенсеһе буйынса - Вадим Мәхмүтов, өсөнсөһө буйынса Ринат Зәйнуллин яуланы. Шулай уҡ һәр студентҡа был сарала ҡатнашыуы тураһында сертификат тапшырылды. Әммә иң мөһиме, ҡатнашыусыларыбыҙҙың үҙ-ара аралашып, яңы дуҫтар табып, үҙҙәрен оратор, дипломат ролендә һынап ҡарауы булды, тип уйлайым. Шулай уҡ ойоштороусыларҙың да маҡсаты бойомға ашты: йәштәр донъя кимәлендәге проблемаға битараф булмауын, уны бергәләп сисеү юлдарын табырға ынтылыуын, киләсәгебеҙҙе айыҡ фекерле кешеләр йөҙөндә күрергә теләүҙәрен иҫбатлай алды. Быйылғы сарабыҙҙың теле рәсми рәүештә рус теле тип алынған ине. Киләһе йыл, бәлки, инглиз телендә уҙғарырбыҙ. Был иһә "Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы Өфө йәштәре моделе" сифатын, әһәмиәтен тағы бер баҫҡысҡа күтәрәсәк.

**Роберт ДӘҮЛӘТШИН, "Айыҡ Башҡортостан" төбәк ижтимағи хәрәкәте рәйесе:** Был сараға Һамар, Силәбе өлкәләренән, Башҡортостандың төрлө ҡала-райондарынан йәштәр йыйылды. Ҡайһы бер бәләкәй етешһеҙлектәрен иҫәпкә алмағанда, бик тә һәҙәмтәле эш эшләнек тип уйлайым. Үҙендә ниндәйҙер ил вәкиле итеп хис итеү, уның мәнфәғәттәрен яҡлау ҙур яуаплылыҡ тойғоһо тыуҙыра. Мин үҙем 1912 йылда ҡоро закон ҡабул итеүсе түгеге илдәрҙең береһе булған Исландия иленең вәкиле булып сығыш яһаным. "Айыҡ Башҡортостан" ойошмаһы рәйесе булараҡ, үҙебеҙҙең илдә, бөтә донъя кимәлендә ҡоро закон урынлаштырыу яҡлаһымын. Әйткәндәй, минән тыш беҙҙең "Айыҡ Башҡортостан" ойошмаһынан тағы ете кеше ошо "Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһының Өфө йәштәре моделен" төҙәүҙә ҡатнашты. Беҙҙең команданың эше, бигерәк тә Ринат Зәйнуллин тырышлығы менән урынлы терминдар ҡулланып, ултырышта әйтелгәнсә, алкоголизмға ҡаршы түгел, ә айыҡ тормошто пропагандалаусы резолюция сығарыуға өлгәштек. Беҙ бөтә ҡатнашыусыларға ла айыҡ, сәләмәт тормош алып барыуға әйҙәгән видеоролик-тар тупланған дискылар тараттыҡ. Был материалдарҙы ҡулланып, улар үҙҙәре лә пропаганда эше алып бара аласаҡ.

**Садырбек ҠОРБАНОВ, БДМУ студенты:** Мин БДМУ-ла Ҡырғыҙстандан килеп белем алып йөрөйөм. Был сараға эләгеп, ҡатнашып, сәләмәт тормош алып барған тиҫтерҙәрем менән яҡындан аралашыуым бик ҡыуаныслы булды. Сөнки илемдә көтөп ҡалған дуҫтарыма мин Башҡортостанда бына ошондай милләт, дәүләт киләсәген хәстәрләп йөрөгән егеттәр-ҡыҙҙар, беҙҙең барыбыҙҙы ла берләштерерлек мәсьәләләр күп булыуы хаҡында, берҙәм булғанда ғына уларҙы йырып сыға аласағыбыҙҙы һөйләйәсәкмен. Һуңғы йылдарҙа Ҡырғыҙстан йәштәре араһында дингә килеү көсәйә, сәләмәт тормош алып барыу теләге артабашланы. Бында ла шул уҡ йүнәлеш күҙәтелә бит. Тимәк, ысынлап та киләсәктә бергәләп атҡарыр эштәребеҙ байтаҡ әле.

**Шулай итеп...**

**Бер яҡтан, айыҡ тормош алып барыуға өндәүҙәрҙең "Айыҡ ауыл" конкурсы сиктәренән тыш, ошо рәүешле мәктәп уҡыусылары, студенттар араһында ла сағылыш табыуы ҡыуаныслы, икенсе яҡтан, йәштәребеҙҙең үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап йәшәмәүе һоҡландырҙы. Бынан һуң кемдең, йәштәр үҙ киләсәгенә битараф, улар бер нәмәне лә хәстәрләй белмәй, тип әйтергә теле әйләнер икән?**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ҺОРАУ-ЯУАП

## ОРДЕН КЕМГӘ ТЕЙЕШ?

**РФ Президенты указы менән 2008 йылдың 13 майында дүрт һәм унан күберәк бала тәрбиәләп үҫтергән ата-әсәләргә наградлау өсөн "Ата-әсә даны" ордены булдырылғайны. Мин дүрт бала әсәһе. Дөрөҫ, улар хәҙер ҙурайҙылар инде. Беҙҙең район хакимиәтенең социаль бүлегендә, был орден бөтә әсәләргә лә бирелмәй, һайлап ҡына тапшырыла, тинеләр. Быны нисек аңларға?**

- Дүрт һәм унан күберәк бала тәрбиәләп үҫтергән әсәнең мөрәжәғәте йәки урындағы хакимиәт юллауы буйынса әсәләр үҙҙәренә тейешле тәләгән бер наградаға эйә була ала. Һеҙҙең осраҡта Баймаҡ район хакимиәтенә мөрәжәғәт итә алаһығыҙ. Ауыл хакимиәте башлығы ла был мәсьәләне хәл итә ала. Әйткәндәй, һайлап наградлау түбәндәгене аңлата: ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм ителгәндәр, балалары хөкөм ителгән ата-әсәләргә орден бирелмәй.

Награда мәсьәләһе буйынса ауыл йәки район хакимиәте башлығына мөрәжәғәт итегеҙ.

## ПЕНСИЯНАН ҺАЛЫМ ЮҠ

**Күрше әбей, бәләкәй генә пенсиямдан һалым тотоп яфалайҙар, тип зарлана. Пенсиянан һалым түләтеү дөрөҫ буламы?**

- Ғәмәлдәге закон нигеҙҙәре тарафынан пенсиянан һалым түләтеү ҡаралмаған. Әбейҙән, моғайын, һәр милексе түләргә бурыслы булған күсемһеҙ милеккә һалым түләтеләләр.

## МАХСУС СТАЖ ЕТЕШМӘЙ

**Ваҡытында Күмертау брикет фабрикаһының туҙан вентиляциялау цехында 6 йыл слесарь булып, аҙаҡ "Башнефтегеофизика" акционерҙар йәмғиәтендә ялан шарттарында сейсмология-разведкалау отрядтарында III разрядлы топография отряды эшсеһе сифатында 1 йыл да 10 ай эшләнем. Ошонан сығып, мин пенсияға нисә йәштән китә алам?**

- Айырым эш шарттары менән бәйле ҡартлыҡ буйынса ваҡытынан алда хеҙмәт пенсияһы 1991 йылдың 26 ғинуарында СССР Министрҙар Кабинеты ҡарары менән раҫланған ташламалы пенсия менән тәьмин ителеү хоҡуғы биреүсе етештереү, эш, һөнәр, вазифаларҙың 1-се һәм 2-се исемлегенә ярашлы тәғәйенләнә.

Күмертау брикет фабрикаһының туҙан вентиляциялау цехы слесарҙары 2-се Исемлек буйынса ваҡытынан алда пенсияға сығыу хоҡуғына эйә. Шул уҡ ваҡытта бындай пенсияға хоҡуҡ ошо цехта 6 йыл да 3 айҙан да (билдәләнгән 12 йыл да 6 айҙың яртыһы) кәм эшләмәгән осраҡта ғына билдәләнә. "Башнефтегеофизика" йәмғиәтенең сейсмология-разведкалау партиялары эшселәре иһә "Рәсәй Федерацияһында хеҙмәт пенсиялары тураһында" федераль законға ярашлы геология разведкалау отрядтарында, экспедицияларҙа, партияларҙа 12 йыл да 6 айҙан да кәм эшләмәгән осраҡта ваҡытынан алда хеҙмәт пенсияһына китеү хоҡуғына эйә була ала. Хатығыҙҙан күренеүенсә, был ике төр йүнәлештә лә һеҙҙең ваҡытынан алда пенсия тәғәйенләү өсөн махсус эш стажығыҙ етешмәй.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы

## Татлы тамыр эс - йүткермәҫһең



❖ Татлы тамыр (корень солодки) йүткереү менән барған үпкә ауырыуҙары булғанда ҡаҡырыҡ сығарыу өсөн һәм ялҡынһыуҙы, ауыртыуҙы баҫыусы булараҡ та, ашҡаҙан һуты артыҡ бүленгәндә, ашҡаҙан, бөйән эсәгенең (двенадцатиперстная кишка) хроник сейле яраһы ауырыуҙары булғанда ла файҙалы. Дауа өсөн 1 ҡалаҡ татлы тамырҙы 1 стакан ҡайнар һыуға һалып төнәткәс, һөҙөп, көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

❖ Тын юлдары ялҡынһынып, йүткергәндә ялҡынһыныуға, микробтарға ҡаршы, ҡаҡырыҡ бүленеп сығыуын яҡшыртыу өсөн татлы тамырға һары мәтрүшкә, үгәй инә үләне, эхинацея ҡушып төнәтһән, яҡшы була. Һәр үлән төрөн 10-15-әр грамм алып бергә болғатҡас, 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә. Дауаны 7-8 көн дауам итергә.

❖ Организмдың һалҡын тейеүгә ҡаршы тороу һәләтен күтәреү, матдәләр алышыныуын көсәйтеү өсөн татлы тамырға әлморон емеше, мәтрүшкә, эхинацея, меңъяпраҡ, миләш, кесерткән япрағы, етен орлоғо, левзея йәки алтын тамыр (родиола розовая) тамырын ҡушып төнәтергә.

❖ Татлы тамырға әлморон емеш, ламинария, эхинацея, левзея тамыры һәм мәтрүшкә ҡушһаң да иммунитет ныҒый, матдәләр алышыныуы яҡшырасаҡ.

❖ Татлы тамыр, әнис орлоғо, әлморон емеше, һары мәтрүшкә, меңъяпраҡты бер тигеҙ күләмдә алып болғатҡас, 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп төнәтергә һәм стакандың өстән бер өлөшө күләмендә көнөнә өс тапҡыр эсергә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

ӘЙТӘГҮР!

# УҒРЫЛЫҠ БӘЛӘҺЕ

**Бер шағирҙың "Дөйә урлағандар майҙа йөҙә, энә урлағандар - төрмәлә" тигән һүҙҙәре бар. Ошо юлдарҙа тормош ысынбарлығы ниндәй кимәлдә сағыла тип уйлайһығыҙ?**

**Зәбих СӘМИҒУЛЛИН, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны:** Был шиғыр юлдары илебеҙҙә закондарҙың үтәлмәүе, ришүәтселектең, коррупцияның, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡтың суд, прокуратура органдарына үтеп инеүе хаҡында һөйләй. Ыҫтырам, шуның өсөн беҙ Гитлер фашизмына ҡаршы һуғыштыҡмы ни? Иң аяныслыһы шунда: беҙ 1941-1945 йылдарҙа фашизмды күп ҡорбандар биреп илебеҙгә индермәнек, баҫтырып барып ояһында дөмөктөрҙөк, тип уйлаһаҡ та, ҡалған икән әле уның тамыры. Фашизм, йәғни кешелекте, йәшәүҙе күрә алмауханлыҡ тойғоһо хәҙер илебеҙ халҡының күңеленә төрлө юлдар менән үтеп инә һәм илебеҙҙе, дәүләтебеҙҙе эстән ҡыйрата. Ришүәтселекте, коррупцияны тик шулай фашизмға тиң яуызлыҡ тип атап, уға ҡаршы аяуһыҙлыҡ менән көрәшмәһәк, һәр ҡайһыбыҙ законлылыҡ, ғәҙеллек юлына баҫмаһаҡ, киләсәктә, ысынлап та, барлыҡ дөйә урлағандар майҙа йөҙәсәк, энә урлағандар төрмәләрҙә ултырасаҡ.

**Закирйән ӘМИНЕВ, юрист, ғилми хеҙмәткәр:** Шиғырҙа хәҡиҡәт бик дөрөҫ һәм ҡаты әйтелә. Мин был мәсьәләнең тағы ла төбөнәрәк ҡарарға кәрәктер тип иҫәпләйем. Илебеҙ халҡының 70 йылдан ашыу ваҡыт эсендә туплаған дөйөм байлығын, йәғни "дөйәне" ҡулға төшөрөү юлын да уйлап тапты йоморо баштар. Хосусилаштырыу тип аталды был бурлыҡ акцияһы. Күптәр ваучерҙарын, икенсе һүҙ менән әйткәндә, ил байлығының үҙҙәренә тейешле өлөшөн осһоҙ хаҡҡа осорҙо, тағы ла күптәре бер яртыға һатты хатта. Шул яртыны һуғып алып йоҡларға ятҡан кеше иртәнсәк йоҡоһонан уянып китеүенә ҡулдарына ҡап-ҡап ваучер йыйып әүәләнгән яңы хужалар иң тәүҙә ул кешене эшенән ҡыуҙы һәм бөгөн килеп еренән ҡыуа башланы. Еренән тигәндәй, илебеҙ 50-60-сы йылдарҙа Латин Америкаһы үткән Латифундия (эре ер биләмәһе) системаһын бермә-бер ҡабатлай. Иң тәүҙә был илдең аҫаба халҡының европалылар менән ҡан ҡатнашыуҙан тыуған өлөшө үҙ милләтенән, шунан һуң тыуған еренән баш тарта. Европалылар бушап ҡалған ергә тиҙ арала хужа булып, Латифундия ойоштора. Һуңынан терһәктәрен тешләрҙәй була аҫабалар, әммә һуң була. Һуңынан 70-се йылдарҙа бары тик инҡилап юлы менән генә улар ерҙәрен кире ҡайтарып ала. Беҙҙә лә тап шул Латин Америкаһында барған ваҡиғалар ҡабатланғанға оҡшаған. Хосусилаштырыу юлы менән илебеҙҙең завод-фабрикалары, ер аҫты байлыҡтары шәхси ҡулдарға күсте. Әле илебеҙҙең тағы ла бер байлығы - икһеҙ-сикһеҙ ере ҡалған даһа. Уны ла ҡулға төшөрөү юлын уйлап таптылар. "Ер кодексы" тип атала ул закон. Беҙҙең байлыҡты ҡулға төшөрөүселәр - дөйә урлап майҙа йөҙөүселәр, ә төймә урлаусыларҙың уряны билдәле инде - төрмәлә. Сөнки ҡарға күҙен ҡарға бер ваҡытта ла суҡымай.

**Спартак ИЛЬЯСОВ, Учалы районы Аҡһаҡалдар ҡоро рәйесе, халыҡ йырауы, яҙыусы:** Яуапты кинәйә менән әйтәм. Дөйә урлап ашаусыларҙың ауыҙын дәүләт үҙе асып бирҙе. Ошо юл менән социалистик мөлкәт капиталистик мөлкәткә әүерелде, йәғни айырым кешеләрҙең ҡулына күсте. Әгәр ҙә был эш законлы юл менән башҡарылмаһа, йәғни уны йотор өсөн йәтешләрлек шарттар тыуҙырылмаһа, дөйәне "йота" алмаҫтар ине. Халыҡта "Кара эттен бәләһе - аҡ эткә", тигән әйтем бар. Шунын кеүек, дөйә урлаусыларҙың язаһын энә урлаусылар татый инде.

Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.

АФАРИН!

**Ярыштар алдынан кем нимә менән генә шөғөлләнмәй: кемдер ҡуләгә-дошманға ҡаршы һуғыша, бәгзе берәү скакалкала һикерә, бер спортсы һығылмалы бинтын бәйләй, кемдер иптәштәре менән төрткөләшеп, сослоғон һынай, ә ҡайһы бер бошмаҫыраҡтар телефондан һөйләшә, музыка тыңлай, кемдер буфетта сәй эсә, ә күптәре тотамиҙа көс алышасаҡ дәгүәселәре менән таныша. Ушу ярышы үтәсәк тотами янындағы был ығы-зығы араһында ике йәш егеттең әңгәмәһенә иғтибар итеүсе булманы ла шикелле. Ғәҙәттә, бының кеүек һөйләшеүҙәргә иғтибар итмәйҙәр - дәгүәселәр аралаша, тип кенә ҡарайҙар. Ә шулай ҙа, ҡапыл башланып, тиҙ генә тамамланһа ла, Белорет районы Бриштамаҡ ауылында тыуып үҫкән, әлеге ваҡытта Өфө ҡалаһының иҡтисад лицей-интернатында белем алыусы Раяз исемле егеттең зиһенен ялмап алып, оҙаҡ ҡына уйланырға мәжбүр итте был әңгәмә тигәнең.**



# АЛДАН ҠЫСҠЫРҒАН КӘКҮКТЕҢ...

## йәғни Спортта ла көс түгел, аҡыл кәрәк

"Кем бында Рафиҡов?" тип һөрәнләп килеүсе бер спортсы, әҙләгән кешеһен тапҡас та, уның ҡарап тороуға кәслә генә күренеүенә иғтибар итте. "Ушу менән нисәнсе йыл шөғөлләнәһең?" тип һораны яҡынлашыусы үҙе менән таныштырып та тормаҫтан. "Беренсе ай", тигән яуапты ишеткәс, "Был "салағаның" кәрәген биреү улай уҡ ҡыйынға төшмәҫ, ахыры", тип уйлап та алды. Раяздың артабан "Ауылда бокс менән дә шөғөлләнгәйнем", тигән һүҙҙәренә ул артыҡ иғтибар ҙа итмәне. "Мин был ярышта бына инде икенсе йыл ҡатнашам, әле бер тапҡыр ҙа еңелгәнем булманы, бөгөн һинең баш бөттө бит", тип көлдө лә, китеп барҙы. Бындай кимәлдәге ярышта тәү тапҡыр ҡатнашҡан егет күңелендә был һөйләшеү үҙ эҙен ҡалдырҙы, тип баштараҡ әйткәйнек инде.

"Улай булмай торһон әле, кемдең кем икәнен ҡарап ҡарарбыҙ. Минең бокссы күршем, беренсе "тренерым", элекке Өфө ҡалаһы чемпионы Василий ҡарт маҡтай ине бит, үҙе уға өмөттәр бағлай ине. "Көс ярҙамында түгел, ә аҡыл ярҙамында еңергә кәрәк", тигән кәңәштәрен әйтә килде. Туранантура барырға ярамай, был егетте нисек тә хәйләләргә кәрәк, үҙ эшен яҡшы белгән кешегә оҡшаған, үҙен бик иркен тотһа ла, тотами кем кеслә икәнде күрһәтер", тип үҙен тынысландырырға тырышты Раяз. Ушу менән күптән шөғөлләнәм, тип маһайған дәгүәсеһе алдында үҙен ышаныслыраҡ тотмауына ғына үкенде ул. Бәлки, шапырынып маҡтанмауы дөрөҫ тә булғандыр - тренеры, ушу буйынса донъя чемпионы Тимур Басир улы Кәримов та сыҙамлылыҡҡа, тәүәккәллеккә, осталыҡҡа өйрәткән сағында маһайыуҙан, тәкәбберлектән тыя бит. Ушу менән беренсе ай ғына шөғөлләнеүенә ҡарамаҫтан, сыға бит әле Раяз тотамиға. Тимәк, тренеры уға ышаныс бағлай.

Шулай уйлана-уйлана йәш спортсы башҡалар һымаҡ уҡ үҙ сығышына әҙерләнеүен дауам итте. Элеүҙе торған ҙур "груша"ны төрткөләй, типкеләй торғас, тыуған ауылында утын һарайы эсендә торған үҙ "груша"һы иҫенә төшөрҙө. 14 йәшенә Ришат ағаһы һатып алған тос ҡына "грушаһын" апаруҡ төрткөләргә өйрәнгәйне шул. Йылынып алғас, турникта бер-икене тартылып алды егет. 16 йәшлек егеткә көс ултыра ла башлаған - үҙ кәүҙәһен еңел күтәрә ул. Тыуған йортоноң һәр ишегендә берәр турник ҡуйып, үткән-һүткән һайын шуларҙа тартылып алырға ғәҙәтләнгән әлеге Ришат ағаһынан күрмәксе, Раяз да турникта төрлө хәрәкәттәр эшләй-эшләй, атаһы әйтмешләй, "бесәй һымаҡ" йылғыр булып үҫеп етте. Егеттең спортҡа күңел һалыуы ҡапыл ғына ла булманы - йәйләп ылыҡты ул. Тәүҙәрәк йүгереүҙә лә бөтөнләй өнәмәгән малай тырышлығы арҡаһында йүгереүҙә лә, саңғыла ла башҡаларҙы артта ҡалдыра башланы. Ағаһына һәр яҡлап оҡшарға тырышыуы уға көс, дәрт бирҙе. Кистәрен "грушаһын" төрткөләй ҙә, күршеһе Василий ҡартҡа бокс өйрәнергә инә. Күп серҙәргә өйрәтте уны ҡарт бокссы. Иң мөһиме, рухи яҡтан ныҡлыҡ һеңдерергә тырышты. Ике йәй бокс менән шөғөлләнеү егетте тамам арбап алды. Иң ҡыҙығы шул: теләгән шөғөлө арыһһа ла, ялҡытмай ине.

Ауыл мәктәбендә яҡшы ғына уҡыған Раяз Өфөләге иҡтисад лицей-интернатына уҡырға инергә ҡарар итте. Ата-әсәһе лә был теләгән хупланы. Шулай итеп, егет физика-математика класында уҡый башланы. Ятаҡ тормошона күнегеп алғас, бер аҙна үттеме, юҡмы, ушу түңәрәгенә яҙылып та ҡайтты. Тренеры Тимур Басир улы өйрәткән алымдарҙы губка һымаҡ хәтеренә һеңдереп барҙы. Быуаса бокс серҙәре менән ярайһы уҡ таныш уҡыусыһын тренер ярыштан-ярышҡа йөрөттө. Шулай итеп, ҡала беренселегенә лә килеп етте Раяз Рафиҡов. Үҙенең тиҫтерҙәре менән сағыштырғанда иҫ китерлек уңышҡа өлгәште ул: шөғөлләнеүенә бер ай ғына булһа ла, ҡала беренселегендә ҡатнашыу хоҡуғы алды.

Ярыш алдынан булған төндә оҙаҡ йоҡлай алмай ятты Раяз: һәр ярыш алдынан тулҡынланыу кисереүенә инде күнегеп тә бөткән ул. Уйҙарында билдәһеҙ дәгүәсеһенә ҡаршы алымдарҙы ҡабатлап ятты. Күп ҡабатланы. Ниндәй хәрәкәтте ҡайһыһы менән бәйләргә, ҡайһы яҡтан килгән һөжүмде нисегерәк кире ҡағыу варианттарын барланы. Күпме генә уйламаһын, тел һөжүмен генә алдан күрә алманы: уйламаған-көтмәгәндә килтереп саҡҡан һүҙҙәр кәйефен төшөрә яҙҙы бит, юғиһә. Ярай әле, Марсель исемле тәжрибәле дуҫы уның хәлен күреп, тынысландырҙы, маҡтансыҡтарға ышанып бармаҫҡа саҡырҙы. Сират еткәс, Раяз үҙен ҡурҡытырға теләгән дәгүәсеһенә ҡаршы тотамиға сығып баҫты. Өйрәнелгән хәрәкәттәр менән тегене дөмбәсләне лә ташланы! Күп тә үтмәй Раязды тағы бер егет менән көс һынашырға сығарҙылар. Уныһынан да өҫтөнөрәк булып сыҡты. Өсөнсөһөн, кәүҙәгә үҙенән ике башҡа ҙурырағын да еңгәс, беренсе ай шөғөлләнгән Раяздың чемпион булыуын барыһы ла таныны.

Ушу серҙәренә төшөнөүе ни тиклем ҡыйын булһа ла, төп алымдарҙы ярайһы уҡ яҡшы итеп ҡулланырға өйрәнгән Белорет егете ярыш алдынан була торған тулҡынланыуын да еңә алды - тренеры, дуҫтары һәм үҙенең тырышлығы менән ауыл чемпион титулын.

Алдан ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта, тигән һабаҡты маһайырға яратҡан теге егет аңланымы, юҡмы, уныһын әйтеүе ауыр. Шулай ҙа уға ла рәхмәт - был ҡылығы менән Раязда сәм, дәрт, дарман уятты бит ул.

Илгиз ИШБУЛАТОВ.

✓ *Төкөл (икенсе бер сығанаҡтарҙа Төкөн) үҙенең ата-бабаларының аҫаба ерендә тоҙ ҡайнатҡан һәм тоҙ ҡаласығының хужаһы ла булып торған. Заманына күрә алдынғы ҡарашлы, уҡымышлы кеше булған.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**"Красноусол" шифаханаһы эргәһендәге тоҙло шишмәләргә ҡағылышлы бер әңгәмә ваҡытында күптәнге танышым, юғары белемле башҡорт апайы: "Тоҙло шишмәләрҙең башҡорттарға ҡағылышлы тарихы бармы ни ул?" - тип ғәжәпләнеп һорап ҡуйҙы. Уның кеүек бик күптәр, изге сығанаҡтар элек-электән тик христиандарҙың ғына табыныу урыны булған, тип нығ яңылыша. Был тирәлә борондан тик башҡорттар ғына йәшәгәнлеген, тәүге рус кешеләренең был төбәккә XVI быуат аҙаҡтарында XVII быуат баштарында ғына килеүен онотоп ебәрәләр.**

# ТОҘЛО ШИШМӘЛӘР ТИРӘҺЕНДӘ



## башҡорт эҙҙәре

Тарихтан билдәле булыуынса, тамъян, юрматы, мең ырыуы башҡорттары 1556 йылда тәүгеләрҙән булып Рус дәүләтенә ҡушыла. Һуңғараҡ уларҙың өлгөһөнә башҡа ырыуҙар ҙа эйәрә. 1557 йылда табын ырыуы башҡорттары исеменән Күрпәс бей Мәскәүгә илсе булып барып, ошо ерҙәргә аҫабалыҡ хоҡуғы ала.

Күрпәс бей тап ошо биләмәләрҙә, тоҙло шишмәләр буйында йәшәгән. Башҡа ерҙә йәшәһә йәиһә күсеп килгән булһа, Иван Грозный тарафынан уның аҫабалығы раҫланмаҫ ине. Башҡорттарҙың борондан тоҙло шишмәләр буйында тоҙ ҡайнатыуын, уларҙың ошо ергә аҫаба булып торғанын тарихи документтар ҙа, легендалар ҙа раҫлай.

Тарихи документтарға мөрәжәғәт итерҙән алда бер легендаға туҡталып китмәксемен. Заманында был легенданы тарихты төплө белгән ауылдашым Фәттәх Хәсән улы Салауатовтан (1903-1993 йй.) ишетеп, яҙып алырға тура килгәйне. Ул был легенданы XX быуаттың 20-се йылдарында Красноусол быяла заводында эшләгән сағында бер Имәндәш ауылы ҡартынан ишеткән була. Уның йөкмәткеһе түбәндәгесә: "Бик борон заманда Көгөш (әле Усолка тип йөрөтөлә) йылғаһы буйында Төкөл исемле бик оҫта кеше йәшәгән. Ул ағастан биҙәп-һырлап ижау, батман, күнәк кеүек кәрәк-яраҡ эшләгән, көйәнтә, дуға бөккән, арба, сана эшләп көн күргән. Берҙән-бер көндө оҫталығы килеп сынъяһау итеп ҡул тирмәне эшләп ҡуйған, ти.

Тирмәне матур, өҫтәүенә бик хикмәтле лә икән: таш һалһаң - тоҙ, үлән һалһаң, һөт тарттырып сығара икән. Тирмәнгә тотонор алдынан: "Лә илаһи-иллалла, Мөхәммәд рәсуллаһ", - тип әйтеү мотлаҡ икән. Төкөл ҡарттың тормошо яҡшырып киткән. Ул тирә-яҡтағы етем-еҫергә, туғандарына гел йыуаса таратыр булған. Бер ваҡыт урыҫ батшаһы уның мул тормошта типтереп йәшәп ятыуын ишеткән дә, үҙенең һалым йыйыусыһы Әндрәйҙе ебәргән, ти. Әндрәй килһә, Төкөл башҡорттарҙы йыйып, ҡымыҙ эсеп, ит ашап, рәхәтләнеп йәшәп ята икән. Әндрәйҙең (Андрей Жигалов тураһында һүҙ бара булһа кәрәк - **авт.**) бик асыуы килгән һәм башҡорттар һәйбәт йәшәй тип, 92 төрлө һалым һалған, ти. ("Әндрәй ҡаҙнаһы бармы ни?" тигән ләҡап халыҡ араһында әле лә осрай). Төкөлдөң хикмәтле тирмәнен дә дәүләт файҙаһына тип, тартып алған.

Был ваҡытта урыҫ батшаһы башҡорттарға тимерлек тотоуҙы тыйған саҡ була. Был башҡорттар хикмәтле тирмәндән дә берәй ҡорал эшләтеп алыр тип ҡурҡҡан Әндрәй. Ҡайтып барышлай бер күл буйындағы тау битләүенә ял итергә туҡтаған. Шунда башына яман уй килә уның: "Ни эшләп был тирмәнде батшаға алып ҡайтып барам, ошо тирәлә генә йәшереп торайым да аҙаҡ килеп алып, үҙем файҙаһын күрермен әле", - тип, тирмәнде яҡындағы шишмә ағып ятҡан бер тау мәмерйәһенә йәшереп китә. Тирмәндең эргәһенә был әйбер урыҫ кешеһенеке икәнлеген белдереп тәреһен дә ҡалдыра. Башҡорттарҙың сит кеше әйберенә теймәҫен белеп шулай эшләй. Шулай ҙа тирмәнде лә, тәреһен дә таштар менән күмә лә, башҡорт бабайы өйрәткән: "Лә илаһи-иллалла, Мөхәммәҙ рәсүллаһ", - тигән һүҙҙәрҙе онотмаҫ өсөн ҡабатлай-ҡабатлай ҡайтып китә. Ә тирмән шунан бирле эшләй ҙә эшләй, ташты тоҙға әйләндерә икән. Әндрәй ҡайтҡас, уның менән бергә йөрөгән ҡуштандары уның байып китәсәгенән көнләшеп, тирмәнде йәшереп китеүен батшаға ошаҡлай. Батша уны хыянаты өсөн туҡматып, төрмәгә ябып ҡуя, шунда ул иҫәрләнә, имеш. Иҫәрләнгәс, төрмәнән сығаралар. Шунан Әндрәй тирмәнде, тәреһен йәшереп киткән ерҙе килеп таба. Килһә, тирмән йәшереп киткән мәмәрйәләге соҡор тоҙло һыу менән тулған да әкрен генә ағып ята икән. Тирмәнде туҡтатыр өсөн баяғы "Лә илаһи-иллалла, Мөхәммәҙ рәсүлуллаһ", тигән һүҙҙәрҙе әйтергә кәрәк икәнен белә ул, әммә уны иҫенә төшөрә алмай. Һуңынан ул ҡартайғансы ошо ерҙә суҡынып, "Был минеке ине, минеке ине" тип ҡабатлай-ҡабатлай, бабайҙың тирмәненә табынып йәшәгән, ти".

Көгөш буйына тоҙ ҡайнатырға килгән Имәндәш ауылы ҡарты ошондайыраҡ легенда һөйләй торған булған ейәне Мәсәғүткә.

Легенда - легенда инде ул. Уның нимәһе бар, тиеүселәр булыр. Әммә ғалимыбыҙ, мәғрифәтсебеҙ Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев яҙып ҡалдырыуынса, аҫаба башҡортҡа төп өс нәмәне - ете быуынға тиклем үҙ шәжәрәнде, легенда - риүәйәттәрҙе, йондоҙҙарҙы белеү һәм уларға ҡарап юл табыуҙы мотлаҡ белеү кәрәк тип иҫәпләнгән. Шуға ла легендалар нигеҙендә тарихи дөрөҫлөк ята, тимәксемен. Әлеге легендала ла тарихи шәхестәр - Төкөл, Андрей Жигалов телгә алына. Ошонан сығып, был легенданың да тарихи ерлеге бар, тип әйтә алабыҙ. Тарихи документтарға мөрәжәғәт итһәк тә тоҙло шишмәләрҙең һәм уның эргәһендәге тоҙ ҡаласығының башҡорттарға бәйле икәнлеген күрербеҙ. Был тарихи документты һүҙмә-һүҙ килтереү урынлы булыр, тип иҫәпләйем:

"1678, апреля 17. Царская грамота уфимскому воеводе Венедикту Хитрово, о недозволении русским людям владеть башкирскими вотчинами.

От царя и великого князя Федора Алексеевича, всеа Великия и Малыя и Белыя России самодержавца, на Уфу, столнику нашему и воеводе Венедикту Яковлевичю Хитрово. Били челом нам великому государю Уфимского уезду Нагайские дороги Табынские волости Башкирцы Акченышко Кайтанов, Тоймаско Исеншугуров с товарыщи: в прошлых де давных годех запустела вотчина прадедов их выше города Уфы, вверх по Белой реке в трех днищах; и тою вотчиною завладел Табынские волости башкирец Тюкулко и нашел в той вотчине прадедов их соляные ключи. Как зачался город Уфа, и он Тюкулко извещал деду нашему государеву, блаженные памяти великому государю царю и великому князю Михаилу Федоровичию, всеа Русии самодержцу, и в той вотчине был соляной городок, и тою вотчиною владел он Тюкулко".

Күренеүенсә, Төкөл (икенсе бер сығанаҡтарҙа Төкөн) үҙенең ата-бабаларының аҫаба ерендә тоҙ ҡайнатҡан һәм тоҙ ҡаласығының хужаһы ла булып торған. Төкөн дә заманына күрә алдынғы ҡарашлы, уҡымышлы кеше булған, күрәһең. XVI быуат аҙағында барлыҡҡа килгән ауылдың тарихы ла уның исеме менән бәйле. Красноусол - Ҡурғашлы юлы буйында Үрге һәм Түбәнге Төкөн исемле ике ауыл булыуы билдәле. Ҡормантау ауылынан алыҫ түгел Ағиҙел йылғаһы аръяғында ла Үрге һәм Түбәнге Төкөн ауылдары (Ҡырмыҫҡалы районы) бар. Күрәһең, Ҡурғашлы юлындағы ауыл боронғо башҡорттарҙың ҡышлауы булып (урман яҡын, утын эргәлә), йәйгеһен мул көтөүлекле Ағиҙел туғайҙарына күсенгәндәрҙер, тип фаразларға була. Сөнки яҡынтирәлә бер үк исемдәге башҡа ауылдар юҡ.

Малсылыҡ, умартасылыҡ менән бер рәттән, Төкөл-Төкөн үҙ биләмәһендә тоҙ ҡайнатыу менән дә шөғөлләнгән. Районыбыҙ тарихсыһы Виктор Курмаев үҙенең "Очерки истории Табынского края" китабында ошо тарихи дөрөҫлөктө күрәләтә күрмәмешкә тырыша. Уныңса, был тирәлә тоҙ ҡайнатыу эше рустар, мордвиндар килгәс кенә башлана. Башҡорттар аш-һыуҙа тоҙ ҡулланмаған булып сыға. "Усольские соляные ключи" впервые упоминаются в старинных грамотах в XVI веке. Отряд казаков Ивана Нагого, исследуя местность вверх по р.Белой от закладываемой крепости Уфы, открывает на р.Коренной (Усолке) "соляные ключи", - тип яҙа автор. Ә алда телгә алынған тарихи документта Өфө ҡалаһына нигеҙ һалынғанға тиклем (йәғни 1574 йыл) Төкөлдөң үҙ биләмәһендә тоҙ ҡаласығы булыуы әйтелә. Тик Төкөл үлгәндән һуң ғына (бәлки, үлтергәндәрҙер) был биләмәләр билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында рустар ҡулына күсә. Ошо билдәһеҙлекте лә В.Курмаев үҙенсә үҙгәртеп, тәртәне үҙ яғына ҡайырып һығымта эшләп ҡуя. "Табынец Тюкун ... по сути арендовал ее. Иначе трудно представить, как вотчина после его смерти перешла к русским людям", - ти автор. Төкөндөң "вотчинаһы" - аҫаба ере булғас уны кемдән ҡуртымға алһын, ти. Башҡорттарҙың ергә булған аҫабалыҡ хоҡуғын Иван Грозныйҙан башлап барлыҡ батшалар ҙа (башҡорттарҙың хоҡуҡтарын боҙоп булһа ла) таныған. Тик 1917 йылда Октябрь революцияһынан һуң ғына башҡорттарҙың ергә булған аҫабалыҡ хоҡуғы юғалтылып, В.И.Ленин тарафынан "Ер тураһында декрет" ҡабул ителеп, барлыҡ ер совет власыныҡы тип иғлан ителә. Шулай булғас, Төкөндөң ере ҡуртымда булмаған, ул аҫаба башҡорт ере булған. Тоҙ сыҡҡан изге шишмәләрҙе күргән рустар башҡорттарҙың ерҙәрен алдап-йолдап үҙ ҡулдарына төшөргән, тип фаразларға була. Иван Грозный тарафынан бирелгән Грамоталарҙы (аҫабалыҡҡа) йыйып алып, Өфө воеводаһынан ергә икенсе документ эшләтеп алыуҙары ла билдәле. Ошоға бәйле бер миҫал - тарихи документтан өҙөк килтереп китмәксемен.

"...Били челом государем Уфимского уезда Осинской, Казанские, Сибирские и Ногайские дорог башкирцы. Тарханы и ясачные Телемка Бегенешев, Карманка Бекбовов, Ишена Ишкильдин, Кульчерка Кильмяков с товарищами: ... и тем нашим великих государей жалованьем вотчинами истари пращуры и прадеды, и деды, и отцы их владели по своим урощищам и томгам... ... И в недавних годах на тех их старинных вотчинах и во всяких угодьях поселились пришлые русские люди. И татары и чуваши, пришед и казанского, из Тобольского и из Кунчурского уездов и из Соловарного (Соликамского) городка... и свозят на Уфу наших, великих государей, грамоты, а на Уфе берут владения памяти, будто у них в уфимском уезде порозже дикое поле ... а у них да в Уфимском уезде диких поль и порозжих земель нет; а в летнее время у них в тех всоих вотчинх и угодьях на полянках кочуют... их теснят, и изобежают и кочевать не дают, а у них да в тех вотчинах на полянках и около угодьев конские стада ходят и в зимнее время". ("Материалы по истории БАССР", том I, стр.83).

Ошо документтан ғына күренеүенсә лә, башҡорт ерҙәрен нисек еңел ҡулға төшөргәндәр. Күрәһең,Төкөндөң ерҙәре лә, уның тоҙ ҡаласығы ла рустар ҡулына шул тәртиптә күскән. 1629 йылғы бер тарихи документта ла Күрпәс-Табын тоҙ ҡаласығы тураһында һүҙ бара. ... "где сказано, что чуваш Казанского уезда Зюрейский дороги дер.Карабаево Терегул Бадаев продал свою вотчину жильцу Курпеч-Табынского Соловарного острога...". Күренеүенсә, тоҙ ҡайнатыу ҡаласығы ниндәй ҙә булһа рус кешеһенең исеме менән түгел, ә Күрпәс бей исеме менән аталған. 1690 йылдарҙа ла был төбәк башҡорт кешеһенең исеме менән бәйле була. "В 90-х гг. XVII в. здесь проживал башкир Беккул ... а платит ясак с этой земли и со своей вотчины", - тиелә тарихи документта. Ғөмүмән, тарихи документтарҙа был тирәлә (Өфөнән башҡа) бер рус кешеһенең дә булмауы тураһында әйтелә. 1695 йылда Петр I исеменә яҙылған хатта: " ... от Уфы в дальнем расстоянии, в ыноверцах. А около того острошка русских жителей, сел и деревень, кроме Уфы города, никакого нет. А в острошке опроче нас, Холопей твоих, стрельцов дву сот человек, жителей никого нет же", - тип яҙалар стрелецтар. Тимәк, был тирәлә рустарҙың тоҙ ҡайната башлауы ла, сиркәү, монастырь төҙөүе лә тик XVIII быуат баштарында ғына башланған тип әйтергә ныҡлы ерлек бар.

**Самат ҒӘЛИУЛЛИН.**
**Ғафури районы.**

✓ *Уларҙың организмына эләккән вирус йәшәй алмай, сөнки мөхәббәт уларҙың вибрацияһын күтәрә. Тимәк, ауырымаҫ өсөн аураңды мөхәббәт менән тултырыу фарыҙ.*



**Киләсәктә беҙҙе нимә көтә? Ахырызаманмы? Ожмахмы? Кеше киләсәктә мең йыл йәшәй алһын өсөн нимә эшләргә тейеш? Ауырыуҙарҙан дарыуһыҙ, үләнһеҙ, бысаҡһыҙ ғына ҡотолоу юлдары бармы? Нимә ул космоэнергетика? Кеше һәр йәштә лә һау була аламы? 2012 йыл беҙгә нимә вәғәҙә итә? Ни өсөн беҙ Аллаһы Тәғәләгә яҡынларға тейешбеҙ? Кемдәр улар индиголар һәм кристалл вибрациялы балалар? Яңы үлсәмгә күсеү нимәне аңлата?**

**Әйткәндәй, был һорауҙар хәҙерге заманда барыбыҙҙы ла борсой. Уларға космоэнергетик Рауфан МОРТАЗИН яуап эҙләй.**

# АХЫРЫЗАМАН ТҮГЕЛ,

## Хоҙайға яҡынла,



### Бала сағымда төшкән яҡтылыҡ

Элек-электән атай-инәйҙәр, ҡартнәй-ҡартатайҙар төрлө мөғжизәле хәлдәр хаҡында һөйләй торғайны. Кемдәр 100 саҡрым араны йәйәүләп бер сәғәттә үткән, ниндәйҙер әүлиә-күрәҙәсе юғары квалификациялы медиктар өмөтһөҙ тигән диагноз ҡуйған сирлене аяҡҡа баҫтырған, кемдер стена аша үткән һ.б. Әлбиттә, беҙ былдай хәлдәрҙе әкиәти ысынбарлыҡ итеп кенә ҡабул итә инек. Ышанырға теләһәк тә, ышана алманыҡ. Миңә биш йәш булғанда (ул саҡта беҙҙең Мәсетле районының Теләш ауылында ут юҡ ине, клубҡа электр уты генераторҙан ғына алынды) өйҙәгеләр киноға киткәс, мин ҡартнәй менән өйҙә ҡалдым. Өй эсендә дөм ҡараңғы. Ниңәлер йоҡо килмәне. Түшәктә ятҡанда кинәт көндөҙгө кеүек донъя яҡтырып китмәһенме! Мине тағы ла шуныһы аптыратты: бер ҡайҙан да, бер нәмәнең дә күләгәһе төшмәй. Ул саҡта ғәжәпләнгән күренеште мин бөгөн генә төшөндөм. Ул фотон энергия булған икән дә. Киләсәктә һәр ҡайһыбыҙ уй көсө менән фотон энергияны тоҡандыра аласаҡбыҙ. Ул саҡта өй эсе ҡараңғы булғас, мин яҡты булыуын нык теләгәнмен икән. Шул теләк көсөм яҡтылыҡҡа әүерелгән.

Унынсыны бөткәс, медицина институтына уҡырға барырға уйлағайным, ләкин уҡығанда бер фәндән "дүртле" билдәһе булыуы тотҡарланы. Йәнәһе, медик кеше барлыҡ фәндәрҙе лә "бишле"гә белмәһә, кешегә зыян килтереүе бар. Нефть институтының төҙөлөш факультетын тамамлап, пенсияға киткәнсе башта Белорет леспромхозында, һуңынан шул уҡ ҡалала эске эштәр бүлегендә, аҙаҡ 10 йыл республиканың Эске эштәр министрлығында, артабан 10 йыл Һалым полицияһы идаралығында эшләнем.

2003 йылда "Комсомольская правда"ла Эмил Багировтың космоэнергетика менән шөғөлләнеүе тураһында уҡыным да, уның Өфөләге уҡыусыларына барып сеанс үттем. Әйтергә кәрәк, үҙемде һәйбәт тоя башларға бер сеанс та етте. 6-сы сеанстан һуң төрлө әйберҙәрҙең йәнен тойоп, улар менән әңгәмәләшә башланым. Ағастар, таштар менән дә һөйләшергә була. Уларҙағы мәғлүмәт беҙҙеке кеүек түгел, примитив формала. Һәр бер әйбер, ризыҡ үҙенең таҙа, матур, кәрәкле булыуын теләй. Мәҫәлән, алма, ул бешеп еткәс, үҙенең ашалыуын, кешегә файҙа килтереүен теләй. Һәр бер әйбер беҙгә файҙа килтереп, был юл менән Аллаһы Тәғәләгә файҙа килтереүен аңлай. Әйтәйек, кеше алманы ашай икән, бының менән алма Аллаһы Тәғәләнән сауап ала. Бер әйбер ватылды икән, ул тиҙерәк молекулаларға таралырға тырыша. Сөнки улар был сүрәттә яҡшы энергия бирмәй. Шуға күрә беҙҙең халыҡта элек-электән ярылған сынаяҡты, һауыт-һабаны, боҙолған әйберҙе ташларға тырышыу йолаһы бар.

Погонлы сағымда күп кенә ауырыуҙар менән яфалана башлағайным. Хроник гастрит менән ауырыным. Хроник ангина менән дә йылына 5-6 тапҡыр ыҙаландым. Бауырым да ауыртты. Космоэнергетика менән шөғөлләнә башлағас, быларҙың береһе лә ҡалманы. Үҙемдә хәҙер мин биолог 52 йәшемдән 20-30 йәшкә йәшерәк, йәш сағымдағыса көслө, ҡеүәтле итеп тоям.

### Индиголар, кристаллик вибрациялы балалар

Һәр кемдең үҙ тәғәйенләнеше бар: кемдер уҡытыусы, кемдер табиб йәки төҙөүсе булырға тейеш. Бынан тыш, һәр кемдең тыуыу маҡсаты бар. Әгәр ҙә кеше шул маҡсатына етмәһә, тәүҙә ҡәнәғәтһеҙләнеү, шунан борсолоу, шунан ҡурҡыу тойғолары кисерә башлай. Сөнки хәҙер ерҙең энергетикаһы үҙгәрә. 90-сы йылдарҙан башлап ерҙең вибрацияһы артты һәм бик талантлы балалар тыуа башланы. Уларҙы индиголар тип атайҙар. Ә 2007 йылдан башлап кристаллик вибрациялы балалар тыуа. Сағыштырыу өсөн: беҙ 2 ДНК-лы, Ғайса пәйғәмбәр (Христос) тыуғанда 12 ДНК-ға эйә булған, һуңынан ул тағы ла артҡан. Ә инде индиголар кәмендә 12, ә кристаллик вибрациялы балалар меңәрләгән ДНК менән тыуа. Әйтеп китергә кәрәк, кешелә ДНК-ның 12 спирале барлыҡҡа килһә, уларҙың селтәре әүҙемләшә башлай, хатта һәр спиралдә тағы ла меңәр-меңәр спиралдәр формалаша. Сөнки үҙенең төҙөлөшө буйынса ДНК хәҙерге телевидениела мәғлүмәт тапшырыу өсөн ҡулланылған нурҙарҙан ишелгән арҡанға оҡшаған.

Шулай итеп, ДНК селтәре ни тиклем әүҙемләшһә, кеше шул тиклем һауыраҡ һәм һәләтлерәк була. Йәғни гуманоидтарҙың, шул иҫәптән кешеләрҙең эволюцияһы ДНК селтәрҙәренең һаны артыуына туранан-тура бәйле. Сағыштырыу өсөн: элек телефон бүйлап мәғлүмәтте ике сым буйынса тапшырһалар, хәҙер мәғлүмәт нурҙар аша тапшырыла һәм беҙ ул мәғлүмәтте ишетеп кенә ҡалмайбыҙ, бер нисә канал аша телеканалда күрә лә алабыҙ. Шулай ҙа төрлө каналдарҙы файҙаланыр өсөн заманса көйләнгән аппарат кәрәк. Йәғни тиҫтәләгән меңләгән ДНК-ларҙы һыйҙырыр өсөн кешегә яңыса биология талап итәлә. Тап шундай биологияны беҙгә Аллаһы Тәғәлә тәҡдим итә, бының мөмкин икәнлеген беҙгә иҫбатлар өсөн кристаллик вибрациялы балаларҙы ергә тыуҙыра.

Индиго балаларҙың тән төҙөлөшө, ҡан төркөмө беҙҙеке кеүек, ә кристаллик вибрациялы балаларҙың ҡандары бер төркөмгә лә тура килмәй. Шуға күрә уларҙың ҡанын V төркөм тип ҡуялар. Уларҙы 7-се раса кешеләре тип тә атап була. Индиголарҙы 6-сы раса тип атарға була. Кристаллик вибрациялы балалар ауырымай, сөнки уларҙың һәр күҙәнәгенең вибрацияһы нык ҙур. Уларҙың организмына эләккән вирус йәшәй алмай, сөнки мөхәббәт уларҙың вибрацияһын күтәрә. Тимәк, ауырымаҫ өсөн аураңды мөхәббәт менән тултырыу фарыҙ.

Индиго һәм кристаллик вибрациялы балаларға беҙҙең тыйып-өгөтләп уҡытыу-тәрбиә системаһы бөтөнләй яраҡһыҙ. Был системаны үҙгәртергә кәрәк. Элекке һымаҡ уларҙы уҡытып та булмай хатта. Бындай балалар беҙҙе хәҙер үҙҙәре өйрәтә, уларҙы тыңларға ғына кәрәк. Тәрбиәсе менән тәрбиәләнеүсенең урындары алмашына. Беҙ балаларыбыҙға бары тик милли, әхлаҡ тәрбиә генә бирә алабыҙ. Уларын да мөхәббәт аша ғына бирергә кәрәк. Беҙҙең хәҙерге мәктәптә, киреһенсә, белем бирелә, рухи тәрбиә мәсьәләһе онотола. Хәҙерге балалар тыуғансы уҡ барыһын да белеп тыуа. Балаға 1 йәш тә тулмай, ул компьютерҙа уйнай башлай. Хәҙерге ваҡытта тәрбиә эшендә бөтә ҡалыптарҙан ситкә китергә, халыҡ педагогикаһының да тик кәрәклеләрен генә ҡалдырырға кәрәк.

Хәҙер һәр кем үҙенең ДНК-һын күтәреп кенә киләсәккә үтә ала. Әлеге ваҡытта үҙҙәренең тәндәрен ДНК-ларын күтәреү юлы менән кристаллиҡҡа әйләндергән ололар ҙа бар. Был юл менән кешенең һәләтен меңәрләгән тапҡырға арттырыу мөмкинлеге тыуа.

Индиголар һәм кристаллик вибрациялы балалар беҙҙе киләсәккә алып сығыр юлбашсылар. Улар - беҙҙе мөхәббәттә Йыһандың ҡанундарын ҡулланып йәшәргә өйрәтеүселәр.

### Аллаһы Тәғәләнең нуры

Йыһанда дин юҡ, унда бары Аллаһы Тәғәлә һәм ул тыуҙырған есемдәр һәм ҡанундар ғына бар. Шуға күрә кемдер берәү: "Мин дингә килдем", - тип үҙен бөйөк һиҙә икән, ул яңылыша. Кеше дингә түгел, Аллаһы Тәғәләгә килергә бурыслы. Шул уҡ ваҡытта динде лә инҡар итергә ярамай, ул үҙенең миссияһын үтәй. Ҡайһы бер дин әһелдәре барлыҡ диндәрҙе берләштереп маташа. Әммә диндәрҙе берләштереү мөмкин түгел. Сөнки Йыһанда дин юҡ.

Йыһан энергияһы - ул шул уҡ Аллаһы Тәғәләнең нуры. Ул энергия дауалай алмаған ауырыу юҡ. Сөнки Алланан килгән энергия зыянлы түгел. Әгәр ҙә кеше үҙе теләһә, был нурҙың барлығына ышанһа, теләһә ниндәй ауырыуҙан дауалана ала. Нурҙар ярҙамында кешенең аураһы таҙара, ә ауырыуҙарҙың программаһы аурала ята. Беҙҙең күҙгә күренгән физик тән менән йәнәш уға бермә-бер тап килгән энергетик эфир тән бар. Күренмәгән йөрәк, күренмәгән бөйәр-бауырҙар бар. Һәм йыһан энергияһына ҡойонған саҡта беҙҙең ауырыу тән өлөшөнөң күҙәнәктәре шул ҡалып буйынса регенерация үтә. Эфир тән нормаға килгәндән һуң кеше һауыға башлай. Йыһан нурҙары эфир тән аша физик тәнгә тәьҫир итә. Эфир тәндәге күренмәгән ағза һауыҡты, үҙгәрҙе икән, ти, физик тән дә шул уҡ рәүеште ала, йәғни һауыға. Эфир тәндән тыш, беҙҙең тойғолар тәне - астраль тән бар. Әгәр ҙә кеше насар тойғолар кисерһә, аураһын бысрата һәм эфир тән аша физик тәнгә насар йоғонто яһай. Дүртенсе тән - уйҙар тәне, йәғни, менталь тән. Әгәр ҙә кеше насар уйҙар уйлаһа, шулай уҡ ауранын бысрата

*Хәҙер ерҙең энергетикаһы үҙгәрә. 90-сы йылдарҙан башлап ерҙең вибрацияһы артты һәм бик талантлы балалар тыуа башланы. Уларҙы индиголар тип атайҙар. Ә 2007 йылдан башлап кристаллик вибрациялы балалар тыуа. Сағыштырыу өсөн: беҙ 2 ДНК-лы, Ғайса пәйғәмбәр (Христос) тыуғанда 12 ДНК-ға эйә булған, һуңынан ул тағы ла артҡан. Ә инде индиголар кәмендә 12, ә кристаллик вибрациялы балалар меңәрләгән ДНК менән тыуа. Әйтеп китергә кәрәк, кешелә ДНК-ның 12 спирале барлыҡҡа килһә, уларҙың селтәре әүҙемләшә башлай, хатта һәр спиралдә тағы ла меңәр-меңәр спиралдәр формалаша. Сөнки үҙенең төҙөлөшө буйынса ДНК хәҙерге телевидениела мәғлүмәт тапшырыу өсөн ҡулланылған нурҙарҙан ишелгән арҡанға оҡшаған.*

*Шулай итеп, ДНК селтәре ни тиклем әүҙемләшһә, кеше шул тиклем һауыраҡ һәм һәләтлерәк була. Йәғни гуманоидтарҙың, шул иҫәптән кешеләрҙең эволюцияһы ДНК селтәрҙәренең һаны артыуына туранан-тура бәйле. Сағыштырыу өсөн: элек телефон бүйлап мәғлүмәтте ике сым буйынса тапшырһалар, хәҙер мәғлүмәт нурҙар аша тапшырыла һәм беҙ ул мәғлүмәтте ишетеп кенә ҡалмайбыҙ, бер нисә канал аша телеканалда күрә лә алабыҙ.*

✓ *Кемдәр араҡы эсеп, фәхишәлек ҡылып, ғәйбәт һөйләп, уғрылыҡ менән шөғөлләнеп туймаған, уларҙың да ергә әйләнеп ҡайтыу хоҡуғы юҡҡа сығарыласаҡ.*

һәм шул уҡ механизм буйынса ауырый башлай. Йыһан энергияһы, йәғни Хоҙай нурҙары кешенең аураһын таҙартҡас, физик тәндең ауырыу өлөшө ауралағы таҙа энергияны үҙенә алып һауыға. Элек-электән кешеләр меңәр йыл йәшәгән һәм беҙ хәҙер шундай уҡ дәрәжәгә ҡайтырға тейешбеҙ. Ауран таҙа булһын, тиһәң, һин насар уйламаҫҡа, насар тойғолар кисермәҫкә тейеш булып сығаһың. Был программа диндәге бер хәҙискә тура килә: "Иң яманы: насар уй, көнләшеү һәм шомланыу. Мин һеҙгә уларҙан ҡотолоу юлын өйрәтәм: насар уйыңды бойомға ашырма, көнләшһәң, ҡаныңды ҡыҙҙырма, шомланһаң, үткәреп ебәр". Былырҙан тыш, насар эш эшләргә лә ярамай. Насар эш эшләһәң, кеше һинең турала насар уйлай, ә насар уй

тән 40 тәүлектә юҡҡа сыға. Кеше 41-се көндә аңына килгәндә уның аураһы тап-таҙаға әүерелә. Шуға күрә лә мәрт йоҡоһонан ҡайтҡан кешеләрҙең төрлө һәләттәре асылыусан. Хәләүәттә ултырыу ҙа шул уҡ мәрткә китеүгә яҡын. Унда ла кеше 40 тәүлек буйына Алланың исемен ҡабатлап ҡына ултырғас, башҡа нәмә тураһында уйлай алмай һәм уның эфир тәне, аҙаҡ тойғолар тәне, һуңынан менталь тәне таҙара. 40 көн үтеүгә уның да аураһы таҙара һәм бығаса күренмәгән һәләттәре асыла.

Кеше энергияны үҙенең аураһынан ала. Шуға күрә аураһы таҙа кеше оҙаҡ ваҡыт ашамайынса ла тора ала. Мәҫәлән, Австрияла бер кеше 15 йылдан ашыу бер нәмә лә ашамай, һыу ғына эсеп йәшәй. Ул организм өсөн

яғы, аръяғы, алыҫтағы киләсәге. Был замандың теге яғында - мөхәббәт, унда яҡты. Хәҙер ерҙең вибрацияһы нығ күтәрелә, ул да яңы заманға әҙерләнә. Суперһәләтле балаларҙың тыуыуы ла шул заманға әҙерлек булып тора.

2012 йылдан һуң ергә ожмах киләсәк. Элек ер 25-се үлсәмдә булған, артабан 12-се, 5-се, 3-сө үлсәмгә тиклем түбән төшкән. Әгәр ҙә вибрация бөтөнләй кәмеһә, хәрәкәт туҡтап ҡалып, планетала йәшәү юҡҡа сығыр ине. Әле ер 3-сө үлсәмдән 5-се үлсәмгә күсә, артабан тағы ла күтәреләсәк. Суперһәләтле балаларҙың тыуыуы ла юҡҡа түгел, Аллаһы Тәғәлә ошо юл менән ергә ярҙам итә.

Миңә килеүсе пациенттарҙың күбеһендә тәрән борсолоу бар. Уларҙың тормоштары яйлы, балалары үҫә, барыһы ла үҙ

2012 йылда ерҙең икенсе үлсәмгә күсерен күптәр белә, әҙерләнә. Күңелдәре саф һәм таҙа кешеләрҙең аҫҡы аңында бындай мәғлүмәт бар, улар шул мәғлүмәт ярҙамында яңы үлсәмгә күсә. Ә ҡалғандарҙы башҡа планеталар көтә. Ошо юл менән кешелек ике өлөшкә бүленәсәк. Бүленеү әле үк бара. Элек кешеләр ҡартайып үлә ине. Хәҙер үлем йәштәрҙе лә алып китә. Ни өсөн китәләр? Сөнки уларҙың йәне яңы үлсәмгә күсергә әҙер түгел, улар икенсе планетала йәшәйәсәк. Был - бер сәбәбе, икенсеһе - улар тиҙ арала яңынан тыуып, яңы үлсәмгә күсергә ошо рәүешле әҙерләнә. Мәҫәлән, ауырыу кеше бындай тәне менән яңы үлсәмгә күсә алмай. Ундайҙар был тәндән китеп, яңынан бала булып тыуып, ер менән бергә яңы үлсәмгә күсә.

тик ошолай итеп кенә аңлатырға булалыр.

Ергә әйләнеп ҡайтырға хоҡуғы булмағандар өсөн, вибрацияларына ҡарап, төрлө планеталар әҙерләнгән. Нығ агрессивтарҙы бер планетаға йыялар, сөнки улар бында һабаҡты ла тиҙ аласаҡ. Башҡа төрлө сифаттағылар ҙа һәр ҡайһыһы үҙ планетаһында тыуасаҡ.

### Электр энергияһы зыянлы

Элек ауылдарҙа электр булмаған, шунлыҡтан әүлиәләр ҙә күп булған. Электр булмағас, кешеләр үҙҙәрен магнит вибрацияһында тотҡан. Әгәр ҙә кеше ошо вибрацияла даими булһа, уның һәләттәре нығыраҡ асыла. Шуға күрә электр энергияһы беҙҙең организмға нығ зыянлы. Мәҫәлән, сиған-

# Ә МӨХӘББӘТ ЗАМАНЫ КИЛӘ -

## ауранды таҙарт, әҙерлән…

аураны бысрата һәм кешенең ауырыуы ихтимал. Насар уй уйламайым, насар һүҙ әйтмәйем, насар ғәмәл башҡармайым, тиһәң, һәр секунд шатланып, мөхәббәт менән йәшәргә кәрәк. Динле булыу ғына Аллалы булыуҙы аңлатмай. "Сиркәүгә йә мәсеткә йөрөгән түгел, Аллаһы Тәғәлә ҡанундары буйынса йәшәүсе динле", тиҙәр. 24 сәғәт буйына Алла менән йәшәргә кәрәк. Уның нурына ҡойоноп йәшәгән кеше шатланып йәшәй һәм ауырымай, үҙенең һәләттәрен үҫтереүгә өлгәшә. Кеше насар уйлаһа, насар уйлағаны матдиләшә, ә инде ул "шул хәл булмаһын ине", тип уйлаһа, теләмәгәнен күҙ алдына килтерә һәм уға энергия бирә лә, "булмаһын ине" тигәне лә тормошҡа аша.

### Һәр кем һәләтле булып тыуа

Һәр кем тыумыштан һәләтле булып тыуа. Әммә уларҙың һәр ҡайһыһы үҙенә һалынған интеллектуаль һәләтте үҫтерә алмай. Ни өсөн? Сөнки беҙ уйламайынса тора алмайбыҙ. Уйҙарҙың да төрлөһө, насары-яҡшыһы була, шул уйҙар ярҙамында, дөрөҫөн әйткәндә, ғүмеребеҙҙе ҡыҫҡартабыҙ. Миҫалға медиктарҙы ғына алайыҡ. Улар башҡа һөнәр кешеләренә ҡарағанда 15-17 йылға аҙыраҡ йәшәй. Сөнки кеше организмының ауырыу өлөштәрен күп тапҡырҙар күреү, ауырыуҙарҙың үҙенсәлеген аңлау уларҙың үҙҙәрендә белгәндәрен матдиләштереүгә булышлыҡ итә.

Шулай итеп, кешеләрҙең насар уйҙарын алып ташлағанда уларҙың һәләттәре асыла башлай. Клиник үлем - мәрт мәлендә кешенең эфир тәне өс тәүлектән һуң ҡыйрала, астраль тән - 7-9, менталь

кәрәкле матдәләр булған диңгеҙҙә һыу инеү менән генә сикләнә. Рәсәйҙә йәшәүсе Зинаида Баранова 10 йылдан ашыу ашамай. Киләсәктә беҙ йыһандан энергияны күберәк алған һайын, әҙерәк ашай башлаясаҡбыҙ. Элек 60 йәшлек кеше ҡарт күренһә, хәҙерге 60 йәшлектәр егет кеүек кенә. Ваҡыт хәҙер бер яҡтан һуҙылды, икенсе яҡтан ҡыҫылды. Хәҙер кешеләр 20 йыл йәшәп туплаған тәжрибә һәм аҡылды 1 йыл эсендә туплауға һәләтле. Был энергия тығыҙлығына бәйле.

Иғтибар менән уҡыһағыҙ, Ҡөрьәндә үткән, хәҙерге һәм киләсәк тормош хаҡында яҙылған. Унда реанкарнация һүҙе юҡ, әммә тормоштар күп. Был кешенең бер нисә тапҡыр донъяға тыуыуы хаҡында һөйләй. Кеше эволюция дәрестәре алыр өсөн күп тапҡырҙар тыуа.

### 2012 йылда нимә була?

2012 йылда планеталар парады көтөлә. Беҙҙең ҡояш, беҙҙең галактиканың үҙәк ҡояшы, беҙҙең ғаләмдең үҙәк ҡояшы һәм башҡа бер нисә планета бер һыҙыҡҡа теҙеләсәк. Йыһандан ергә бик көслө фотон энергия киләсәк. Был энергия кешеләрҙең аураһын таҙартасаҡ. Ул әле үк таҙарта башланы, сөнки был датаға яҡынлайбыҙ. Кемдең аураһы таҙа, улар 2012 йылды еңел үтә аласаҡ. Шуға күрә "2012 йылда тик дингә килеп, Хоҙай ҡанундары буйынса йәшәгәндәр генә тере ҡаласаҡ", тигән фараз аура таҙалығы менән аңлатыла ла инде. 2012 йылдан һуң ахырызаман була тиҙәр. Дөрөҫ. Әммә ахырызаманды кешелектең бөтөнләй юҡҡа сығыуы тип аңларға ярамай. Ахырызаман ул - әле беҙ йәшәгән ошо замандың теге

урынында, әммә күңелдәре тыныс түгел. Был күренеш шул хаҡта һөйләй: алда торған ҙур үҙгәрештәрҙе тойған йәнебеҙ: "Уян, һине мөхәббәтле заман көтә, ауранды таҙарт, әҙерлән!" - тип беҙҙе һәм рухыбыҙҙы уятырға теләй.

Беҙ, кешеләр, үҙебеҙҙең насар уйҙарыбыҙ, ҡылыҡтарыбыҙ, ғәмәлдәребеҙ менән ерҙең аураһын бысраттыҡ. Һуңғы сиктә килеп, еребеҙ һаҡланып ҡалыр өсөн үҙен-үҙе таҙарта, үҙен бысратыусы кешеләрҙе күпләп юҡҡа сығарып, тәбиғи балансын тигеҙләй. Был процесты ер мәжбүри рәүештә үткәрә. Ни өсөн тигәндә, ер таҙарырға тейеш, һәр кеше үҙенең аураһын таҙартып, үҙенән артып ҡалған таҙа энергияһын ергә бирһә, ул да таҙарыр ине. Шуның өсөн һауа температураһы күтәрелә, боҙлоҡтар ирей, кешеләр йәшәгән ауыл-ҡалаларҙы һыу баҫа. Тимәк, киләсәктә тарихта булған "кешелектең бөйөк күсенеүе" һымаҡ күренештәрҙән дә азат була алмаясаҡбыҙ. Страус һымаҡ башыбыҙҙы ҡомға тығып ҡына беҙ был хәлдәрҙән ҡотола алмаясаҡбыҙ.

### Яңы үлсәмгә күсеү

Ерҙең 5-се үлсәмгә күсеүе ҡотолғоһоҙ күренеш. Ер менән бергә кемдәр шул уҡ үлсәмгә күсергә теләй, улар аураһын таҙартырға, вибрацияларын күтәрергә бурыслы. Ә кемдәр күсергә теләмәй, улар икенсе планетала йәшәйәсәк. Уларҙы Хоҙай ерҙең киләсәгенә индермәй. Кемдәр араҡы эсеп, фәхишәлек ҡылып, ғәйбәт һөйләп, уғрылыҡ менән шөғөлләнеп туймаған, уларҙың да ергә әйләнеп ҡайтыу хоҡуғы юҡҡа сығарыласаҡ. Ундай мөмкинлектәрҙе уларға башҡа планетала бирәсәктәр. Улар икенсе планетала йәшәгәндә ерҙәге ожмахты һағынасаҡ һәм ундағы ғүмерҙе йәшәп үлгәндән һуң бында кире әйләнеп ҡайтырға хоҡуҡ яулар өсөн яҡшы ғәмәлдәр ҡылырға тырышасаҡ.

Тимәк, ерҙең яңы үлсәмгә күсеүендә үлем диспетчер ролен башҡара. Хәҙер инфаркт, инсульт нығ күбәйҙе, былар ауранның бысраҡ булыуына бәйле. Кеше көндән-көн арта барған вибрацияға сыҙамай.

Элек донъянан китеүселәрҙең йәне 10-ар йыл ял итә ине, ул артабан 6-7 йылға тиклем кәмеп, хәҙер был мөҙҙәт 1-2 йылды тәшкил итә. Ерҙән киткән йәндәр хәҙер ергә яңынан тыуырға атлығып тора. Кешенең үткән ғүмерендә аураһы таҙа булһа, йәне ергә тағы ла тиҙерәк тыуа ала. Киләсәктә беҙ суфыйҙар кеүек саф, таҙа була алһаҡ ҡына йәшәй аласаҡбыҙ. "Суфый" һүҙенең нигеҙендә "саф йәнле" булыу тигәнде аңлау ғына ла етә был осраҡта. Яңы үлсәмгә күскәндә саф йәнлеләр генә ер менән ҡала ала. Сиған кешеһе үлгәндә туғандары йырлай, бейей, шатлана. Сөнки улар үлгән кешеләрҙең йәнен алып китергә килгән фәрештәләрҙе лә күрәләр. Шул уҡ ваҡытта улар үлгән сиғандың йәне бер нисә йылдан үҙҙәренә кире әйләнеп ҡайтырын да белә. Был осраҡта йән үҙе лә шатлана. Сөнки ул билдәле һабаҡ алғандан һуң, яңынан ергә ҡайтҡанда, үткәндәге хаталарын ҡабатламаҫҡа тырышып, ырыуына күберәк ярҙам итергә тейешлекте яҡшы аңлай.

Ҡөрьәндә яҙылғанса, Хоҙай үҙенә ышанмағандарҙы киләсәктә икенсе халыҡ менән алыштырырмын, тиеүе лә яңы үлсәмгә күсеү менән бәйле. Әгәр ҙә теге йәки был халыҡтың, милләттең ҙур өлөшө Хоҙайҙың барлығын инҡар итә һәм бысраҡ аура менән йәшәй икән, ул милләт вәкилдәре үлгәндән һуң киренән ергә әйләнеп ҡайта алмаясаҡ, йәғни тотош милләттәрҙең, халыҡтарҙың икенсе планеталарға күсеп китеүе бар. Ҡөрьәндә бер халыҡты икенсеһе менән алыштырыу хаҡында әйтелгәнде

дар электр энергияһынан алыҫта, тәбиғәттә йәшәй. Шуға күрә уларҙың зиһене беҙгә ҡарағанда нығыраҡ асылған. Уларҙың күрәҙәлек һәләте лә ошо хәлгә бәйле. Ҡыҙғаныска ҡаршы, цивилизация күренеше булған электр энергияһы беҙҙең һәләтте үлтерә. Иң беренсе кешеләр магнит вибрацияһында булғандар һәм меңәр йыл йәшәгәндәр. Ер киләсәктә 5-се үлсәмгә күскәндә кешеләр, элекке һымаҡ, меңәр йыл йәшәйәсәк. Ғүмер әле үк оҙайҙы, ни өсөн тигәндә, беҙ 2012 йылға яҡын килдек.

Әгәр ҙә был тормошта кеше берәйһен рәнйетһә, йәне тормошҡа икенсе тапҡыр килгәндә үҙен рәнйетәсәктәр, бер кеше икенсене көсләһә, үлтерһә, икенсе йәшәйештә үҙен көсләйәсәктәр йә үлтерәсәктәр. Был йыһандың бумеранг ҡануны. Ошо кисерешие үткәргәндән һуң кеше һабаҡ ала. Һәр кешелә Хоҙайҙың сатҡыһы бар. Йыһанда тере йәндәр араһында идеаль мөнәсәбәт булған планеталар ҙа бар. Унда йәшәүселәр мәңге рәхәтлек кисерә.

**Әйткәндәй…**

**Ошондай изге уйҙар менән янып йәшәүсе космоэнергетик-табиб Рауфан Мортазиндың яңыраҡ "Мөғжизәләр заманы. Космоэнергетика һәм һаулыҡ" тигән китабы донъя күрҙе. Был китабында автор кешене уратып алған аураһы, чакралары, әҙәм балаһы үтергә тейешле һабаҡтар, мөхәббәт энергияһы, доғалар, яҙмыш, балалар, күреү һәләте хаҡында, һыуҙың, ризыҡтың файҙаһы, электр энергияһының, вампиризмдың, насар уй-тойғоларҙың зыяны һәм башҡа төшөнсәләр тураһында үҙенсәлекле фекер йөртә. Ғөмүмән, Рауфандың һөйләгәндәрен беҙ киләсәктә кешелекте йәшәтер хәҡиҡәт тип ҡабул иттек.**

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ
яҙып алды.

✓ *Миһырбанлы булһа батшағыҙ,*
*Эштәрегеҙ барһа кәңәшле,*
*Байҙарығыҙ булһа илгә терәк,*
*Һеҙгә ер аҫтында булыу түгел,*
*Ер өҫтөндә булыу хәйерлерәк.*



КИТАБЕННАС

## ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

157
Кем дә кем туйҙырыр
Астың тамағын,
Шуға Аллаһ бирер
Ожмах тәғәмен.

158
Яуҙа яугир һаҡланғандай ҡалҡан менән,
Ураҙа һаҡлар йәһәннәмялҡынынан.

159
Һеҙ ҡысҡырып белдерһәгеҙ ҡайғы-зарҙы,
Мәрхүмегеҙ нығыраҡ күрер ғазаптарҙы.

160
Ғилем эҙлә, белем файҙа,
Булһа ла ғилем Ҡытайҙа.

161
Әхирәт өсөн хеҙмәт ҡыл,
Гүйә һуңғы көнөң еткән.
Фани донъяға хеҙмәт ит,
Тыуған кеүек мәңгелеккә.

162
Халыҡҡа һыу эсереүсе
Сарсап та түҙер,
Кеше эсеп бөткәс кенә
Һыу эсер үҙе.

163
Атаһын яҡлаған - Аллаһын яҡлаған,
Атаға баҡмаған - Аллаға баҡмаған.

164
Хәлеңде белмәгәндәрҙең
Хәлен белә күр.
Һиңә бүләк бирмәгәнгә
Бүләк бирә күр.

165
Күңелеңде нимә өйкәй,
Тиҙерәк ҡотол шул көйөктән.

166
Белем бирегеҙ, ғилем эстәгеҙ,
Еңеләйтегеҙ, ауыр итмәгеҙ,
Һөйөндөрөгөҙ, нәфрәт һипмәгеҙ.

167
Туғанлыҡтың ебен кемдәр өҙәр,
Күрше хаҡын кемдәр һанамаҫ -
Ундайҙарға Аллаһ ҡиәмәт көндө
Мәрхәмәте менән ҡарамаҫ.

168
Изгелектән өҙөлмәһен өмөтөгөҙ,
Күркәм йөҙләләрҙән уны көтөгөҙ.

169
Нисек туҡтатырға тиеп
Торғанда аптырап,
Маҡтаусының ауыҙына
Һибегеҙ тупраҡ.

170
Миһырбанлы булһа батшағыҙ,
Эштәрегеҙ барһа кәңәшле,
Байҙарығыҙ булһа илгә терәк,
Һеҙгә ер аҫтында булыу түгел,
Ер өҫтөндә булыу хәйерлерәк.

Яуыз булһа әгәр батшағыҙ,
Эшегеҙ - ваҡ, байҙарығыҙ - һаран,
Ер ҡуйыны һеҙгә хәйерлерәк,
Ер йөҙөндә йәшәүегеҙ әрәм.

171
Уйнай ҡалһа шайтан инеп төшөңә,
Һөйләй күрмә, зинһар, уны кешегә.

172
Эшләй белмәгәнгә эш ҡушһалар,
Белһен донъя: булыр эштәр харап.

**(Дауамы бар).**




5

Эльза Германияла тыуҙы. Донъялағы бөтә сабыйҙар кеүек үк, ул да ҡыҙыҡһыныусан тәбиғәтле булып үҫте. Иҫ белә башлағас, атаһы менән әсәһенән төбәшмәгән нәмәһе ҡалмай ине: ниңә улай ҙа, ниңә былай? Моғайын, был аҡылы камил һәр балаға хас сифаттыр. Эльза әсәһенә бынау сетерекле һорауҙы биргәнен һаман хәтерләй:

- Ә һинең әсәйең бар инеме?

- Нисек булмаһын, - тине ҡыҙының был һорауына ғәжәпләнә биреп ҡуйған ҡатын. - Бөтә кешенең дә әсәһе була.

- Ә ул ҡайҙа?

- Өләсәйең алыҫ-алыҫҡа китте, балам.

- Ә ул ҡайтамы?

- Белмәйем, - тине әсә. - Бәлки, ҡайтыр.

Үҫә төшкәс, ҡыҙыҡай егерменсе быуат уртаһында ҡот осҡос һуғыш булғанын, Германияның еңелгәнен, Адольф Гитлерҙың ике туған апаһынан тыуған өләсәһе Марияның Австриялағы эре ер биләүсе Рудольф Копенштайнерға һуғыштан алда кейәүгә сыҡҡанын, Рудольфтың 1937 йылда уҡ "Гитлерҙың ғаилә шәжәрәһе" исемле китап яҙғанын, ошо китап буйынса фюрерҙың барлыҡ нәҫел-нәсәбен, шул иҫәптән, Эльзаның олатаһы менән өләсәһен совет НКВД-һы ҡулға алғанын, әсәһенең балиғ булмау сәбәпле әсирлектән ҡотолоп ҡалғанын белде.

1990 йылда Берлин стенаһы ҡолап, ике идеологик лагерға бүленгән Германия яңынан бер дәүләткә берләшкәндә, Эльза Берлин университетының филология факультетында уҡып йөрөй ине. Был картанан ҡарағанда тиреһе туналған һыйыр түшкәһен хәтерләткән СССР тарҡалып, бойондороҡһоҙ дәүләттәр барлыҡҡа килеп, Рәсәй өҫтөндә демократия елдәре уйнай башлаған осорға тура килде. Аудиторияларында егерме меңгә яҡын студент уҡыған Берлин университеты донъяның төрлө юғары уҡыу йорттарындағы филология факультеттары менән тел алмаш белем биреү тураһында контракттар төҙөүгә ҙур иғтибар бирә ине. Шундай контракттарҙың береһе Башҡорт дәүләт педагогия университеты менән дә төҙөлдө. Уны тормошҡа ашырыуҙа роман-герман филологияһы факультеты деканы, доктор Маргарет Раш менән башҡорт теле һәм әҙәбиәте факультеты деканы, доктор Фирҙәүес Хисамитдинова ҙур роль уйнаны. Фирҙәүес ханымды тәүге күреүҙән, уның ауыҙынан башҡорт телмәрен беренсе тыңлауҙан уҡ Эльза был боронғо, үҙенсәлекле телгә ғашиҡ булды. Төрки телдәре араһында иң бай фонемалы, һығылмалы тел уны үҙенең йомшаҡлығы һәм моңлолоғо менән әсир итте. Эльза башҡорт филологияһын өйрәнеү өсөн Өфөгә шулай килеп юлыҡты.

Уларға мәктәптә сит тел сифатында урыҫ телен уҡыта торғайнылар. Шуға күрә ҡыҙ, форсаттан файҙаланып, донъя телдәренең береһе булған был телде өйрәнеүгә лә ҙур иждиһат һалды. Шул маҡсаттан, китапхана ишегенең тотҡаһын һыуытманы - әҙәби китаптар менән танышты, ваҡытлы матбуғатты уҡып барырға тырышты. Бер мәл Эльза "Комсомольская правда" гәзитен ҡараштырып ултырғанда С. Смирнов тигән журналистың "Верхнеурал централының "Тимер битлеге" тигән материалына юлыҡты. Башта мәҡәләгә илтифатһыҙ ғына күҙ йүгертеп сығырға уйлаған ҡыҙ, үҙенең өләсәһе менән олатаһының фамилияларына юлығып, тулҡынланыуҙан нишләргә белмәне. Уның тәне эҫелеһыуыҡлы булып китте, бит алмалары, ҡолаҡтары янды. Эльза материалды бер тынала уҡып сыҡты. Шик булыуы мөмкин түгел: нәғеҙ шулар! Барыһы ла тип әйтерлек әсәһе һөйләгәнсә, ваҡ деталдәренә ҡәҙәр тап килә. Бына бит, ап-асыҡ яҙылған: Мария һәм Рудольф Копенштайнерҙар Австрияла эре ер биләүселәр була. Һуғыш ваҡытында урыҫ, поляк, чех армияларының әсиргә төшкән һалдаттарын эшсе көс, батрак сифатында файҙаланыуҙа ғәйепләнеп, яу туҡтағандың туғыҙынсы көнөндә НКВД тарафынан ҡулға алынып, СССР-ға оҙатылалар. Ире хөкөм ҡарарын көтөп Лефортово төрмәһендә ҡала, ә Марияны Верхнеурал централына ебәрәләр.

Йөрәкһегән Эльза ҡәтғи ҡарарға килде: ул өләсәһенең һуңғы төйәген барып күрергә тейеш! Уйланған эш - бөткән эш, тиҙәрме әле? Тиҙҙән яйы ла килеп сыҡты: лекциялар тамамланып, сессиялар башланды. Уй-ниәте көндән-көн көсәйә барған Эльза тәүәккәлләп юлға сыҡты. Бына Магнитогорск, бына Верхнеуральск... Һаумы, күрмәгән өләсәйҙең һуңғы һулышы алынған ер! Һаумы, меңәрләгән тотҡондоң уй-зарын, өмөттәрен үҙенә һеңдереп, уларҙы тимер битлек аҫтына йәшергән данлыҡлы централ!

Ҡаланың төньяғында айырым урынлашҡан төрмә Эльзаны томһайып ҡаршыланы. Уның ҡыҙыл кирбестән эшләнгән стеналары, тирәяғын уратып алған тимер-бетон ҡоймалары, сәнскеле тимерсыбыҡтары: "Һин бында нишләп йөрөйһөң? Беҙҙән арыраҡ булыуың хәйерле", - тип ҡысҡырып торғандай ине. Алыҫ түгел аҡҡан Яйыҡ буйында ҡарт тирәктәр үҫә, уларҙың ботаҡтарына оя ҡорған ҡарғалар өҙләкһеҙ ҡарҡылдаша. Ғөмүмән, ниндәйҙер шомло урын. Өҫтәүенә, төрмәнең эргәһендә генә зыярат. "Моғайын, бында төрмәлә үлеп ҡалған тотҡондар ҙа ерләнгәндер, - тип уйланы Эльза. - Өләсәйем дә шунда яталыр инде. Бәлки, берәй мөғжизә менән ҡәберен таба алырмын". Шул уй уны зыярат эсенә әйҙәне. Үҙе бер ҡала майҙанын биләп, йәйрәп ятҡан ҡәберстанда моңһоу тынлыҡ, сөнки бында инде яу ҙа, дау ҙа юҡ. Ниһайәт, баһалар ҙа, үлсәмдәр ҙә тигеҙләнгән - донъялыҡта кем булыуҙарына ҡарамаҫтан, һәр ҡайһыһына берәр ҡолас ер тейгән. Шул мәңгелек ҡанунды раҫлағандай, йыш-йыш теҙелеп киткән ҡәбер билдәләренең иҫәбе-һаны юҡ: ағастан, тимерҙән яһалған арҡысаҡтар, төрлө таштарҙан эшләнгән һәйкәлдәр, рәшәткәләр, веноктар. Ҡәберҙәрҙең күбеһе ҡараулы - уларҙа декоратив ҡыуаҡтар, сәскәләр үҫә, таштары яҙыулы. Ҡарауһыҙҙары ла етерлек: рәшәткәләрен тут баҫҡан, таштарында яҙыу-фәлән күренмәй, арҡысаҡтары ҡыйшайған йәки бөтөнләй юҡ. Былары тотҡонда вафат булған һәм төрмә хеҙмәткәрҙәре тарафынан арлы-бирле итеп ерләнгән билдәһеҙҙәрҙең ҡәберҙәрелер, күрәһең. Улар араһынан үҙеңә кәрәклеһен табып ҡара! Ниндәйҙер табышҡа юлығыуҙан өмөтөн өҙгән Эльза зыяраттан сыҡты. Ысынлап та, кәбән араһынан энәне эҙләп табыуы бик ауыр. Ә әгәр ҙә ул кәбәндә энә булмаһа? Бөгөнгө осраҡ шундайыраҡ әхүәлгә оҡшаш ине.

Йөрәкһегән ҡыҙ тулышҡан тойғоларын баҫыр өсөн Яйыҡ буйына төштө, унда ла йәм тапмай, яҡындағы түбәләс башына менде. Бынан барыһы ла ус төбөндәге кеүек күренә: күбеһе ағас йорттарҙан торған кескәй ҡала, бормаланып аҡҡан Яйыҡ йылғаһы, көнбайыш тарафта тотош монолит булып күкһелләнеп ятҡан тау теҙмәләре. Уның өләсәһе хөкөм ҡарарын көтөп камерала тонсоҡҡанда уйҙары тыуған иленә талпынғандыр, прогулкаға сыҡҡанда ошо тауҙарға тилмереп ҡарағандыр, уларҙың арьяғында ҡалған ирекле тормошто һағынып зарыҡҡандыр. Уйынмы ни: биш йыл буйы хөкөм ҡарарын көт әле! Ниһайәт, 1950 йылда тикшереү тамамлана, ҡарар иғлан ителә: 25 йыл төрмә! Әммә бынан һуң Мария оҙаҡҡа бармай - яза биреүселәрҙән мыҫҡыл иткәндәй, мәңгелек йортҡа күсә. Уның үҙен мәсхәрәләүҙе лә шартына килтереп үтәгәндәрҙер, моғайын. Марияның күҙлек һорап яҙған ғаризаһына төрмә начальнигының һуҡҡан резолюцияһы ни тора: "Выдавать, но только в ночное время!"

Эльзаның күңеленә еңел дә, ҡыйын да ине был минутта. Әгәр өләсәһенең ғазаплы йәне күккә олғашҡан ерҙе күреү ниндәйҙер йыуаныс килтерһә, тормоштоң аяуһыҙ ҡанундары алдындағы сараһыҙлыҡтан йәне инрәп-инрәй. Ҡыҙ шомло тынлыҡ һаҡлап торған төрмә бинаһына, уға терәлеп ятҡан зыяратҡа, барыһына битарафлыҡ һаҡлап аҡҡан Яйыҡҡа, алыҫта күренгән мәғрур тау һырттарына ҡарап байтаҡ ултырҙы. Ҡапма-ҡаршылыҡлы кисерештәрҙән күңеле тулып, бер нисә мәртәбә балауыҙ һығып та алды. Ултыра торғас, ҡапыл уның башына бер уй килде: өләсәһе тураһында кинофильм төшөрөргә! Әллә ниндәй ҙур метражлы художестволы таҫма түгел, ә һәүәҫкәр документаль фильм. Бер кешенең аянысл ы яҙмышы аша һуғыштың ниндәй ҙур фажиғәләргә килтерергә һәләтле икәнен асып бирергә! Бының өсөн, әлбиттә, рухи һәм, бигерәк тә, матди яҡтан оҙайлы әҙерлек алып барырға, төрмә архивтарының биктәрен асыу юлдарын эҙләргә кәрәк буласаҡ. Ләкин улары инде хәл итә алырлыҡ мәсьәләләр. Иң мөһиме - теләк булһын.

**(Дауамы бар).**

**Ошо көндәрҙә баш ҡала тамашасыларын ҡыуандырып, хайран ҡалдырып, Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт театрының гастролдәре булып үтте. Уны ысын мәғәнәһендә мәҙәни каникулдар тип атарға була, сөнки күп тамашасылар бер спектаклде лә ҡалдырмай йөрөнө. Тәү ҡарашҡа нимә күҙгә ташланды: театр яңы үҫеш дәүерен кисерә. Ысын мәғәнәһендә Театр ул хәҙер. Бәгзе бер театрҙағы кеүек төп роль башҡарыусы актерҙар һәм күмәк сәхнә актерҙарынан торған түгел, ә бер бөтөндө тәшкил иткән, ойошҡан Труппа. Һәр актерҙан көслө энергетика урғыла. Күрәһең, улар һайлаған һөнәренә эш итеп түгел, ә ниндәйҙер кимәлдә юғары миссия итеп ҡарай. Актерҙарҙың физик формаһы айырым маҡтау һүҙенә лайыҡ - бар быуын актерҙары ла һомғол, хәрәкәтсән.**

**Театрҙы сәнғәт донъяһында йөҙгән карап менән сағыштырһаҡ, карапты йөҙөүен, уның тиҙлеген һәм командалағы мөхитте, әлбиттә, капитан билдәләй. Бөгөн беҙ театрҙың баш режиссеры, байтаҡ спектаклдәрҙең режиссеры, яраткан йырсыбыҙ һәм актерыбыҙ Азат Нәҙир улы ЙЫҺАНШИН һөйләгәндәрҙе тәҡдим итәбеҙ уҡыусыларыбыҙ иғтибарына.**

# СӘНҒӘТ ДИҢГЕҘЕ КАПИТАНЫ...

## Стәрлетамаҡ театрында ла бар



### Яҙмыш

Мин яҙмышҡа ышанам, тик үҙемсә. Ғәҙәттә, кеше тормошон үҙенсә ҡорорға теләмәһә, уға яуапһыҙ ҡараһа, яҙмышҡа һылтанырға ярата. Бәхетһеҙ саҡтарында, яҙмыштыр инде, тип уфтана. Ә мин бәхетте яҙмыш тип һанайым һәм бәхеткә ынтылам, уны яулап алам һәм бер нәмәнән дә ҡурҡмайым. Ә нимәнән ҡурҡырға? Мин был тормошта шофер булдым, ашнаҡсы булдым, һикәлтәле юлдар менән эстрада йырсыһы һәм актер булып киттем. Йәшләй ғаиләҡорҙом, етеш тормошта түгел, ә дөйөм ятаҡ шарттарында өс малай атаһы булдым. Сөнки ғаилә булғас, ул ҙур булырға, балалар бер-береһенә терәк булырға тейеш.

Эстә ниндәйҙер этәргес көс бар икән, һин үрләргә тейеш, юлсы юлда булырға тейеш. Ә ҡурҡыу - ул беҙ үҙебеҙ уйлап сығарған кәртә. Көслө булһаң, һиңә ышаналар. Минең дә яҙмыш тигәнең ошондай ышанысҡа ҡоролдо.

### Ышаныс

Заманында минең йырҙарымды ишетеп, Урал Иҙелбаев миңә "Аҡйондоҙ" тәркөмә ойошторорға тәҡдим итте. Минең йырсы һәләтенә ышаныс ине был.

Оло ышаныс һәм өмөт бағлап, режиссер Азат Нәҙерғолов мине әлеге Милли йәштәр театрына саҡырҙы. Аҙаҡтан мин Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академтеатры актеры булып киттем. Мин төрлө пландағы төп ролдәр башҡарҙым - режиссерҙар миңә ышанды. Шул уҡ ваҡытта мин режиссерҙар эшен ҡыҙыҡһынып күҙәттем, улар менән күп осраҡта бөтөнләй ризалашманым, мин икенсерәк эшләр инем, тип уйлай торғайным. Һәм бер ваҡыт үҙем спектакль ҡуйып ҡарарға булдым. Театр етәкселеге миңә ышанып, Флорид Бүләковтың "Их, күгәрсенкәйҙәрем" пьесаһы буйынса спектакль ҡуйырға мөмкинселек бирҙе. Үҙемдең эстәлегемде, донъяға ҡарашымды актерҙар аша биреү мөғжизәһе мине тамам арбаны һәм мин театр режиссерына уҡырға ниәтләндем. Үҙемде, ниһайәт, быға өлгөрҙөм, тип һананым.

Ә иң ҙур ышанысты миңә Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт театрының директоры Искәндәров Таһир Тимерхан улы белдерҙе. Ул мине, Щукин исемендәге Юғары театр училищеһының беренсе курс студентын, үҙенең театрына баш режиссер итеп саҡырҙы.

### Вахтангов мәктәбе

Быйыл мин уҡыуымды тамамлайым. Остазыма - билдәле режиссер һәм актер Александр Михайлович Вилькинға сикһеҙ рәхмәтлемен. Уның сәнғәткә һәм тормошҡа ҡарашы минең асылыма тап килде, үҫтерҙе, нығытты. Беҙҙең театр училищеһы Вахтангов мәктәбенә ҡарай, ә был мәктәптең төп принцибы - сәхнәлә Кешене күрһәтеү. Декорациялар ҙа, ниндәйҙер эксперименталь алымдар ҙа Кеше күнелен, унын уй-кисерештәрен асыуға ҡамасау булырға тейеш түгел.

Остазым, Мәскәүҙәге курсташтарым менән бәйләнеште киләсәктә эш менән нығытырға уйлайым. Былтыр, мәҫәлән, курсташым, Мәскәү ҡыҙы Татьяна Воронина беҙҙең театрҙа Валентин Распутиндың "Йәшә һәм онотма" романы буйынса үҙе яҙған инсценировканы сәхнәләштерҙе. Беҙ уны Өфө тамашасыларына ла тәҡдим иттек. Спектакль тамамланғас, актерҙарҙы, айырыуса төп ролдә - Настенаны башҡарыусы Ләйсән Минләғәлиеваны тамашасылар алҡыштарға күмде, бик күп йылы һүҙҙәр ишеттек. Тимәк, минең был юҫыҡтағы эшем дә хупланды. Артабан мин тағы бер курсташым - Артем Бибилюровты ла саҡырмаҡсымын. Ул - антреприза, комедия оҫтаһы.

### Милли драматургия

Милли драматургия юҡ, тип яр һалыусылар күбәйҙе. Эйе, милли драматургия ул рус драматургияһы түгел, бында бөртөкләп алтын йыйырға кәрәк. Театр янында үҫтерергә кәрәк. Мин тәүге спектаклде Флорид Бүләковтың әҫәре буйынса ҡуйғайным. Уның ҡарттар яҙмышы хаҡында тағы ике әҫәре бар ине "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?" һәм "Мәскәү-Васютки". Мин уны үҙем өсөн трилогия тип атаным һәм ҡалған икәүһен дә сәхнәләштереү теләге менән яна башланым. Мораҙыма ирештем. Спектаклдәр театр тамашасыһының да, театр тәнҡитселәренең дә һәйбәт баһаһын ала. Флорид Бүләков - минең авторым тип әйтә алам.

Этнографик пьесаға мохтажлыҡ тыуғас, мин шундуҡ белгән кешемә, ут күршем Мәрйәм Бураҡаеваға мөрәжәғәт иттем. Әлбиттә, ул бығаса пьеса яҙмаған, әммә уның "Тормош һабаҡтары" әсбаптарының бай йөкмәткеһен дә, телен дә уларым мәктәптә уҡый башлағас, яҡындан белдем, һоҡландым, прозалағы әҫәрҙәре менән дә танышмын. Ә иң мөһиме - ул Мәрйәм апайҙың рухы. Шуға ла "Үҙем яҙған яҙмыш" пьесаһының теле лә матур, йолалары ла урынлы, рухы ла аңҡып тора. Төркиәлә был спектаклде алҡыштарға күмделәр. Өфөләге гастролдәрҙе лә "Үҙем яҙған яҙмыш" спектакле менән башланыҡ.

Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт театры спектаклдәренә яҙыусыларҙы ла, драматургтарҙы ла күп саҡырҙыҡ. Әммә бик һирәге генә тамаша залында күренде. Мин айырыуса "Мәскәү-Васютки" спектаклендә әҙиптәр күп булыр, тип уйлағайным. Сөнки ул фәлсәфәүи әҫәр, драматургия яғынан бик көслө. Әммә ике-өс әҙиптән башҡа береһен дә күрмәнем. Театрҙы ҡарамайҙар икән, милли драматургия үҫтереү тураһында нисек фекер йөрөтөп була инде?

### Классика

Йәш режиссерҙарҙың эш башлау осоронда уҡ классикаға тотоноуы мине һоҡландыра ла, сәйерһендерә лә. Классика - ул бейек үр. Бәлки, кемгәлер классика бейеклегенән йығылып төшөү оҡшайҙыр. Ә мин ошо үрҙәргә, бөйөк пьесалар яҙған драматургтарҙың фекерләү кимәленә тиклем үрмәләй башланым ғына. Ошо үрҙең һәр ташы миңә таныш булһын. Классиканы сәхнәләштерергә әле минең белем кимәле лә, тәжрибә лә аҙыраҡтыр. Был, беренсенән. Икенсенән, шул уҡ Гамлетты уйнар өсөн режиссерҙың шәхесе генә аҙ. Актер ҙа ҙур шәхес булырға тейеш.

### Ғаилә һәм тәрбиә

Дуҫтарым, мине аңлаған коллегаларым, теләктәштәрем һәм ижадташтарым бар. Әммә иң яҡын кешем - ул минең менән ун һигеҙ йыл бергә ғүмер кисергән, әсеһен дә, сөсөһөн да татыған ҡатыным Фәниә. Уның кәнәштәре - ихлас, төплө, тәнҡите - аяуһыҙ. Мин уны бик ныҡ ихтирам итәм, һәм ҡасандыр, йәш булһам да, Фәниәне тормош иптәшем итеп һайлап, яңылышмағаныма ҡыуанам.

Ғөмүмән, ғаиләм тураһында һөйләргә яратмайым. Ул - минең күнел утрауым, унда береһен дә тығылдырмайым. Малайҙар, шөкөр, үҫә. Ә инде уларҙы тәрбиәләү тураһындағы һорауға ошолай яуап бирер инем. Мин тәрбиә, тәрбиәләү тигән төшөнсәне ҡабул итмәйем. Бала ғаиләлә үҫә, яҡшыһын да, яманын да һеңдерә, үҙенсә һығымта яһай. Нисек кенә уны алдыңа ултыртып алып, ошолай эшлә, былай эшлә, тип өйрәтмә, ул үҙенең эске донъяһынан сығып эш итә. Ә эске донъяһы уның тышҡы донъя, күргәнишеткәне менән бәйле. Үҙеңдән юғарыраҡ һикереп булмай - ниндәй атаймын, шулаймын инде. Белгәнемсә ғаилә бағам, белгәнемсә донъя көтәм.

### Киләсәккә пландар

Мин иртәгә ни булыр, тип, пландар ҡорорға яратмайым. Шуның менән бәхетлемен дә.

**Зөһрә БУРАҠАЕВА**
**әңгәмәләште.**

## ИНТЕРНЕТТАН



### Мөғжизәле укол

Япон ғалимдары умыртҡа бағанаһы дискылары араһындағы бүсерҙе эретеп юҡҡа сығарыусы препарат уйлап тапҡан. Был мөғжизәле сараның төп тәьҫир итеүсе матдәһе - бактериялар тарафынан етештерелеүсе энзим. Уны умыртҡа бағанаһы дискыларының йомшаҡ үҙәгенә ебәргәс, диск эсендәге хондроитик сульфат, дерматан сульфат һәм гиалуронлы кислота эреп юҡ була. Был ысул бүсерҙе алып ташлау буйынса операция яһау менән бер.

Японияла ошо препаратты ҡабул иткән йөҙҙән ашыу пациент ҡатнашлығында һынап ҡарау тәжрибәһе үткәрелде лә инде. Һөҙөмтәләр ҡыуаныслы: яңы инъекция, эргә-тирәһендәге сәләмәт туҡымаларҙы зарарламайынса ғына бүсерҙе эретеп, юҡҡа сығарҙы.

### Телефонда ғәйеп юҡ

Кесә телефондарынан радионурланыу баш мейеһе яман шеше үсешен тиҙләтеүгә сәбәп булып тормай - Бөйөк Британияның Манчестер университеты ғалимдары ошондай һығымтаға килде. Табиптар Англияла һуңғы тиҫтә йыл эсендә мейе яман шеше диагнозы осраҡтарын ҡарап, тикшереп сыҡҡандан һуң был сир менән кесә телефонын файҙаланыу йышлығы араһында иғтибарҙы йәлеп итерҙәй бәйләнеш тапманы.

### Тор ҙа бер аҙ йөрө

Оҙаҡ ултырып эшләүсе кешеләргә организмын яҡшы кимәлдә тотоу өсөн ни бары урынынан мөмкин тиклем йышыраҡ тороп йөрөргә кәрәк, ти Австралия ғалимдары күптән түгел үткәрелгән тикшеренеүҙәргә нигеҙләнеп. Һәм был осраҡта мотлаҡ физик күнекмәләр эшләү ҙә кәрәк түгел. Бер-ике аҙым эшләргә йәки бер урында минутҡа яҡын баҫып торһаң да ярай.

"Беҙ көнөнә 2-нән алып 22 сәғәткә тиклем ултырып эшләргә мәжбүр кешеләрҙең тәртибен анализланыҡ. Уларҙың ултырғыстан күтәрелеүе һаны 99-ҙан алып 1258 тапҡырға етте", - тип һөйләй тикшеренеүселәр. - Эш урындарынан йышыраҡ күтәрелгән кешеләрҙең һаулыҡ күрһәткестәре бик яҡшы ине. Уларҙың күпселеген һимеҙлек мәсьәләһе борсомай, ә ҡандарындағы "насар" холестерин нормаға яҡын".

### Йоҡоһоҙлоҡ - ярһыулыҡ

Хроник йоҡоһоҙлоҡ кешенең эмоциональ хәлендә асыҡ сағыла, ти Калифорния университеты ғалимдары.

"Организмды йоҡонан мәхрүм итеү мейе эшмәкәрлегенең сикләнгәнлегенә алып килә", - ти тикшеренеүселәр. Йоҡоһоҙлоҡ хәлендә "һоро матдә"гә мәғлүмәт ағымын эшкәртеү өсөн ваҡыт етмәй, шунлыҡтан кеше үҙен ярһыу хәлдә тота. Магнит-резонанс томография ярҙамында неврологтар һуңғы 36 сәғәт буйына йоҡоһоҙлоҡтан интеккән кешеләрҙең һәм яҡшы йоҡлаған контроль төркөмдөң баш мейеһендә ҡан йөрөшөн тикшереп ҡарай. Һөҙөмтәлә икенсе төркөмдәге менән сағыштырғанда тәүге төркөмдәгеләрҙең мейеһендәге хис-тойғо өсөн яуаплы участкала ҡан йөрөшө тиҙлеге 60 процентҡа көслөрәк булып сыға. Йоҡоһоҙлоҡтоң мейелә эмоциональ үҙәктәргә тәьҫир көсө шул тиклем юғары булыр тип уйламағайныҡ, ти ғалимдар.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.

## МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# АЛДАҠСЫНАН...

## фәрештәләре лә ҡаса

**Алдашыу нимә ул? Был йыш ҡына аңлы рәүештә аралашҡан, телмәр тотҡан ваҡытта сағылып ҡалған ысынбарлыҡты үҙгәртеп күрһәтеү. "Уларҙың күңелендә сир (ике йөҙлөлөк сире) бар. Аллаһ уларҙың был сирен тағын да арттырҙы. Ялған һөйләгәндәре өсөн уларға хәтәр ғазап барҙыр", - тиелә Ҡөрьән-Кәримдә (Баҡара,10).**

Алдашыу кешенең күңелен боҙоусы рухи ауырыу. Кеше йыш ҡына ниндәй ҙә булһа ярамаған хәлен, йә ысынбарлыҡта нисек бар, шулай күренмәҫ өсөн, йәки ниндәйҙер файҙа алыр, теләгәнә тиҙерәк ирешер өсөн алдауға бара. Уның сәбәптәре күп төрлө булыуы ихтимал. Алдашыуҙа күпме насарлыҡ һәм ҡурҡыныс булыуға ҡарамаҫтан, кешеләр барыбер, көйә күбәләге ҡанаттарын яндырыуына ҡарамаҫтан, утҡа ынтылған кеүек, үҙҙәренең тормошонда алдауға юл ҡуя. Алдауҙың Ҡиәмәт көнөндә үҙенә ҡаршы шаһитлыҡ итеүен белеү уға был ҡурҡыныс ауырыуҙан ҡотолорға ярҙам итеүе мөмкин. Алдау юлы менән ниндәйҙер унайһыҙ хәлдән ҡотолған һымаҡ тоя үҙен кеше, әммә был Әхирәттә ҙур яфаларҙың һәм тәрән үкенеүҙәрҙең сәбәбе булыр.

Кешенең һәр һүҙе яҙылып бара. Ҡөрьәндә әйтелә: "Әҙәмдәрҙең уң яғында (сауаптарын) һәм һул яғында (гонаһтарын) ғәмәлдәрен яҙып барыусы фәрештәләр бар. Кешенең ауыҙынан сыҡҡан бер генә һүҙ ҙә күҙәтеүсе тарафынан яҙылмайынса ҡалмай" ("Әл-Ҡаф", 17-18). Шуға күрә үҙенең ҡолдарына мәрхәмәтле Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә иҫкәртә: "Белмәгән нәмәгә эйәрмә. Ҡолағың, күҙең һәм күңелең (һин ҡылғандарға шаһит булып) һине яуапҡа тартыр" ("Әл-Исра", 36). Аллаһы Тәғәләнең был күрһәтмәһе буйынса, мөьминдәр һөйләшкән саҡта иғтибарлы булырға, үҙҙәренә мәғлүм булмағанды раҫлап һөйләмәҫкә, кемгә булһа ла үҙҙәренең мөнәсәбәтен белдергән ваҡытта һаҡ булырға тейеш. Был һорау буйынса Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи сәләм) бер хәҙисендә әйтелә: "Нимә ишеткән, шуның бөтәһен дә яңынан һөйләгән кешегә быны алдау тип һанау ҙа етә". Алдаған кеше башҡа берәүгә түгел, ә иң беренсе үҙенә зыян килтерә. Ҡөрьәндә әйтелә: "Әгәр ҙә ул ялғанлай икән, ялғаны үҙ башына булһын" ("Әл-Мөьмин", 28). Иң беренсе алдау, кеше йөрәген ҡарайтып, уның хаҡ юлына кәртә булып тора. Был һорау буйынса Аллаһтың Бәйғәмбәре: "Алдауҙы дауам иткән ҡол йөрәгендә ҡара нөктә барлыҡҡа килә. Һуңынан был нөктә ҙурая һәм йөрәк тулыһынса ҡара нөктәләр менән ҡаплана. Ундай кеше Аллаһ ҡаршыһында "алдаҡсылар" тип йөрөтөлгәндәр араһында булыр". Аллаһы Тәғәлә йөрәген ҡара нөктәләр менән бысратҡан кешене тура юлға сығармай. Ҡөрьәндең аяты шулай ти: "Шик юҡ, Аллаһ ялғансы һәм инҡарсыларҙы тура юлға баҫтырмаҫ" ("Әз-Зүмәр", 3).

Алдашыу кешене Бәйғәмбәрҙән (саллаллаһу ғәләйһи сәләм) айыра. Ғәйшә былай тип һөйләгән: "Бәйғәмбәрҙе ялған ерәндерә ине. Әгәр ҙә уның алдында берәйһе ялғанды һөйләһә, ул уның тәүбә иткәнен белгәнсегә тиклем унан айырылған (уның менән осрашырға, аралашырға теләмәгән)".

Дөрөҫтө һөйләмәгән кешенән фәрештәләр ҙә айырыла. Бәйғәмбәр әйткән: "Ҡол алдаған ваҡытта сыҡҡан насар еҫтән фәрештәләр ҡаса".

Иман менән алдауҙың бергә булыуы мөмкин түгел. Сафуан бин Сөләймән еткергән: "Бер ваҡыт Бәйғәмбәрҙән (саллаллаһу ғәләйһи сәләм) һоранылар: "Мөьмин ҡурҡаҡ була аламы?" "Эйе, булыуы мөмкин". Һуңынан тағы һорау бирелгән: "Мөьмин һаран була аламы?" Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи сәләм) тағы ла: "Эйе, булыуы мөмкин", тип яуап биргән. Унан тағы ла: "Ә мөьмин алдаҡсы була аламы?" тип һорағандар. Был юлы Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи сәләм): "Юҡ, был хәлдең булыуы мөмкин түгел", тип яуап биргән.

Мосолманда иң ярамһыҙ сифаттар: ҡурҡаҡлыҡ менән һаранлыҡ булыуы мөмкин, ә ялған ҡәтғи тыйыла. Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи сәләм) ялғандың кеше өсөн ни тиклем зарарлы һәм унан һаҡланырға кәрәк икәнен күрһәтергә теләп, шундай сағыштырыу килтергән. Хаҡ мосолманда үрҙә килтерелгән сифаттарҙың береһе лә булырға тейеш түгел. Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи сәләм) әйткән: "Һеҙ мине бер ваҡытта ла һаран, ялған һөйләүсе һәм ҡурҡаҡ итеп күрмәҫһегеҙ. Ғүмәр (радиаллаху анх) әйткән: "Мөьминдең ялған һөйләгәнен күрмәҫһегеҙ", йәғни мөьмингә ялған һөйләү хас түгел. Ялған мөьминде бында ла, ожмахта ла күркәмләмәй. Ҡөрьәндә әйтелә: "Унда буш һүҙ һөйләнмәҫ, ялған-ғәйбәт булмаҫ" ("Нәбә",35).

Ҡөрьән ялғанды иманһыҙҙар сифаты ти: "Бары тик кәферҙәр генә Аллаһтың аяттарын ялғанға сығара. Бына шулар инде ысын алдаҡсылар" ("Нәхел",105) Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи сәләм) алдау ике йөҙлөләргә хас икәнен күрһәтә: "Ике йөҙлөләр өс үҙенсәлеккә эйә: һөйләгән ваҡытта алдайҙар, биргән һүҙҙәренән еңел баш тарталар һәм вәғәҙәләрен үтәмәйҙәр, аманатҡа хыянат итәләр".

Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи сәләм) сәхәбәләре үҙҙәренең дөрөҫлөгө менән айырылып торған. Бер ниндәй ауыр хәлдәр ҙә уларҙы дөрөҫлөктән сығара алмаған. Әнәс хәҙистәр тураһында әйткәндә былай тип билдәләп үткән: "Валлаһи, беҙ һөйләгәндең барыһын да Бәйғәмбәрҙән (саллаллаһу ғәләйһи сәләм) үҙенән ишетмәнек (беҙ хәҙистәрҙе бер-беребеҙгә өйрәттек), әммә беҙ бер-беребеҙгә бер ҡасанда дөрөҫ булмағанды һөйләмәнек". Кааб бин Мәлик (радиаллаху анх) Табук һуғышында ҡатнашмай Бәйғәмбәрҙе һәм Аллаһты асыуландырған мосолмандарҙың береһе булған. Кааб бин Мәлик үҙенең ғәйебен таныған һәм дөрөҫөн һөйләп биргән. Бының турала ул үҙе былай тип һөйләгән: "Аллаһы Тәғәлә менән ант итәм, Ислам ҡабул иткәндән һуң Ул миңә биргән иң бөйөк ниғмәт - тик дөрөҫтө генә һөйләү, йәғни шулай итеп ул мине ялған һөйләүселәр һәләкәтенән ҡотҡарҙы. Дөрөҫлөк кешенең әхлағын дәрәжәлек һәм абруй менән биҙәй. Лоҡман Хакимдән, уның күркәм сифаттарын күҙ алдында тотоп: "Һеҙ нисек юғары аң кимәленә ирештегеҙ?" тип һорауға, ул: "Дөрөҫлөк, ғәҙеллек, ышаныс яулап һәм миңә ҡағылмаған эш менән шөғөлләнмәйенсә", тип яуап биргән.

Әбү Умама (радиаллаху анх) еткергән: "Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи сәләм) былай тигән: "Мин дөрөҫ булған хәлдә лә бәхәсте туҡтатҡан кешегә ожмах ситендә һарай булырына яуаплылыҡты үҙ өҫтөмә алам. Мин хатта шаяртып та ялған һүҙ ыҫҡындырмаған кешегә ожмах уртаһында һарай булырына яуаплылыҡты үҙ өҫтөмә ала алам. Үҙенең әхлағын матурлаған һәм нығытҡан кешегә мин ожмахтың иң өҫкө ҡатында һарай булырын үҙ яуаплылығыма алам".

Был хәҙис аҡыллы мосолманда ошо өс матур сифат булырға тейешлеген күрһәтә. Ни өсөн тигәндә, был өс сифатты яулауы ауыр, Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи сәләм) был өс сифатты яулаған кешене бөйөк бүләк көтәсәген әйтә. Беренсенән, мөьмин дөрөҫ булһа ла кәрәкмәгән бәхәскә ҡыҫылырға тейеш түгел. Кешегә, бигерәк тә еңеп сыҡһа, бәхәстән ҡәнәғәтлек алыу хас. Кем бәхәскә инмәй, үҙенең телләктәрен еңә ала, уға - ожмах ситенән һарай. Икенсенән, мосолман хатта шаяртып ҡына ла ялған һөйләргә тейеш түгел. Кеше шаярырға, башҡаларҙы көлдөрөргә ярата. Һәм шулай ул йыш ҡына алдаша. Ҡарап тороуға бәләкәй генә мәрәкәнең ҙур ғәҙәтҡә әйләнеүе ихтимал.

Шулай итеп, аңлы рәүештә ялғандан баш тартыу кешегә ҙур бүләк әҙерләй - ожмах уртаһында һарай. Кешенең рухи үҫеш, әхлаҡ, насар сифаттарҙан арыныу юлында хәрәкәте ҙур көс һәм көрәш талап итә. Быға өлгәшеүселәр бәхетле - уларға ожмахтың иң түрендә һарай.

### Ҡатын-ҡыҙ бурысы

Һине яратһындар өсөн үҙеңә лә яратырға, хөрмәт итһендәр өсөн үҙеңә лә хөрмәт итергә кәрәк. Алмашҡа яҡшы мөнәсәбәт һәм ихтирам алыр өсөн үҙеңде ҡорбан итергә лә өйрәнергә тура килә. Шик юҡ, аҡыллы ҡатын иренең һөйөүен үҙе яулаясаҡ һәм ғаилә бәхетен үҙе төҙәйәсәк. Тағы ла бер хәҙистә әйтелә: "Әгәр ниндәй ҙә булһа ҡатын үлеп ҡалһа, һәм ире унан риза булһа, ул Ожмахҡа инәсәк". Был хәҙистә ирҙең ғаиләләге урыны һәм ҡатын-ҡыҙҙың әхлағы хаҡында ла, шулай уҡ тоғро ҡатынды ниндәй бүләк көтәсәге тураһында ла әйтелә.

Тәҡүәле ҡатын иренә мөхәббәттән тыш, уның туғандарына һәм дуҫтарына ла оҡшарға тырышырға тейеш. Был уның тормош юлдашын ҡыуандырасаҡ. Шулай ҙа бер шарт бар: былар бөтәһе лә Шәриғәт рөхсәт иткән шарттарҙан ситкә сығырға тейеш түгел. Бер үҙе ҡалған саҡта, үҙенең намыҫына тап



## 2 МАЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Дама с попугаем"
06.00 Новости
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым"
10.30 "Пока все дома"
11.20 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 Чемпионат мира по фигурному катанию
14.00 "Одиночное плавание". Военная драма
15.50 "Золотой граммофон"
18.50 "Водитель для Веры". Мелодрама
21.00 "Воскресное "Время"
21.15 "Неудержимые". Боевик
23.10 "Изумительный". Мелодрама
01.10 "Граница". Боевик
03.10 "Убийство в клубе "Чиппэндейлс"

### РОССИЯ 1

05.50 "Капля света". Мелодрама
09.20 "Белка и стрелка. Звездные собаки". Полнометражный мультфильм
11.05 "Диско Дача". Весенний концерт
13.15 "Танцы со звездами"
14.00 "Вести"
14.15 "Танцы со звездами"
17.20 "Шутки в сторону"
19.15 "Варенька. И в горе. И в радости". Мелодрама
20.00 "Вести"
20.20 "Варенька. И в горе. И в радости". Мелодрама. Продолжение
23.15 "Девочка". Драма
02.05 "Доктор Голливуд"
04.00 "Комната смеха"

### НТВ

05.20 "Фортуна". Лирическая комедия
07.05 "Президент и его внучка". Лирическая комедия
09.00 "Медвежий угол", 19-я серия
10.00 "Сегодня"
10.20 "Медвежий угол", 20-28-я серии
19.00 "Сегодня"
19.25 "Медвежий угол", 29-32-я, закл. серии
23.20 "Суперстар представляет: Волшебный бал Сергея Пенкина"
01.15 "Ты не поверишь! Спецвыпуск"
01.45 "Футбольная ночь"
02.15 "Первый снег". Триллер
04.20 "Особо опасен!"

### БСТ

**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Шомбай". Спектакль**
**09.00 "Мэри Поппинс, до свиданья". Фильм для детей**
**11.30 "Мелодии гор и степей". Ансамбль "Кош юлы"**
**12.00 "Автограф". Р. Султангареева**
**13.00 "Ленинград. Росси, 2". Док. фильм**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 Фильм-концерт. Фануна Сиражетдинова**
**16.45 КВН**
**19.00 Играет М. Зайнетдинов**
**19.30 "Шэхес". Ф. Хисаметдинова**
**20.00 Детский концерт "Радуга дружбы"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 Концерт "Сияние звезд". К 100-летию Ф. Гаскарова**
**23.30 "Мы из джаза"**

## 3 МАЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Баллада о Бомбере", 5-я серия
22.30 "Однажды в Мексике". Приключения
00.25 Хоккей. Чемпионат мира. Сборная России - сборная Словакии. Прямой эфир из Словакии
02.40, 03.05 "Тихий омут"
03.00 Новости
04.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Заговоренный. Три войны казака Недорубова"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 46-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 73-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 147-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Заяц, жаренный по-Берлински", 1-я и 2-я и 3-я серии
23.45 "Дежурный по стране"
00.45 "Вести+"
01.05 "Профилактика"
02.00 "Травля"
04.10 "Городок"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чистосердечное признание"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.45 "Тульский-Токарев", 1-3-я серии
22.40 "Петля". Детектив
00.30 Футбол. Лига чемпионов УЕФА. Полуфинал. "Барселона" (Испания) - "Реал" (Испания). Прямая трансляция
02.45 "Суд присяжных"
03.45 "Прокурорская проверка"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Верные сцене". Актеры БГАДТ им. М. Гафури**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Царь горы"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 Поет Нурия Абдуллина**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Янсык"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30, 00.45 Новости (на башк. яз.)**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.30 "Надо знать!"**

## 4 МАЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Баллада о Бомбере", 6-я серия. Военная драма
22.30 "Идеальный побег". Триллер
00.20 "Август". Драма
02.00, 03.05 "Недобрый час"
03.00 Новости
04.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршалы Победы: Жуков и Рокоссовский"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 47-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 74-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 148-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Заяц, жаренный по-Берлински", 4-я, 5-я и 6-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Адъютант его превосходительства. Личное дело". Док. фильм
01.00 "Профилактика"
02.15 "Честный детектив"
02.45 "Три дня в Москве"
04.05 "Закон и порядок"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Тульски-Токарев", 4-7-я серии
23.00 "Настоящий итальянец"
23.50 "Квартирный вопрос"
00.55 "Кулинарные поединок"
01.55 "Детектив Раш"
02.55 "Суд присяжных"
03.55 "До суда"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Янсык"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Мастерская на колесах"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Байык-2011"**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "На страже закона"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Историческая среда"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Специальный репортаж"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Замандаштар"**
**23.15 "Орнамент"**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 5 МАЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Баллада о Бомбере", 7-я серия
22.30 "Годзилла". Боевик
01.00, 03.05 "Буч Кэссиди и Санденс Кид"
03.00 Новости
03.15 "Вспомни, что будет"
04.00 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Жизнь в ритме марша. Сага о Покрассах"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 48-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 75-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 149-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Заяц, жаренный по-Берлински", 7-я, 8-я и 9-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Операция "Большой вальс"
01.00 "Профилактика"
02.15 "Три дня в Москве"
03.30 "Закон и порядок"
04.25 "Городок"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.40 "Тульский-Токарев", 8-10-я серии
22.25 "Фокусник-2". Детектив
00.20 "Лига Европы УЕФА. Обзор"
00.50 Футбол. Лига чемпионов УЕФА. Полуфинал. "Вильяреал" (Испания) - "Порту" (Португалия)
03.30 "Дачный ответ"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Башкорттар"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Цирк в 13 метров"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Любовь моя - мелодия души". А. Игебаев**
**16.45 Концерт. Волшебная скрипка Ильшата Муслимова**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Замандаштар"**
**19.15 "Пора разобраться"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.30 "Петербургские тайны"**

## 6 МАЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Баллада о Бомбере", 8-я серия
22.30 "Одна война. Мелодрама
00.10 "Подъем с глубины". Боевик
02.05 "Женатый"
03.50 "Вспомни, что будет"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Мой серебряный шар"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 49-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 76-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 150-я и 151-я серии
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Фактор А". Музыкальный конкурс
22.30 "Юбилейный вечер Юрия Гальцева"
00.10 "Обец". Драма
01.50 "Горячая десятка"
03.00 "Вакансия на жертву"
04.40 "Городок"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Необыновенный концерт"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Тульский-Токарев", 11-я и 12-я серии. Сериал
21.25 "Дело чести". Криминальный серал
23.20 "Ограбление на Бейкер-Стрит". Триллер
01.30 "Елена Троянская". Приключения
04.45 "Суд присяжных"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Книга сказок"**
**11.30 "Приключения мастера Кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и др.**
**16.15 Концерт. Памяти Ляли Муллабаевой**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.55 Первенство России по футболу. Второй дивизион зоны "Урал-Поволжье". "Уфа" (Уфа) - "Волга" (Ульяновск). Прямая трансляция**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 "Замандаштар"**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 7 МАЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

04.50, 06.10 "Голубая стрел
06.00 Новости
06.30 "Судьба"
09.40 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.50 "Вкус жизни"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.10 "Собачья работа 2". Комедия
14.50 "Егерь". Боевик
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
18.00 "Общая терапия", 13-я и 14-я серии
20.00 "Фабрика звезд. Возвращение". Музыкальное шоу
21.00 "Время"
21.15 "Фабрика звезд. Возвращение". Продолжение
22.30 "Прожекторперисхилтон"
23.10 "Пианист". Военная драма
01.50 "Леопард"
04.55 "Вспомни, что будет"

### РОССИЯ 1

05.10 "Привет с фронта"
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок"
10.05 "Дела и люди"
10.25 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Большая семья. Винокуры"
11.50 "Честный детектив"
13.10 "Вторые"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Вторые". Продолжение
16.10 "Субботний вечер"
18.05 "Шоу "10 миллионов" с Максимом Галкиным"
19.05 "Военная разведка. Западный фронт". Военная драма
20.00 "Вести"
20.20 "Военная разведка. Западный фронт". Продолжение
23.25 "Тарас Бульба". Историческая драма
02.05 "Батальоны просят огня"

### НТВ

05.35 "Холм одного дерева". Сериал
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Главная дорога"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Кулинарный поединок"
11.15 "Квартирный вопрос"
12.20 "Своя игра"
13.10 "Катя", 1-6-я серии
19.00 "Сегодня"
19.25 "Мы объявляем вам войну". Боевик
23.20 "Особо опасен". Боевик
01.25 "Любовь вне правил". Мелодрама
03.40 "Суд присяжных"
04.45 "До суда"

### БСТ

**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 Концерт симфонической музыки**
**09.00 "Израненная судьба". Спектакль**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Весы"**
**13.30 "Йома"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Литературный альманах"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Музыкальная шкатулка". Лилия Биктимирова**
**19.45 "Весело живем"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Они видели Победу". Мидхат Музафаров**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Байык-2011"**
**23.00 "Журавушка"**
**00.30 "Свидание с джазом"**

## 8 МАЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Ожидание полковника Шалыгина"
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Военно-полевой роман"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.30 "Пока все дома"
11.20 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Илья Муромец и соловей-разбойник". Полнометражный мультипликационный фильм
13.40 "Люся"
15.10 "Двадцать дней без войны". Военная драма
17.10 "Песни Весны и Победы"
18.40 "Заградотряд". 1-3-я серии. Военная драма
21.00 "Время"
21.15 "Заградотряд", 4-я серия
22.00 "Ночь длиною в жизнь". Военная драма
23.50 "Живые и мертвые". Военная драма
03.20 "Весна на Одере"

### РОССИЯ 1

04.55 "Возврата нет". Мелодрама
06.45 "Сам себе режиссер"
07.35 "Смехопанорама"
08.05 "Утренняя почта"
08.45 "Сто к одному"
09.25 "Города и Веси"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Вторые". Военная драма
13.00 "Северный ветер". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Вторые". Продолжение
16.15 "Шутки в сторону"
18.15 "Военная разведка. Западный фронт". Военная драма
20.00 "Вести"
20.20 "Военная разведка. Западный фронт". Военная драма. Продолжение
23.00 "Добрый вечер с Максимом"
00.25 "Фартовый". Социальная драма
02.25 "Батальоны просят огня"
05.20 "Городок"

### НТВ

05.30 "Холм одного дерева". Сериал
07.20 Мультфильмы
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Пир на весь мир"
11.15 "Дачный ответ"
12.20 "Своя игра"
13.20 "Катя", 7-12-я серии
19.00 "Сегодня"
19.25 "Катя. Продолжение", 1-4-я серии
23.10 "Тридцатого" - "уничтожить!" Боевик
01.45 "Главная дорога"
02.20 "Юлий Цезарь". Историческая драма
04.50 "Суд присяжных"
05.40 "Особо опасен!"

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Музыка на канале"**
**07.45 "Женщины 41-го". Спектакль**
**10.00 "Тамыр" представляет..."**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Весы"**
**13.30 "Дорога к храму"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Башкирия встречает Победу!" Док. фильм**
**16.30 "Они видели Победу"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 Песни Розы Сахаутдиновой**
**17.45 Конная Гвардия. 112-й Башкавдивизия**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 Праздничный концерт**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Забытые войны"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Башкорттар"**
**22.30 "Война нас не считала за детей". Док. фильм**
**23.30 "Новое поколение представляет..." Концерт**

*ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН*

# ҺАНДАР ИДАРА ИТМӘЙ,

## нисек идара итергә икәнде күрһәтә

(Башы 3-сө биттә).

**ssmith30**

Петр Аркадьевич Столыпин заманында великоросстар һаны 150 миллион була. Беренсе-Икенсе донъя һуғыштарынан һуң 100 миллион булып ҡала. Ә Петр Аркадьевич нимә тигән? Әгәр империя минең реформаларымды ҡабул итһә, ул үҙ-үҙен ҡарай, йәғни дүрт ярым быуат автоном йәшәй аласаҡ һәм 20 йыл һайын халҡы ике тапҡырға артасаҡ, тигән.

Күптәр быны абсурд, ти. Минеңсә, улай түгел. 1910 йылда великоросстар 150 миллион була, ә ҡытайҙар - 100. Һандарға күҙ һалһаҡ: 30-сы йыл - беҙ 300 миллион, ҡытайҙар - 200 булырға тейеш. 50-се йыл: беҙ 600 миллион, улар 400 булырға тейеш. 70-се йыл: беҙ - 1 миллиард 200 миллион, улар 800 миллион булырға тейеш. 90-сы йыл: беҙ 2500000, улар 1 миллиард 600 миллион булырға тейеш. Улар Ҡытайҙа ғына 1 миллиард 300 миллион, сит илдәрҙә 400 миллион. Ни өсөндөр ҡытайҙар Столыпин планына ингән, ә беҙ һаман "рус тәреһе"н үтә алмайбыҙ - үлем тыуымдан күберәк.

**agapff**

Рәсәйҙәге кеүек халыҡ иҫәбен алыу - аҡса туҙҙырыу йәки уны кемдеңдер кесәһенә һалыу ғына ул. Нимә, беҙ мәғлүмәтте паспорт өҫтәлдәренән ала алмайбыҙмы? Әгәр кеше теркәлгән урыны буйынса йәшәмәй икән, ул, гәҙәттә, иҫәп алыуҙа ҡатнашмаясаҡ. Теләһәң - иҫәпләп, теләмәһәң - юҡ. Былай юл менән объектив мәғлүмәт алыу мөмкин түгел. Иҫәп алыу процедураһын мәғлүмәт йыйыу күҙлегенән ҡарағанда күп төрлө итергә кәрәк. Мәҫәлән, Интернет аша. Шунан уны мотлаҡ тиергә һәм иҫәп үтмәүселәргә, күп илдәрҙәге кеүек, ҙур күләмдә штраф билдәләргә. Хәйер... беҙҙә төп иғтибар "откат"ҡа әүереләсәк тап шул штрафтарға бүленәсәк. Ә инде нисек иҫәпләнеү - халыҡ ихтыярында ҡаласаҡ...

**tulip2110**

Барыһы ла "үлеп бөтөп барабыҙ", "тыуымды стимуллаштырығыҙ" ти, әммә берәү ҙә үлемдә, бигерәк тә эшкә һәләтле ир-аттың үлемен кәметергә теләмәй. Онищенко йә киҙеү вирусы, йә Америка "бот"тарындағы бактериялар менән көрәшә. Әйтерһең дә Рәсәйҙә үлемдең төп сәбәбе - йоғошло ауырыуҙар. Ә беҙҙә халыҡ йөрәк-ҡан тамырҙары, онкология ауырыуҙарынан һәм сәбәбе саманан тыш психоэмоциональ көсөргәнеш булған тышҡы сәбәптәрҙән (йәрәхәттәр, үҙ-үҙеңә ҡул һалыуҙар, ағыуланыуҙар) ятҡы донъя менән хушлаша. Ни өсөн ул йәмғиәттәге стресс кимәлен тикшермәй һәм уны кәметеү буйынса сара күрмәй? Ҡасан беҙҙең илдә "йәшәү өсөн имен булған мөхит" булдырырҙар?

Тағы шул - берәйһе Башҡортостанда күпме кеше комфортлы йәшәй алыуын анализлағанмы? Ҡалала һәм ауылда күпме кеше йәшәргә тейеш? Тәбиғи ресурстар күпмеһенә етер? Ереҙеҙ күпме кешене туйындыра ала? Сәнәғәт, ауыл хужалығы производствоһы, коммуналь хеҙмәттәр ҡулланыуы артҡанда һыу етерме? Бәлки, БР өсөн 4 миллион кеше артығы менән етерлектер?

**pawel1**

Рәсми статистика буйынса Рәсәйҙә яҡынса 140 миллион кеше йәшәй. Ә халыҡ иҫәбен алыу ведомствоһында эшләүселәр беҙҙе яҡынса 79 миллион тип белдерә. Әгәр уйланмаһаҡ, Рәсәй артабан үләсәк... Бөгөн ғаилә, дин, ватансылыҡ, намыҫ тураһында уйланырға ваҡыт. Халыҡҡа лайыҡлы эш хаҡы, эшләп фатир алыу, намыҫлы эшләү һәм балалар тәрбиәләү мөмкинлеге бирегеҙ. Алтын тауҙары түгел, әммә беҙҙең халыҡ хоҡуҡлы булған нәмәләрҙе биреге̌з. Халыҡ бит аҡыллы, түҙемле, эшсән һәм һәләтле, бөйөк. Властарға халыҡ тураһында уйларға ваҡыт.

**leonidnekrasov**

Ҡыҙыҡ. Ҡытайҙа 20 йыл элек тыуымды арттырмау буйынса программа ҡабул итәләр, әммә ошо осор эсендә уларҙың һаны 300 миллионға арта. Беҙҙә тыуымды арттырыу программаһы ҡабул ителде, ә халыҡ һаны кәмей. Был нимә? Бер ниндәй ҙә саралар менән туҡтатып булмаған тәбиғи үлем сәбәптәреме, әллә беҙҙең социаль һәм иҡтисади өлкәләрҙә хәлдәр шул тиклем насармы?

**Шулай итеп...**

**Ныҡлап уйлаһаң, һәр ата-әсә баланы үҙе өсөн, тоҡомон, затын дауам итеүҙе, үҙенең ҡартлығын хәстәрләп таба. Күптәрҙән: "Мин баланы дәүләт өсөн тапманым", - тигән һүҙҙәр ишетергә тура килә. Әммә был балалар йәмғиәткә лә бик кәрәк, йәмғиәт уларҙан файҙа алырға тейеш. Ләкин ул үҙенең киләсәгенең яҙмышын ҡайһы яҡҡа бороп ебәрә бит әле. Сөнки йылдар һуҙымында яйға һалынған конвейер - алкомафия конвейры (был хаҡта Г. Ждановтың фекерҙәрен ҡабат уҡып сығырға тәҡдим итәбеҙ) атаәсәләрҙең генә түгел, йәмғиәттең өмөттәрен селпәрәмә килтереп, балаларҙы ваҡытынан алда ҡәбергә этәрә. Сәбәптәрҙең иң мөһиме шул түгелме икән?**

Шәрифә САЛАУАТОВА.

*ЙӘШЕЛ ДАУА*



### Башлы билсән

**Күп кенә ҡый үләндәре кеүек үк, билсән дә дауалау үҙенсәлектәренә эйә. Халыҡ медицинаһында билсәндең тәнәтмәһен һәм һарҡындыһын төрлө нервы ауырыуҙарынан, эпилепсиянан, бауыр һәм бөйән эсәге ауырыуҙарынан ҡулланалар. Билсән үләне тәнәтмәһенән сылаҡҡыстарҙы яралар̌ҙы бөтәштерер өсөн ҡулланалар.**

**Эпилепсия.** 1 ҡалаҡ үләнде 1 стакан һыуға һалып, 5 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-2 ҡалаҡ ҡабул итергә. Ошо уҡ төнәтмә нервы ауырыуҙарынан һәм боғаҡтан, бауыр ауырыуҙарынан, ануриянан (һейҙек ҡыуығына бөйәрҙәрҙән һейҙек килмәүе) файҙалы.

**Яралар, сиҡан, тиреләге тимгелдәр.** 3 ҡалаҡ үләнгә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға. Сылаҡҡыс рәүешендә оҙайлы ваҡыт ҡулланырға мөмкин. Ҡан киткән осраҡта көнөнә 2-3 тапҡыр 2 ҡалаҡ ҡабул итергә. Ошо уҡ төнәтмәнән конъюнктивит булған саҡта күҙгә сылаҡҡыс эшләп һалырға мөмкин.

*ИҒЛАН*

Миловка ауылында баҡса һатыла: брустан һалынған 6х9 ике ҡатлы йорт, 10 сутый ер, мунсаһы бар, ағастар ултыртылған. Хаҡы 1900 000 һум. **8-919-159-01-71, 8-917-353-19-30**

*КӨН ҠАҘАҒЫ*

# ДЕМОКРАТИЯ ЮЛЫМЫ БЫЛ...

## әллә күрсөккә илтеүсе тыҡырыҡмы?

**Ливиялағы оҙаҡҡа һуҙылмаясаҡ тип иғлан ителеп башланған хәрби операция һаман да интенсив рәүештә дауам итә. Оппозиция ла, Каддафи ҙа үҙ позицияһын бирергә йыйынмай. Коалиция полковникты ракета һөжүме ярҙамында тиҙ генә "өңөнән" сығарып тар-мар итергә иҫәп тотҡайны ла, әле булһа килеп сыҡмай. Коалицияның үҙенең дә ниәттәре бойомға ашыуына көндән-көн ышанысы кәмей, буғай. Шулай булмаһа, Ливияға ғәскәр индереү хаҡында хәбәрҙәр элегерәк шыбырлау ғына булып ишетелһә, бөгөн ауыҙ тултырып һөйләүгә күсмәҫ ине, моғайын.**

Ливия ҡәбиләләр иле һәм революция илдәге варфалла, зауийа, магархи, каддафа һәм ғәрәп, бербер һәм туарег ҡәбиләләрен ике лагерға бүлде. Ливияның хәрби һауа көстәренең күп өлөшөн Каддафиға тоғро каддафа ҡәбиләһе тәшкил итә. Ә илдәге көслө варфалла ҡәбиләһе тәүҙә баш күтәреүселәр яғында булһа, аҙаҡ полковник ғәскәрҙәре рәтенә сығыуы билдәле. Бөгөн Каддафи яҡлы булып бер-нисә генә ҡәбилә сығыш яһаһа ла, улар башҡаларға ҡарағанда власть структураһында һәм хәрби эштә күпкә хәбәрҙар. Шулай уҡ полковник ғәскәрҙәренең ҡоралдары ла, заманса техникаһы ла етерлек кимәлдә. Бөгөн килеп Каддафиға дошманға әүерелгән элекке "дуҫтар" киң мәғлүмәт сараларында Каддафиҙың хәрби ҡоралы юҡ кимәлендә, тип ышандырырға тырышһа ла, был хәбәрҙең ысынбарлыҡҡа тап килеп етмәүен үҙҙәре лә яҡшы аңлай, сөнки Көнбайыш ғәрәп илдәренә ошоға тиклем күпләп һуғыш ҡоралы һәм хәрби техника һатты. Мәҫәлән, Бөйөк Британия ғына Каддафиға 142 миллион долларҙан ашыу һумға, ә Италия 110 миллион евро һумлыҡ ҡорал һәм хәрби техника һатҡан. Шулай уҡ полковник заманса танкыға ҡаршы тороу ҡорамалы, төрлө бәйләнеш элемтәләре, яланда ҡуллана торған радар техникаһы, электрон тапшырыуҙарға ҡамасаулаусы техниканы ла күпләп үҙ ҡулында туплаған. Тағы ла полковниктың ҡулы аҫтында химик ҡорал да булыуын фаразлайҙар һәм, әгәр ҙә ул был ҡоралын ҡуллана ҡалһа, Ливиялағы хәл бары тик Ливия һәм коалиция араһындағы сиктә үтеп, донъя кимәленә сығырына шик юҡ. Бөгөн Муаммари Каддафи мөйөшкә ҡыҫылған януарҙы хәтерләтә. Ә мөйөшкә ҡыҫылған януар бар асыу-ярһыуы менән дошманына ташлана, быының өсөн бары тик ваҡыт ҡына талап ителә.

Баш күтәреүселәр ҡулы менән полковник власын алып ташлауҙы һәм Ливияны ҡулға төшөрөүҙе күҙаллаған коалиция оҙайлы хәрби операциянан һуң да үҙ теләгенә ирешә алманы һәм ваҡыт менән һыналған, ышаныслы юлдан китергә булды, күрәһең. Был исул "Кеше лә юҡ - проблема ла юҡ" тип атала. Шулай булмаһа, 25 апрелгә ҡараған төндә НАТО ғәскәрҙәре Ливияның баш ҡалаһын, атап әйткәндә, Каддафи резиденцияһын ҡаты утҡа тотмаҫ ине, сөнки төрлө мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Каддафи һәм уның ғаиләһе нәҡ Баб-эль-Азизия резиденцияһы аҫтындағы бункерҙа. Коалицияның ҡайһы бер вәкилдәре полковникты физик юҡ итеү тураһындағы фекерҙе күптән хуплай. Шул уҡ ваҡытта бындай юлдың ООН резолюцияһын боҙоу икәнлеген аңлаған сәйәсмәндәр ҙә бар. Ләкин быға тиклем былдай резолюциялар уларҙы туҡтатаманы һәм бынан һуң да "теҙгендә тотор" тип тулы ышаныс менән әйтеп булмай.

Әлбиттә, Каддафиҙы бер ғәйепһеҙ тип әйтеп булмай. Уны диктаторға тиңләүселәр ҙә, күрәһең, яңылышмай. Ләкин Төньяҡ альянс иҫбатлағанса, уның үҙ халҡын күпләп юҡ итеүгә, йәғни геноцидҡа тиң операциялар әҙерләүе хаҡында мәғлүмәт бик аҙ, төрлө имеш-мимештәрҙән башҡа ышандырырлыҡ дәлилдәр юҡ. Каддафиҙың бары тик илдәге сыуалыштарҙы баҫтырыу маҡсатында алып барылған эшмәкәрлеген Көнбайыш үҙенә ҡулайлаштырып, геноцид хаҡында фекер йөрөтөп, үҙ ҡағиҙәләрен урынлаштырырға тырышыуға һиҙа алып килмәнеме? Әгәр шулай икән, ни өсөн һуң башҡа ғәрәп илдәрендә лә, мәҫәлән Бахрейн, Сирия, Йәмендә барған ошондай уҡ хәлгә "күҙ йомоп" ҡарайҙар? Ғөмүмән, Ливиялағы хәлдәргә бер яҡлы ғына ҡараш ташлап фекер йөрөтөп булмай һәм ярамай ҙа. Ә бөгөн һуғыш бөтөп, властан Каддафи китһә, икенсе Ливия, йәғни тыныс һәм демократик Ливия үҫеш юлын башлаясаҡ тип уйлағандар төптә хаталана.

Һуғышта дөрөҫтәр ҙә, яңылышыусылар ҙа булмай, бары тик баҫып инеүселәр һәм үҙ илен һаҡлаусылар бар. Уларҙың һәр береһе үҙен хаҡлы тип уйлай, ләкин хаҡлыҡтың сиге ҡайҙан үтеүен бер кем белмәй.

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ...

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ӘКИӘТТӘРЕН...

## барыбер нығыраҡ ярата балалар

**Замана нисек кенә үҙгәрмәһен, ниндәй генә дәүерҙә йәшәмәйек, бер күренеш үҙгәрмәй: өләсәйҙәр, әсәйҙәр сабыйҙарын яндарына ултыртып, тылсымлы әкиәттәр һөйләй. Әкиәт иленә инеп аҙашҡан кескәйҙәр һаман да Урал батыр менән бергә изгелек өсөн көрәшә, Ҡыҙыл ҡалпаҡлы ҡыҙ булып ҡурҡыныс бүренән ҡаса, кейек-януарҙар менән урман гиҙә. Хәйер, сабыйҙар ғына түгел, беҙ, ололар ҙа, әкиәт иленә барып юлыҡҡанда донъябыҙҙы онотабыҙ икән дә.**

Ошо аҙнала башҡорт телендә әкиәттәр һөйләүсе балаларҙың II "Һаумы, һаумы, әкиәт!" ҡала конкурсының йомғаҡлау һәм бүләкләү тантанаһы беҙҙе тағы ла әкиәт иленә алып ҡайтты. Төрлө әкиәт геройҙары булып кейенгән кескәйҙәр әҫәрләнеп әкиәт һөйләгәндә бөтә тамашасылар ҙа үҙен әкиәт илендә тип хис итте. "Алтынай" студияһы ойошторған был конкурс быйыл икенсе тапҡыр ғына уҙғарылыуына ҡарамаҫтан, шул тиклем күп ҡатнашыусылар һәм тамашасылар йыйҙы. Был турала Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов: "Конкурс бөтәһе 700-ҙән ашыу баланы йәлеп итте һәм икенсе тапҡыр уҙғарылған ошо сара баш ҡалабыҙҙың ғына түгел, ә республикабыҙҙың да иң матур байрамдарының береһенә әүерелде. Ошо конкурс ярҙамында кескәй дуҫтарыбыҙға үҙҙәренең ижади һәләтен үҫтерергә, ҙур сәхнәгә сығып сығыш яһарға



мөмкинлек тыуҙы. Иң мөһиме: әкиәт конкурсы балаларға туған телен онотмаҫҡа, өйрәнергә, яратырға ярҙам итә", - тине һәм конкурстың балаларҙың ижади, шиғри һәләтен үҫтереүҙә, фекерләү, телмәр, тауыш мәҙәниәтен камиллаштырыуҙа, әкиәтселәр һәм сәсәндәр мәктәбен тергеҙеүҙә ҙур әһәмиәткә эйә булыуын билдәләне.

Өс номинация буйынса (бәләкәй төркөм - мәктәпкәсә йәштәге балалар, уртансы төркөм - 1-4 класс, өлкән төркөм 5-7 класс уҡыусылары) уҙған ҡала конкурсында бөтәһе 65 бала һәм 8 фольклор коллектив ҡатнашты. Әлбиттә, жюри ағзаларына донъя халыҡ әкиәттәрен башҡорт телендә башҡарыусы береһенән-береһе бәләкәй балалар араһынан еңеүселәрҙе билдәләүе еңел булмағандыр. Ғәҙел баһа менән төрлө йәштәге балалар араһында Гран-при 178-се балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Салауат Әбделвәлиевҡа, Дим районының 123-сө лицей уҡыусыһы Дим Ямуровҡа, 122-се Башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Индира Солтановаға бирелде.

**Теманы дауам итеп:**

**Диана Вәкилова, Өфө ҡалаһының 20-се башҡорт гимназияһының 6-сы класс уҡыусыһы: Мин "Һаумы, һаумы, Әкиәт!" конкурсында "Өс иҫәр ҡыҙ менән бер аҡыллы ҡыҙ" әкиәтен һөйләп, III урын алдым, шулай уҡ коллектив менән ҡуйған спектаклдә уйнап, "Иң сағыу образ тыуҙырғаны өсөн" номинацияһын яуланым. Мине уҡытыусым Фәниә Вәлиәхмәт ҡыҙы әҙерләне. Әкиәттәрҙе бәләкәй саҡтан яратам, бигерәк тә башҡорт халыҡ әкиәттәре оҡшай. Әсәйем гел әкиәттәр һөйләне, яңы-яңы әкиәттәр китабы ала торғайны. Уҡырға өйрәнгәс, әкиәттәрҙе рәхәтләнеп үҙем уҡый башланым.**

**Салауат Әбделвәлиев, 178-се балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе: Мин конкурста "Башаҡ" әкиәтен һөйләнем. Ул әкиәтте миңә әсәйем өйрәтте. Гран-при яулағаным өсөн бик ҡыуандым. Әкиәттәр тыңларға яратам, әсәйем әкиәт уҡығанда шаярмайым, шым ғына тыңлап ятам. "Бүре менән кәзә", "Аҡъял батыр", "Алпамыша батыр" әкиәттәре оҡшай. Ул әкиәттәрҙе яттан белмәйем, ә "Башаҡ"ты миңә әсәйем көн һайын һөйләне, шуға ятлап алдым.**

**Гөлнәзирә Моратшина, 13-сө башланғыс мәктәп-балалар баҡсаһының III класс уҡыусыһы: Шул тиклем башҡорт халыҡ әкиәттәрен яратам. Уларҙы инде ятлап бөтһәм дә тағы тыңлағы килеп тик тора, һис тә ялҡытмай. Был конкурста мин "Ете ырыу" тип аталған өләсәйем һөйләгән әкиәтте башҡарҙым һәм "Өләсәйем әкиәте" номинацияһында еңеп сыҡтым. Белорет районы Манышты ауылында йәшәүсе Мөнирә өләсәйем әкиәттәрҙе шул тиклем күп белә. Был әкиәтте ул әсәйемә, ә әсәйем миңә һөйләне. Йоҡларға ятыр алдынан әкиәттәр уҡыһам, йәки әсәйем һөйләһә, насар төштәр күрмәйем, тыныс йоҡлайым.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

## З. БИИШЕВА ИСЕМЕНДӘГЕ БАШҠОРТОСТАН "КИТАП" НӘШРИӘТЕ ТӘҠДИМ ИТӘ:




### "Хеҙмәт геройҙары"

Күптән түгел донъя күргән "Хеҙмәт геройҙары" йыйынтығында Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, I, II, III дәрәжә Хеҙмәт Даны ордены кавалерҙарының исемлеге тупланған. Был юғары исемдәргә ауыл хужалығын, мәҙәниәтте, фәнде үҫтереүгә мөһим өлөш индергән төрлө һөнәр эйәләре лайыҡ булған. Республикала Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме - 244 , I, II, III дәрәжә Хеҙмәт Даны ордены 17 кешегә бирелгән. Ҡыҫҡаса биографик белешмәлә геройҙарҙың исеме, фамилияһы, атаһының исеме, тыуған (үлгән) йылдары, белеме, эшмәкәрлеге, наградаланған йылы тураһында тулы мәғлүмәт бирелгән. "Хеҙмәт геройҙары" китабы илебеҙҙең киләсәге өсөн көс һалған хеҙмәт уҙамандарының исемдәрен мәңгеләштереү маҡсатында нәшер ителде.

### "Башҡортостан яҙыусыларының тыуған төйәге"

"Башҡортостан яҙыусыларының тыуған төйәге" тип аталған плакатта сағыу төҫтәр менән Башҡортостан Республикаһының картаһы төшөрөлгән, һәр ҡала, район исеме тәңгәлендә билдәле яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың исем-фамилияһы, йәшәгән йылы тамғаланған.



Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаттары, Башҡортостандың халыҡ шағирҙары, халыҡ яҙыусылары исемдәренә лайыҡ булыусыларҙың ҡаҙаныштары күрһәтелгән. Был плакат уҡытыусылар, студенттар, мәктәп уҡыусылары, ғөмүмән, әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн тәғәйенләнгән.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ВЛАСТЬ ЯУЛАҒАН ДУҪ...

## юғалған дуҫ

Кемдер унын өсөн ғүмерен биреүгә ҡарамаҫтан, идеяның да ысынбарлыҡҡа тап килмәүе бик мөмкин.

**(Икрам Антаки).**

Изгелек -ул һаңғырау ишетә, һуҡыр күрә ала торған нәмә.

**(Марк Твен).**

Үҙ-үҙенде яратыу теләһә ниндәй ярыҡ аша үтеп инә ала торған тойғо.

**(Уильям Хэзлитт).**

Ҡурҡаҡлыҡ шул тиклем зарарлы, сөнки ул файҙалы эштәргә йүнәлтелә торған ихтыярҙы тотҡарлай.

**(Рене Декарт).**

Ни тиклем ныҡышмалы алға барһағыҙ, шул тиклем нығыраҡ контролдә тотоласаҡһығыҙ.

**(Джеральд Арпино).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше үҙенең бер дуҫына ҡарата суд эше ҡуҙғата. "Мин алыҫ ергә сәйәхәткә киткәндә был дуҫыма өйөмдәге иң ҡиммәтле нәмә - ике бөртөк ынйыны һаҡлауға ҡалдырып торҙом.Ҡайтҡас, уларҙы һорап дуҫыма барҙым, әммә ул ынйыларҙы биреүҙән баш тартты..." ти ул судьяға. Дәғүәсе шунан һуң ынйыларҙың ниндәй рәүештә булыуын, ауырлығы күпме булыуын анығлап һөйләп бирә. Әммә дуҫы был дәғүәләрҙе кире ҡаға, мин бер ниндәй ҙә ынйы күрмәнем һәм алманым, тип раҫлай. Тәжрибәле судья яуапҡа тарттырылыусыны диҡҡәт менән тыңлай һәм күҙәтә. Шунан ул эште ҡарауҙы күсереүе тураһында белдерә. Бер нисә көндән судья баяғы дәғүәсе һүрәтләгән рәүештәге һәм ауырлыҡтағы туҡһан һигеҙ бөртөк ынйы һоратып ала. Уларҙы иҫке, өҙөлөргә торған епкә теҙҙерә. Шунан яуапҡа тарттырылыусыны саҡырып ала һәм уға: "Һине муйынсаҡтар теҙергә оҫта тип ишеттем. Бына һиңә йөҙ бөртөк ынйы, шуларҙы матур, ныҡлы епкә теҙеп килтерсе", - ти. Яуапҡа тарттырылыусы өйөнә ҡайтып,ынйыларҙы епкә теҙә башлай һәм уларҙың йөҙ түгел, ә туҡһан һигеҙ бөртөк кенә икәнен аңлап ҡала. "Моғайын, икәүһен юлда юғалтҡанмындыр инде", тип уйлай ҙа үҙендәге дуҫының ике ынйыһын ҡушып теҙергә мәжбүр була. Иртәгәһенә ынйы муйынсаҡты судьяға алып китә. Судья ынйыларҙы һанай һәм уларҙың йөҙ бөртөк икәнен күргәс, йылмайып, яуапҡа тарттырылыусыға: "Мин бит һиңә туҡһан һигеҙ ынйы биргәйнем. Икәүһе артыҡ һәм улар һинең дуҫыңдыҡы булып сыға инде", - ти. Шулай итеп ынйылар үҙ хужаһына ҡайтарыла. Ә яуапҡа тарттырылыусы ҙур сумма штраф түләй..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 1629